ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 апрель (алағарай) 2016

№ 17 (695)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Байлыҡ - байлыҡ түгел,** берлек - байлыҡ



3

**Көслө ташҡын көтөлә**



4

**Мәскәү - калаларҙың калаһы...** шул уҡ ваҡытта - башҡорт калаһы ла



8-9,11

**Бәхет нигеҙе -** тән сәләмәтлеге



12

ТВ-программа 14

*Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ, йортоңда аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡеүәтеүе теләһәң, "Киске Өфө" - шундай бер сара. Уға яҙылырға онотма һәм таныштарыңды ла был хаҡта иҫкәрт. Индекс - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин. Шул уҡ индекс менән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 511 һум 02 тингә яҙыла ала.*

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Урындағы үҙидаралыҡ органдарының халыҡ йәшәйешен хәстәрләү буйынса эшен нисек баһалайһығыҙ?

***Финзирә БУЛАТОВА, Салауат районы Мөрсәлим ауылының ветерандар советы рәйесе:*** Ауылыбыҙ ҙур ғына беҙҙең, эшләргә, яҡшы итеп йәшәргә теләге булған кеше шөғөлөн таба, үҙ йүнен күрә. Ләкин шулай ҙа халыҡтың төп терәге бөгөн - ауыл хакимиәте. Уның башлығы Альберт Ямалетдин улы Сабитовтың эшмәкәрлегенә һүҙ тейҙерерлек түгел, ауыл халҡының ышаныслы терәге ул. Кем генә ниндәй йомош юл менән хакимиәткә килмәһен, берәү ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Башҡа тарафтарҙа, оптималләштереү һылтауы менән мәктәп, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары ябылып ятҡанда ла беҙҙә, шөкөр, 11 йыллыҡ мәктәп гөрләй, балалар баҡсаһы эшләй, участка больницаһы, хатта аптекабыҙ бар. Ул ғына ла түгел, беҙҙең больница тирә-яҡ ауылдар халҡын да хеҙмәтләндерә. Баш табибыбыҙҙан уңдыҡ - йәш белгес Резеда Әлибаева йүгереп йөрөп эшләй, унан бик ҡәнәғәт халыҡ, тик бына һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китәйем - ул үҙе район етәкселеге хәстәрлегенә мохтаж: ауыл табибын торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Ауыл хакимиәте тырышлығы менән экологик өмәләр йыш үткәрелә, шишмәләребеҙҙе ҡарап, хәстәрләп торабыҙ. Ҡәҙер төнөндә һыуы атылып сығып, икенсе ғүмерен кисереүсе Ҡәҙер шишмәбеҙҙе айырыуса ҡәҙерләйбеҙ. Күптән түгел ауыл хакимиәтенең ағинәйҙәр ҡоро менән берлектә үткәрелгән "Ҡар һыуы" байрамы ла тап ошо хаҡта һөйләне. Йолаларыбыҙҙы тотоу, ер-һыу байлыҡтарын ҡәҙерләү, иманыбыҙға тоғролоҡ кеүек маҡсаттар һәр бер сараның иғтибар үҙәгенә ҡуйыла. Һыу тигәндән, эсәр һыуға зар-интизар булып йәшәгән байтаҡ ауылдар барлығын беләм. Ә беҙҙә, бәхеткә күрә, был мәсьәлә лә күптән хәл ителде. Һыу ебәреү башняһы төҙөлгәс, ауыл урамдарына колонкаларҙан килә һыу. Оло ер, Мөрсәлим йылғалары аша күперҙәребеҙ ҙә бар, юлдар ҡараулы, ҡырсын түшәп, тигеҙләп торалар. Ҡыҫҡаһы, ауыл хакимиәте ысын хужаларса, халыҡ мәнфәғәте хаҡына тырышып эшләй. Был йәһәттән барыһы ла һәйбәт.

Ә шулай ҙа ауылыбыҙҙағы айырым кешеләр аңына бәйле хәл ителәһе бер мәсьәлә өйкәй күңелде: ул да булһа - эскелек. Дөрөҫ, ауыл хакимиәте ағинәйҙәр ҡоро менән берлектә был юҫыҡта байтаҡ эш башҡара: әлеге "айырым кешеләр", йәғни ситтән, Силәбе тарафтарынан арзан, әммә зыянлы спиртлы эсемлектәр ташып һатыусы эшем эйәләре менән күҙмә-күҙ һөйләшеп, урыны менән уларҙы оялтып, намыҫҡа саҡырыусы әңгәмәләр үткәреп тора ул, ләкин әлеге шыйыҡсаны һатып алыусылар барҙа, аҡса ҡолона әүерелгән был алыпһатарҙарҙы хаҡ юлға күндереүе, ай-һай, ҡыйын хәл... Беҙгә улар менән түгел, ә улар ташып һатҡан ана шул ағыулы эсемлекте ҡулланыусылар менән нығыраҡ эшләргә кәрәк, тип уйлайым мин. Һәм беҙ шул йүнәлештә эшләйбеҙ ҙә. Эскелек менән булған ҡайһы берәүҙәрҙе үҙебеҙҙең ҡорға йәлеп итеп, йырға һәләттәрен баһалап, концерттарҙа ҡатнаштырып йөрөтә торғас, андарына килеп, әҙәм төҫөнә ингәндәр ҙә юҡ түгел. Эскелек менән шөғөлләнгән ғаилә башлыҡтарына ла тынғы бирмәҫкә тырышабыҙ: саҡыртабыҙ, кешесә генә ипле итеп һөйләшәбеҙ, аңлатабыҙ. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына ауыл хакимиәте йыйылыш үткәреп, халыҡтың тормош хәле, экологик һорауҙар, эскелеккә ҡаршы көрәш мәсьәләләрен тикшерҙе. Һәр кем үҙен борсоған һорауҙарға яуап алғандыр, тип уйлайым. Әйтеүемсә, Мөрсәлимдең ағинәйҙәр ҡоро һәр төрлө мәҙәни сараларҙы күп ойоштора, ләкин беҙ уларҙың күбеһен бәләкәй генә иҫке клубта үткәрергә мәжбүрбеҙ. Мөрсәлим кеүек ҙур ауылға заманса мәҙәниәт йорто күптән кәрәк - был район етәкселегенә беҙҙән бер сәләм булһын әле.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ЯПРАҠТАРҘА - БӘПӘЙ ЕҪЕ

*Япраҡтарҙа - бәпәй еҫе,*
*Ут-йәшелдән - йәшәү төҫө,*
*Лепкә кеүек йоҡа ғына,*
*Ҡайҙан ала йәшәү көсөн?*

*Япраҡтарҙа - бәпәй еҫе,*
*Инәләре - тын шатлыҡта,*
*Муйылдарҙың һөтө ташҡан,*
*Күҙ сағыла саф аҡлыҡтан.*

*Япраҡтарҙа - бәпәй еҫе,*
*Ҡырауҙан да ҡурҡмағандар,*
*Ғүмер биргәс, үҙ йүнен бирер,*
*Тәүәккәлгә ҡот-мағаи бар.*

*Япраҡтарҙа - бәпәй еҫе,*
*Һәр беренең - үҙ өлөшө,*
*Һутлы тупраҡ емләп тора,*
*Ҡойондора ләйсән төшөп.*

*Япраҡтарҙа - бәпәй еҫе,*
*Ҡыуаныстан яҙ туй ҡормош,*
*Бәпәй тыуыу шатлығынан*
*Ҡуҡтәр салют атып тормош -*
*Дауам итә ерҙә тормош.*

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӘШТӘРҘЕҢ ӘХЛАҠЛЫЛЫҒЫ...

## ололарҙан килә

***Светлана БУРАНБАЕВА, Сибай педагогия колледжы ветераны, РФ мәғариф отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Мин Сибай педагогия колледжының башланғыс синыф уҡытыусылары әҙерләгән бүлектә 43 йыл эшләнем. Ошо ваҡыт эсендә Урал арьяғы райондары мәктәптәренә генә түгел, күрше өлкәләр өсөн дә башҡорт телен белгән йәш педагогтар тәрбиәләнек. Беҙ уларҙы кешелекле, ололарға ҡарата ихтирамлы, тыйнаҡ, әҙәпле булырға өйрәтә торғайныҡ. Шуға күрә, хәҙерге йәштәрҙең бер ҡулында тәмәке, икенсеһендә иҫерткес эсемлек тотоп йөрөүен күрһәм, йәнем әсей. Был ҡылыҡтары уларҙы һис биҙәмәй. Ә бит хәҙер ундай "батырлыҡтар" ваҡыты үтте. Йәмғиәттә лайыҡлы урын биләү, уңышлы кеше булып танылыу өсөн юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәү кәрәк. Тик ынтылышлы, тырыш, бер эштән дә ҡурҡмаған, моратына өлгәшмәйенсә эшен ташламаған кешеләр генә хыялдарын тормошҡа ашыра ала. Юғиһә, арабыҙҙа маҡсатына өлгәшеү өсөн бер файҙалы эш атҡармаһа ла, мин-минләнеп йөрөүселәр ҙә осрай. Уларҙы ятып мүкләнгән таш менән сағыштырам, сөнки был әҙәмдәр күпме генә һөйләһә лә, алдында арҡыры ятҡан ағасты буйға әйләндереп һалмай. Әгәр ҙә һин: "Хәҙер компьютер артында ултырып торам да, был эште аҙағыраҡ эшләйем", - тип бушты-бушҡа уҙғарырға яратаһың икән, хыялыңда йөрөткән мул тормош, ҡиммәтле машина, юғары вазифалы эш һәм башҡа "кәрәктәр"ҙә һуңға ҡаласаҡһың.

Бөйөк мәғрифәтсе шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигән шиғыры һәр заманда актуаль. Йәштәр донъялағы үҙгәрештәрҙе, сәйәси һәм социаль-иҡтисади хәлдәрҙе дөрөҫ баһалай белһен, яҡшылы һәм яманды айырырға өйрәнһен, үҙенә генә түгел, ә халҡына ла файҙа килтергән юлды һайларға аҡылы етһен өсөн уҡымышлы, белем даирәһе киң булырға тейеш. Әхлаҡлы, рухлы, илһөйәр һәм тырыш милләт кенә заман һынауҙарын лайыҡлы үтә ала. Быны беҙ, Сибай ҡалаһының "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары, бик яҡшы аңлайбыҙ һәм ҡулыбыҙҙан килгәнсә милләттәштәргә лә еткерергә тырышабыҙ. Сибай ҡалаһының бөтә белем усаҡтары менән берлектә йәш балаларҙы үҙебеҙҙең башҡорт мөхитендә рухи ҡиммәттәрҙе, әхлаҡи нормаларҙы күңелдәренә һалып тәрбиәләйбеҙ. Хәҙер инде үҙебеҙҙең тәжрибәнән сығып, шуны әйтә алам: ололар үҙҙәре битараф булмаһа, балалар улар әйткән һәр һүҙҙе тыңлап ҡына тора. Бары тик үҙ ваҡытында һүҙ һәм эшен менән үрнәк күрһәтергә генә кәрәк. Шуға күрә, баяғы һүҙ башында телгә алған йәштәрҙең холҡондағы етешһеҙлектәр оло быуын кешеләренең үҙҙәренең тәртибенән килә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Урындағы үҙидаралыҡ органдарының халыҡ йәшәйешен хәстәрләү буйынса эшен нисек баһалайһығыҙ?



(Башы 1-се биттә).

***Зөбәйер ХӘТМУЛЛИН, хеҙмәт ветераны, Белорет ҡалаһы:*** Күптән түгел район гәзитендә баҫылған "йорт һатам" тигән иғлан буйынса районыбыҙҙың Мәхмүт тигән ауылына барып ҡайттым. Пенсияға сыҡҡас, ҡалалағы фатирымды балаларға ҡалдырып, әбейем менән барып йәшәрлек берәй матур ғына ауылдан ҙур булмаған йорт һатып алыу ине ниәтем. Таныштарыма барып төшкәс тә, тәбиғи, ауыл хәлдәре, ундағы социаль уңайлыҡтар менән ҡыҙыҡһындым, урындағы халыҡ менән аралашып һөйләштем. Тәбиғәте иҫ киткес, әлбиттә, һүҙ ҙә юҡ: алыҫтан күгәреп кенә Ирәмәл күренеп ята. Мәхмүт ауылы үҙе ошо тирәнән инеш алған Ағиҙел һыуын һыулай. Йәй был яҡтарҙа емеш-еләк, айырыуса беҙгә кәрәкле көртмәләнең бер нисә төрө емерелеп уңа икән. Ҡартлығыңды тыныс ҡына үткәрергә тағы ни кәрәк? Тик был ауылдың социаль хәле миңә әллә ни оҡшап етмәне. Ауыл хакимиәте бынан 7-8 километрҙа ятҡан Николаевкала урынлашҡан. Йомош-юлың төшкәндә хатта башланғыс мәктәбе лә булмаған ошо ауылға йәйәүләп килеп-китеп йөрөргә кәрәк буласаҡ - был яныһыҡ мине ҡыуандырманы. Быныһы ярар. Күсһәк, үҙебеҙ менән 10 йәшлек ейәнебеҙҙе лә алмаҡсыбыҙ. Мәктәптәрен барып ҡарағас, бөтөнләй күңелем төштө. Башҡорт мәктәбе - быныһы бик яҡшы, тик математика, физика кеүек фәндәрҙән уҡытыусылары юҡ икән, ә минең ейәнем ошо фәндәрҙе бигерәк үҙ итә. Быныһына ла түҙергә булыр ине, әгәр мәктәп бинаһы ... емерелергә тормаһа. Унда барып ҡараған сақта ямғыр яуа ине. Түшәменән һыу тамып торған мәктәп, шулай итеп, ошонда төпләнергә тигән өмөттө бөтөнләй һүндерел ҡуйҙы. Юлдары ла юл тип әйтерлек түгел, автобус онотҡанда бер йөрөй, тип иштетем. Был ауылдың киләсәге, перспективалары тураһында һөйләшергә уйлап, Николаевкаға ике тапҡыр барып ҡайттым, тик хакимиәт башлығын ғына осрата алманым... Ахырҙа, башлығы булмаған ауылда йәшәргә башыма тай типмәгән әле, тип, бик ҡыйын булһа ла өйҙө икенсе ауылдан һайларға ҡарар иттем. Йәл, әлбиттә, ни тиһәң дә Мәхмүт ауылында яҡшы дуҫтарым, таныштарым йәшәй, унан тәбиғәте лә күңелемә яткайны. Мине был тарафтан өркөткән тағы бер нәмә - ауылда эскелектең көслө булыуы. Башҡаһына түҙергә лә булыр ине, ә бына тап ошо күренеш ниәтемдән баш тартыуға төп сәбәп булды ла инде...

***Суфия ҒӘБИТОВА, Баймаҡ районы Темәс ауылының хеҙмәт ветераны, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Беҙҙең Темәсте белмәгән кеше һирәктер. Ни тиһәң дә, тарихта Башҡортостаныбыҙҙың тәүге баш ҡалаһы тигән даны ҡалған. Башҡорт халҡының данлы улдары Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин һәм башҡаларҙың исемдәре беҙҙең тарафтарҙа ныҡлы эҙ ҡалдырған. Тап беҙҙә 1936-1956 йылдарҙа бик күп билдәле шәхестәрҙең һәм тотош Урал арьяғы уҡытыусыларының "альма-матеры" булған Темәс педучилищеһы эшләгән. Ошондай данлы ауылдың башлығы булыу үҙе ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә был вазифалағы кешегә. Дөрөҫөн әйткәндә, Темәс ауыл Советына рәйес итеп Йәнсурин Рауил Хөрмәт улын тәғәйенләгән сакта район етәкселәре лә быны яҡшы аңлағандар, тип уйлайым. Темәсте белгәндәргә Йәнсуриндың исеме лә яҡшы билдәле, сөнки бергә үҫте, бергә күтәрелде улар. Рауил Хөрмәт улы Темәсте күтәрһә, Темәс уны күтәрҙе. Бик шәп эшләгән көслө сақтары булды ауыл башлығының. Айырыуса үткән быуаттың 90-сы шанлы йылдарында халҡыбыҙҙың милли үҙаны күтәренкелек рухы кисереп, республикабыҙға үҙаллылыҡ яулаған йылдарҙағы уның эшмәкәрлеген, иҫ киткес әүҙемлеген билдәләп китмәйенсә булмайҙыр. Йәнсурин эшләгән йылдарҙа, әйтеүемсә, Темәс күҙгә күренеп үҙгәрҙе, үҫте. Бөгөн дә ул ошо вазифала эшләүен дауам итә. Темәстең инфраструктураһы бер көйгә һалынып алған, әллә ни проблемалар борсомай, тип әйтер инем... Тик шулай ҙа һуңғы йылдарҙа халыҡты шөбһәгә төшөргән бер бәлә килеп сыҡты. Ул да булһа, шул ер мәсьәләһе. Беҙҙең Темәс һәм уның эргә-тирә ауылдарында ниндәйҙер ООО килеп сыҡты ла, төҙөләш ташы сығарыу һылтауы менән еребеҙҙе аҡтарғылап, тәләфләй башланы. Ҙур-ҙур карьерҙар, хәүефле соҡорҙар барлыҡҡа килде. Ауылдарыбыҙ экологияһына ҙур һәләкәт менән янай бындай "эшмәкәрлек". Быны ошо мәсьәләлә ауыл хакимиәте йәмәғәтселек менән берлектә элеккеләй ныҡлыҡ, илһөйәрлек рухын алға ҡуйып, ерҙәребеҙҙе һаҡлап ҡала алманы, үкенескә. Хәйер, был хакимиәт иркенән генә лә тормағандыр инде, улар өҫтөнән дә "аҡыллы баш"тар күп бит. Шулай ҙа еребеҙҙе телһә кем телһә ҡайҙан килеп, үҙ мәнфәғәттәрендә ауыһыҙ рәүештә файҙаланып ятыуҙы бер ҙә килешкән эш тип әйтә алмайым. Һүҙ ҙә юҡ: мәктәптәребеҙ эшләй, юлдарыбыҙға асфальт түшәлде, эсәр һыуға йонсомайбыҙ; һәр төрлө мәҙәни саралар ҙа үткәрелеп тора. Әлеге көндә башлығыбыҙ ауыл көтөүе мәсьәләһен хәл итә. Һәр кемгә иғтибарын бүлеп, йомоштарын тыңлай, бик кеселекле. Минең дә тура ярып әйтеү гәҙәтемде белә ул, ләкин бер ҡасан да үпкәләп, кенә ҡыуып йөрөмәй. Был да бик мөһим ауыл башлығы өсөн. Шулай кәрәк тә, сөнки ауыл хакимиәте башлығы - ул ауыл халҡының күҙ төбәп торған терәге лә, тәрбиәсеһе лә, яҡлаусыһы ла, тип аңлайым мин. Халыҡ мәнфәғәте менән бәйле аҫаба ерҙәребеҙҙе ҡурсалаусы ла булһын ине улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанға эш сәфәре менән Федерация Советы Рәйесе Валентина Матвиенко килде. Башҡортостандың баш ҡалаһында Валентина Матвиенко "Интеллектуаль милек өлкәһендә төбәк программалары һәм проекттары - йәштәр күҙлегенән" тип аталған бөтә Рәсәй йәштәр ғилми-ғәмәли конференцияһында ҡатнашты, шулай уҡ "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә булды.

✔21-23 апрелдә республикала Свердловск өлкәһе башҡорттары мәҙәниәте көндәре үткәрелде. Күрше төбәктең рәсми делегацияһын мәҙәниәт министры урынбаҫары Галина Головина етәкләй. Ҡунаҡтар өсөн бай мәҙәни программа әҙерләнгәйне. Улар театрҙа спектакль ҡараны, Башҡортостан Милли музейында булды. Сәфәр Башҡорт дәүләт филармонияһында Свердловск өлкәһенең үҙешмәкәр артистары һәм коллективтары әҙерләгән концерт менән тамамланды.

✔Башҡортостанда йәшәүселәр ипотека өсөн уртаса 18,097 мең һум түләй. Ошо күрһәткес буйынса республика "СеверИнформ" мәғлүмәт-аналитика агентлығы төҙөгән рейтингта 50-се урынды биләй. Эксперттар Росстат мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп тикшереү үткәргән. Республикала ипотека торлаҡ кредитының уртаса күләме - 1,439 миллион һум, кредит буйынса ставка 12,59 процент тәшкил итә. Төбәктә йәшәүселәрҙең уртаса айлыҡ килеме 24,9 мең һумға баһалана.

✔1 апрелгә төбәктә 28 мең рәсми теркәлгән эшһеҙ иҫәпләнгән. Ошо йылдың беренсе кварталында республика предприятиелары һәм ойошмалары 41,5 мең вакансия булыуы тураһында белдерҙе. 2016 йылдың 1 апреленә республиканың вакансиялар банкында 26 меңдән ашыу буш эш урыны иҫәпләнгән. Тәҡдим ителгән вакансияларҙың 76 процентын эшсе һөнәрҙәр тәшкил итә. Шуның менән бергә эшһеҙҙәрҙең 58,7% - ҡатынҡыҙҙар, 20% - 16-29 йәшлектәр.

✔"Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән "Бал әсәһе" документаль фильмы Швецияла "КиноРюрик" рус киноһы фестивалендә конкурстан тыш күрһәтелде. Режиссер Айнур Асҡаровтың был фильмы "КиноРюрик" фестивалендә ҡатнашҡанға тиклем бер нисә фестивалдә наградалар һәм призлар яулап өлгөрҙө. Улар араһында - Санкт-Петербургта XIII "ПитерКит" фестивалендә Гран-при, "Кадр, алға!" фестиваленең "Иң яҡшы документаль фильм" номинацияһында приз, "АгроСвит-2013" XX халыҡ-ара телефестиваленең "Фильм геройына" призы.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# БАЙЛЫҠ - БАЙЛЫҠ ТҮГЕЛ,

## берлек - байлыҡ

**Илдәге көрсөк менән бәйле (был көрсөк тигән нәмә мәңге бөтмәҫ, ахыры) иҡтисад торошо һаман мандый алмай йонсой. Иҡтисадсы эксперттар фекеренә ҡарағанда, хәлдәр яҡын арала ғына яҡшырырға уйламай ҙа, буғай. Халыҡтың реаль килеме кәмегәндән-кәмеп, фәҡирлек сигенә сығыусылар һаны йылдам арта бара. Быға нигеҙләмә булырҙай факторҙар бихисап, ләкин беҙ шуларҙың тик береһе һәм берәгәйлеһенә туҡталмаҡсыбыҙ: йәғни халыҡ барлы-юҡлы ғына аҡсаһын нимәгә тотона?**



Законды һанлап, алдағы көнөн уйлаған кеше, тамағы ас булһа ла, пенсияһын йә эш хаҡын алғас та коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысын түләп ҡуйырға ашыға. Был маҡсаттарға уның айлыҡ табышының яртыһы булмағанда ла, өстән бер өлөшө һеүләп кенә тора: телефон, электр энергияһы, газ, фатир өсөн коммуналь хеҙмәттәр хаҡы... Шуға өҫтәп, бына ике йыл самаһы капиталь ремонт өсөн арыу ғына взнос та елкәгә ятты. Уны таныуға теләмәйенсә тартҡылышыусыларҙың да ауыҙын яптылар. Был хаҡта "Тура бәйләнеш"тә ил Президентына һорау ҙа биреп ҡараныуҙар, аптырағас. "Капремонт - кешеләр өсөн бик ҡүңелһеҙ өлкә. Уның күп кенә кешенең асыуына тейгәнен мин беләм һәм был дөрөҫ тә. Ләкин бына Конституция суды хөкүмәт ҡарарының хаҡлығын раҫланы бит әле..." тип яуапланы В. Путин был мәсьәләгә ҡарашын белдереп. Ә шулай ҙа, Президент фекеренсә, был өлкәлә "халыҡтың реаль килемен сығып" эш итеү кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Шул уҡ ваҡытта яңы төҙөлгән йорттарҙың яҡындағы 15-20 йыл эсендә ремонтҡа мохтаж булмаясағы ла ана шул ысынбарлыҡтан сығып эш итеүгә ҡарайҙыр инде, моғайын. Юғиһә, ул аҡсаларҙың кеҫә ҡалынайтырға әүәҫләнеп киткән бурҙар кеҫәһенә инеп ятыуы бер ни тормаҫ! Президент әйтеп китеүенсә, былтыр, мәҫәлән, халыҡтан 97 миллиард һум йыйылған, ә шуның ни бары 25 миллиард һумына ғына ремонт эштәренә килешеү төҙөлгән. 72 миллиарды ҡайҙалыр "эленеп" тора. Бурҙар төлкөләй хәйләкәр булһа ла, миллиардтар бешмәгән йөҙөм түгел шул - ҡуҙ асып йомған арала эләктереп алмаҫтар, тимә...

Президентҡа бирелгән "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡтарҙың халыҡты талауына ҡасан сик ҡуйылыр, был өлкәлә ҡасан тәртип булыр?" тигән һорау ҙа бик урынлы тойолһа ла, ул да риторик тәртиптә генә яңғыраны шикелле. Ә-ә-ә, СССР иҫегеҙгә төштәмә, тип әйтке килде һорау биреүсегә, тик бында уны гәйепләп булмай бит инде. Ул замандар вайымһыҙлығы тарихта тороп ҡалды күптән. Әле бит тәрҙә арыҡғында ҡырағай баҙарҙың кискен елдәре исә башлауға ла ҡырҡ былтыр булып килә: ниндәй тотороҡлоҡ хаҡында һүҙ булыуы мөмкин? Тарифтар артыуына бер ниндәй "тормоз"дар ҙа юҡ хәҙер. Ул йыл һайын артҡандан-арта ғына барасаҡ. Ил башлығы билдәләп китеүенсә, былтыр тарифтар артыуы уртаса 8,7 процентҡа күҙалланған булһа, ул әлеге ваҡытҡа 8,5 процент тәшкил итте. Июлдән ул тағы ла 4 процентҡа күтәрелеүе ихтимал, ләкин быны төбәктәр үҙҙәре хәл итә: арттырырғамы, әллә бик аҙға - 10 проценттан да күтәрмәҫкәме? Шуныһына ла шөкөр итер инек тә, тик бына тиҙҙән почта йәшниктәребеҙгә фатирҙарҙың кадастр хаҡынан һалымға квитанция килеп төшһә, ни эшләрбеҙ икән? Бюджет наҡыҫлығын ҡаплауҙы гел генә халыҡ елкәһенә һалып тороу ҙа теңкәгә тейә шул. Был йөктө күтәрешеүгә бай ҡатламдар ҙа ҡушылһа, халыҡҡа еңелерәк тура килер ине, ләкин сереп байығандарҙа халыҡ ҡайғыһы төштән һуң. Бөтәһе лә Сергей Ролдугин түгел шул. Ул, исмаһам, ана, музыка ҡоралдары менән булһа ла ярҙам итергә тырыша ватандаштарына. Беҙҙә бит нисек: фәҡиренә лә, байына ла килеме ни саҡлы булыуға ҡарамаҫтан, берҙәм ставка - 13 процент һалына һалым. Сит илдәрҙәгеҫә, кеҫәһенә ҡарап һалым түләү формаһын күптән индерергә ваҡыт та бит... Рәсәй Дәүләт Думаһы "Ғәҙел Рәсәй" менән Коммунистар партияһы тарафынан тәҡдим ителгән прогрессив һалым шкалаһы тураһындағы өс закон проектын кире ҡаҡты инде. Бүлешергә, илебеҙҙә күтәрешергә теләмәй бай ҡатлам, гәрсә ошо илдә йәшәп, әҙәм булып китһәләр ҙә... Ошо көндәрҙәге бер яңылыҡ күңелдә йылыта шулай ҙа. Дәүләт корпорациялары (тик бында байлығы менән маҡтанған "Роснано"исемлектә юҡ) һаҡлыҡҡа һалған депозиттарынан алынған табыштарының яртыһын бюджетҡа күсерәсәк. Күптән кәрәк ине: иш янына ҡуш булыр, исмаһам.

Халыҡ аҡсаһы тураһында ине һүҙ. Өҙөлөп-йолҡолоп, үҙенә тороп ҡалғаны хаҡында, дөрөҫөрәге. Рәсәй халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһы үткәргән социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, әлеге көрсөк мәлендә рәсәйҙәрҙең сығымдарының теүәл 50 проценты аҙыҡ-түлек өлөшөнә тура килә. Был нимәне аңлата? Рәсәйҙәрҙең һис тә генә бирәнгә әйләнеүен аңлатмай был иллә мәгәр. Ябай халыҡтың матди хәле мөшкөлләнә барыуы уларға тәү кәрәк-яраҡ сәнәғәт тауарҙарҙан баш тартып, аҡсаһын фәҡәт аҙыҡ-түлеккә генә тотоноуы тураһында һөйләй ул. Быйыл февралдә халыҡтың аҙыҡ-түлеккә киткән сығымдары (алкоголь менән тәмәке изделиеларын да иҫәпләп) илдәге ваҡлап һатыу тауар әйләнешендә иң күп өлөштө - 50,1 процент тәшкил иткән. Парадокс, ләкин аҙыҡ-түлеккә киткән сығымдарҙың арта барыу тенденцияһы иҡтисад фәнендә халыҡтың реаль килеменең кәмеүен һәм ярлы ҡатламдарҙың артыуын сағылдыра икән. Бына шуға күрә лә бая һүҙ һиңгайғында ғына әйтеп кителһә лә, был яҙманың "ҡыҙыл ебе" булған әлеге прогрессив һалым темаһы көн тәртибенән төшмәйәсәк: илгә килгәнде берҙәләп күтәреү фарыз. Бай күңелен май бөрөр, тиһә лә мәҡәл, байҙың малы - ярлынан, тип тә әйткәндәр. Ә беҙ бөгөнгә "Артыҡ байлыҡ аҙҙырыр", "Байлыҡ - байлыҡ түгел, берлек - байлыҡ" тигән аҡылға туҡталайыҡ, булмаһа...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

УҠЫЙБЫҘ...



# ҺҮҘҘӘРҘЕҢ...

## тарихи ерлеге бар

**Телебеҙҙең иҫ китмәле байлығына, матурлығына һоҡланып бөтә алмайым. Башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең килеп сығышы тураһында фекер йөрөткәндә лә бик күп ҡыҙыҡлы асыштарға юлығаһың, үҙең дә һиҙмәҫтән, тарих төпкөлөнә барып инәһең.**

Мәҫәлән, "сынаяҡ" һүҙен алып ҡарайыҡ. Был ҡушма һүҙ "сын"+"аяҡ" һүҙҙәренән барлыҡҡа килгән. "Сын" - Ҡытайҙы аңлата (беҙҙең Көйөргәҙе районында "син" тиҙәр, был дөрөҫөрәк тә). Аяҡ - ул һауыт тигән һүҙ. Шуға ла, туҫтаҡҡа ҡойоп, ҡымыҙ таратыусыны йәки көрәгәнән әсе бал һалып биреүсене "аяҡсы" тигәндәр, йәғни ул мәжлесте, табынды алып барыусы була. Хәҙергесә әйткәндә, тамада инде. Тимәк, сынаяҡ - ҡытай һауыты булып сыға. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, фарфорҙы ҡытайҙар уйлап сығарған бит. Сынаяҡ беҙгә монголдар йә Урта Азия халыҡтары аша килгән, тип фаразларға мөмкин.

Бер ваҡыт эштә коллегам менән телебеҙҙәге ҡайһы бер һүҙҙәрҙең килеп сығышы тураһында һөйләшеп киттек.

- Башҡортса бойҙай, ҡарабойҙай, борсаҡ, арпа, тары, арыш һүҙҙәре бар икән, тимәк, халҡыбыҙ был ашамлыҡтарҙы борондан уҡ үҙе иккән, - тинем мин. Быларҙы беҙгә Стәрлетамаҡ педагогия институтында уҡыған саҡта уҡытыусыбыҙ Эрнст Фәйзрахман улы Ишбирҙин әйткәйне.

Коллегам былай тине:

- Башҡорт телендә "арыҫлан" һүҙе лә бар, улайһа, Башҡортостанда арыҫландар йәшәгәнме ни?

- Йәшәгән, әлбиттә, "Урал батыр" эпосының геройҙары арыҫланға атланып йөрөгән бит, - тинем.

Әңгәмәсем көләмһерәп кенә ҡуйҙы. Ошо һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәй, республика биләмәһендәге мәмерйәлә арыҫлан һөйәктәре табылыуы тураһында мәғлүмәт билдәле булды...

Мәмерйә арыҫланы бик боронғо йыртҡыс, ул хәҙерге арыҫландарҙан айырыла: ялбыр ялы юҡ, аяҡтары оҙон, ҡаҙыҡ тештәре ғәләмәт ҙур, хатта яңаҡтарынан тышҡа сығып ыржайып тора. Мәмерйә арыҫланы булғас, мәмерйәгә керкеп үлгән инде ул, шунда һөйәктәре ятып ҡалған.

Быны мин шуға яҙам: Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы бер тапшырыуҙа алып барыусы, ул һөйәктәрҙе ҡайҙандыр килтереп һалғандар, тип әйтеп ысҡындырҙы. Арыҫландар ҙа, хатта айыуҙар ҙа мәмерйәгә үҙҙәре инеп үлә. Әйтер алдынан һәр һүҙҙе уйларға, шуны факттар, тарихи материалдар менән дәлилләргә кәрәк тә инде. Исмаһам, бөйөк эпосыбыҙ "Урал батыр"ҙы ҡат-ҡат уҡырға кәрәк. Шунда инде тарих та, һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дәлилләгән факттар ҙа. Бына шулай, тел һәм тарих - айырылғыһыҙ төшөнсәләр.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓3 майҙан 10-на тиклем Рәсәй тимер юлдары Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға алыҫ араға йөрөүсе поездарҙа бушлай йөрөү хоҡуғын бирә. Билет һатып алғанда Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусының йәки инвалидтың таныҡлығы йә иһә "Ленинградты обороналаған өсөн" миҙалы менән бүләкләү тураһында таныҡлыҡ талап ителә. Был ваҡытта поездарҙа йөрөү сикләнмәй.

✓Силәбе өлкәһендә Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Дарвин Хәйретдиновтың иҫтәлегенә бағышланған икенсе Башҡорт халыҡ ижады фестивале ойоштороло. Сара 30 апрелдә Ҡонашаҡ районының Дружный ҡасабаһы Мәҙәниәт йортонда үтә. Фестивалде ойоштороусыларҙың береһе Хабрахман Мансуров һүҙҙәренсә, сараны уҙғарыуҙың төп бурысы башҡорт халыҡ ижадының мәҙәни традицияларын һаҡлауға һәм популярлаштырыуға, шулай уҡ талантлы башҡарыусыларҙы эҙләүгә һәм уларға ярҙам итеүгә ҡайтып ҡала.

✓Силәбе өлкәһендәге Башҡорт йәштәре союзы 10 йыллыҡ эшенә йомғаҡ яһаны. Сығыш яһаусылар билдәләүенсә, 10 йыл эсендә Башҡорт йәштәре союзы спорт, мәҙәни һәм белем биреү йүнәлешендә йәҙҙәрсә проекттарҙы тормошҡа ашырҙы. Улар ярҙамында башҡорт теле һәм башҡорт бейеүе, милли уйын ҡоралы ҡурайҙа уйнау курстары асылды. Шулай уҡ "Афарин" футбол командаһы һәм Силәбе йүгереү клубы ойошторолдо. Эш йомғаҡтары буйынса киләһе өс йылға ойошма рәйесе һайланды. Ул - хәрәкәттең әүҙем ағзаһы Владислав Габов, тип хәбәр иттеләр Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының "Ҡара йөҙҙәр" спектакле "Алтын битлек" премияһына лайыҡ булды. Театрҙың баш рәссамы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Альберт Нестеровҡа "Костюм буйынса иң яҡшы рәссам эше" номинацияһында премия бирелде. Альберт Нестеров 2012 йылдан ошо театрҙа баш рәссам булып эшләй. Сценограф, костюмдар һәм яҡтыртыу буйынса рәссам, театрҙың реклама продукцияһы дизайнеры. "Алтын битлек" премияһына 72 спектакль һәм 212 режиссер, актер, рәссам дәғүә итте. Уларҙың тулы исемлеген премияның сайтында табырға мөмкин.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Йортоғоҙҙо һыу баҫа башлаһа, бер ваҡытта ла паникаға бирелмәгеҙ. Хәл-торошто объектив баһалап, бәлә хаҡында күршеләрегеҙҙе иҫкәртегеҙ. Электр селтәрен һүндерегеҙ, газды һәм һыуҙы, тәҙрә-ишектәрҙе ныҡ итеп ябығыҙ.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# ИЛ ХӨКҮМӘТЕ...

## нимә вәғәҙә итә?

**Рәсәй Премьер-министры Дмитрий Медведев ил Хөкүмәтенең уҙған йылдағы эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре буйынса Дәүләт Думаһы депутаттары алдында сығыш яһаны. Илдең иҡтисади, социаль, сәйәси, ғөмүмән, бөтә яҡлап та еңел булмаған осорҙа булыуын күҙ уңында тотҡанда, Премьер-министрҙың был мәғлүмәттәре депутаттар өсөн генә түгел, ә барыһына ла ҡыҙыҡлы булыуы билдәле.**

Тәү сиратта, Хөкүмәт башлығы былтыр Рәсәйҙә булған ауыр ситуацияларҙы барланы. Улар иҫәбенә ул ил иҡтисады өсөн "ҡаты шаңҡыу" килтергән нефткә хаҡ төшөүен, тышҡы санкцион баҫымды, бөтә донъя баҙарының тотороҡло булмауын һәм Рәсәй иҡтисадының структур проблемаларын индерҙе. Шул уҡ ваҡытта, тине ул, ил иҡтисады һуңғы ике йылда үҙгәреү кисерҙе һәм яңы шарттарға яраҡлашыу мөмкинлеге тапты. Күрсәк ҡағылмаған кеше юҡ бөгөн. Уның эҙемтәләрен ил халҡы әҙерәк тойһон өсөн Хөкүмәт барыһын да эшләй, тип белдерҙе Д. Медведев. "Ил өсөн тәрән структур реформалар кәрәк икәнен яҡшы аңлайбыҙ, ләкин улар халыҡ иҫәбенә эшләнергә тейеш түгел. Беҙҙең хаталарға хаҡыбыҙ юҡ, шуға күрә Хөкүмәт барыһын да үлсәп кенә эш итә", тине ул.

Премьер бөгөнгө көндә илгә аҡса етмәгәнлеген дә билдәләне, ләкин хәлде яҡшыртыу өсөн Хөкүмәт "аҡса баҫыу станогын тиҙлеккә көйләү яҡлы түгел" икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был, уның фекеренсә, инфляцияны көсәйтәсәк һәм халыҡтың килемнәрен ҡиммәтен генә төшөрәсәк. Иҡтисадты ниндәйҙер ҡаты тәртипкә буйһондороу ҙа ыңғай һөҙөмтәләргә килтермәйәсәк, тине ул, сөнки был "эшҡыуарлыҡты, тимәк иҡтисадты ла һыңдырасаҡ".

Илде перспективалы үҫтереү өсөн Хөкүмәттең киләһе йүнәлештәрҙе - бюджет сәйәсәтен оптималләштереү, сеймал булмаған экспортты үҫтереү һәм импорт әйберҙәрҙе алыштырыу ысулдарын табыу, эшлекле мөхитте, социаль өлкәне яҡшыртыуҙы тәү маҡсат итеп ҡуйыуын иҫкә төшөрҙе Премьер-министр. Шулай уҡ ул килем һәм сығымдарҙы өс йыллыҡҡа планлаштырыуға ҡайтыу һәм ағымдағы йылдың бюджетына әллә ни ҙур үҙгәрештәр индерелмәйәсәге тураһында ла әйтеп үтте.

Күптәрҙе, тәбиғи, һалымдарға ҡағылышлы мәғлүмәт ҡыҙыҡһындырҙы. Был өлкәлә, Д. Медведев белдереүенсә, 2018 йылға тиклем үҙгәрештәр булмаясаҡ. Сығышта яңғыраған тағы бер мөһим яңылыҡ - ул ағымдағы йылдың 1 июленән МРОТ-тың 7,5 меңгә тиклем күтәрелеүе. Шулай уҡ Премьер-министрҙың киләһе йылдан башлап пенсияны индексациялауҙы нормаль юлға һалыуға ышанысы тормошҡа ашыр, тип өмөт итке килә.

Ер алыу, үҙ торлағын булдырыу күп ғаиләләр өсөн актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала килә. Ошо өлкәгә туҡталып, Д. Медведев "төбәк властары алдағы өс йылда күп балалы ғаиләләрҙе ер менән тәьмин итеүҙә булған сиратты бөтөрөргә", тейеш, тип билдәләне.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# КӨСЛӨ ТАШҠЫН КӨТӨЛӘ



*Өфө ҡалаһының Калинин районы.*

**Белгестәр фаразлауынса, Башҡортостанда быйыл һуңғы 8 йылда иң көслө ташҡын көтөлә. Йылғаларҙа һыу күтәрелеүҙең иң бейек нөктәһе ошо алдарға тура киләсәк, йәғни һыу кимәле 8 метрғаса етеүе мөмкин тип күҙаллана. Ә бынан өс йыл элек Белорет, Архангел һәм башҡа бер нисә район ауылдарын һыу баҫҡан ваҡытта һыу кимәле 6,5 метрға ғына күтәрелгән була.**

Шулай итеп, 22 апрель иртәһенә Дуҫлыҡ монументы тәңгәлендә Ағиҙел йылғаһы 11 сантиметрға күтәрелеп, һыу кимәле 726 сантиметр булһа, Шаҡша районында Ҡариҙел 16 сантиметрға күтәрелеп, 812 см-ға еткән. Димдә лә Бочкарево ауылы тәңгәлендә һыу кимәле 332 сантиметрғаса күтәрелгән. Башгидромет фаразлауынса, Ағиҙел йылғаһында һыу ташҡыны - 830, Ҡариҙелдә - 860, Димдә 680 сантиметрғаса етеүе ихтимал.

Әле Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларында ауылдарҙың тағы ла һыу аҫтында ҡалыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, Интернет селтәренә Бөрйән, Әбйәлил райондарынан фотолар һалалар, шулай уҡ Стәрлетамаҡта өс тиҫтәнән ашыу ихата һыу эсендә ҡалһа, Нуриман районының Иҫке Бәҙәй ауылы халҡына ла хәүеф янай. Әлегә ауылға һыу инмәгән, ләкин ошо көндәрҙә һыу кимәле күтәрелеүен дауам итһә, 140 кеше, шуларҙың яртыһы - балалар, йәшәгән Мәктәп, Үҙәк, Йәштәр урамдары һыу тоткононда ҡалыуы мөмкин.

Ә әлегә Өфөнөң өс районы биләмәләре һәм юлдарын һыу баҫҡан. Мәҫәлән, Калинин районында "Солнечные пески", "Рочер" ял базаларына һәм "Речные зори" профилакторийына алып барыусы юлдар һыу аҫтында ҡалған, учреждениелар эше ваҡытлыса туҡтатылған. Киров, Ленин райондарында ла бер нисә урамды һыу баҫҡан. Бынан тыш, Киров районының - "Зеленый мыс", Калинин районының "Металлург", "Керамика 3" коммерция булмаған баҡсасылыҡ йәмғиәттәренә, Ленин районының Романовка һәм Козарез ауылдары араһындағы күпер аша сығыу юлы быуылған.

Шулай ҙа, уйламағанда ҡапыл урамығыҙҙы, йортоғоҙҙо һыу баҫа башлаһа, бер ваҡытта ла паникаға бирелмәгеҙ. Хәл-торошто объектив баһалап, бәлә хаҡында күршеләрегеҙҙе иҫкәртегеҙ, ололарға, инвалидтарға, балаларға ярҙам итегеҙ. Электр селтәрен һүндерегеҙ, газды һәм һыуҙы, тәҙрә-ишектәрҙе ныҡ итеп ябығыҙ. Әгәр өйөгөҙҙө йылытыу мейесе бар икән, мотлаҡ уның утын һүндерегеҙ. Мөмкин тиклем бейеккәрәк, мәҫәлән, йорт ҡыйығына менеп, бәхетһеҙлек тураһында сигнал бирегеҙ - был ҡотҡарыусыларға һеҙҙе тиҙерәк табырға ярҙам итер. Тик үҙ аллы эвакуацияланырға тырышмағыҙ. Мөмкинлегегеҙ булһа, "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" номерына шылтыратығыҙ. Был номерға сим-картағыҙ ҙа, аҡсағыҙ булмағанда ла, хатта клавиатурағыҙ блокта торғанда ла шылтыратырға мөмкин.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАҺАЛА!

**Өфө халҡы хәҙер 2015 йыл йомғаҡтары буйынса ҡала хакимиәтенең, шулай уҡ халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеүсе дәүләт һәм муниципаль ойошмаларҙың эш һөҙөмтәләрен баһалай ала.**

Был йәһәттән 22 апрелдән 22 майға тиклем муниципалитеттың сайтын файҙаланып, "Башҡортостан Республикаһы тауышы" порталында интернет тауыш биреү уҙғарыла. Унда ошо порталда теркәлеү үткән һәр кем ҡатнаша ала. Бының өсөн Интернетҡа тоташтырылған компьютер йәки мобиль ҡоролма булыуы ғына шарт.

Халыҡ фекерен белешеү транспорт хеҙмәтләндереүе ойошмалары, автомобиль юлдарын тәртиптә тотоу һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү һөҙөмтәлелеген күтәреү маҡсатында РФ Президенты һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығының указдарын тормошҡа ашырыу өсөн уҙғарыла. Тауыш биреүҙә ҡатнашып, Һеҙ көндәлек тормош сифатын яҡшыртырға ярҙам итә алаһығыҙ. Бының өсөн golos.openrepublic.ru/polls/39 һылтанмаһы буйынса инеп, теркәлергә кәрәк. Һөҙөмтәләр менән Өфө ҡалаһының рәсми порталында интернет тауыш биреү тамамланғандан һуң танышырға мөмкин.

# КЕМДЕҢ БАЛКОНЫ МАТУР?

**Майҙа баш ҡалала һәр йылда уҙғарылған иң яҡшы балкон (лоджия) һәм ихаталағы иң яҡшы сәскә түтәленә конкурс старт ала.**

Баһалама ағзалары үҙенсәлекте, сағыулыҡты, сәскәләрҙең, үҫемлектәрҙең төрлөлөгөн һәм башҡа күрһәткестәрҙе ҡараясаҡ. Конкурстың шарттары менән рәсми сайтта танышырға мөмкин.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓25 апрелдән 25 майға тиклем Башҡортостанда автомобиль юлдарын тәҙҡәләндереү буйынса айлыҡ башлана. Тәҙҡәләндереү буйынса саралар юлдарҙа техник, санитар торошто яҡшыртыу, тәртип урынлаштырыу һәм торaҡ пункттарҙағы юлдарҙы тейешле хәлгә килтереүҙе күҙ уңында тота. Ай дауамында юлдарҙы ремонтлау, юл буйы һыҙаттарын тәртипкә килтереү, юл ситтәренә күп йыллыҡ үләндәр сәсеү бурысы тора.

✓Башҡортостанда янғын хәүефһеҙлеге айлығы иғлан ителде. 25 апрелдән 25 майға тиклем торaҡ пункттар, баҡсасылар ширкәттәре һәм йорт-ҡаралты тирәһендә сүп-сар яндырырға ярамай. Дачаға йөрөүселәргә, экологик өмәләрҙә ҡатнашыусыларға сүп-сарҙы махсус сүплеккә ташырға кәрәк. Усаҡ яғыуға тыйыуҙы боҙған осраҡта административ штраф һалынасаҡ.

✓Өфөлә йәшәүселәрҙең 76 проценты хаҡлы ялға сыҡҡас эшләргә теләй, тип иҫәпләп сығарған HeadHunter эксперттары. Өфөләрҙең күпселеге сәләмәтлеге мөмкинлек биргәнгә тиклем эшләйәсәк. Бының төп сәбәбе - пенсияның етмәүе. Пенсиянан һуң да эштәрен дауам итергә теләүселәр араһында эшселәр һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре күп. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың һигеҙ проценты пенсия йәшенә етмәйенсә ялға китергә йыйына. Уларҙың яртыһы торлаҡты ҡуртымға биреүҙән килгән аҡсаға, банктағы проценттарға йәшәргә ниәтләй йәки ғаилә ағзаларына иҫәп тота.

✓26-28 майҙа Өфөлә "URALFEST" халыҡ-ара этник музыка фестивале уҙғарыла. Республика халыҡ ижады үҙәге проекты Башҡортостан Башлығының 9 миллион һумлыҡ грантына лайыҡ булды. Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, "URALFEST" - "Урал моңо" төрки йәштәрҙең халыҡ-ара конкурс-фестивален, Тальян байрамын һәм "Уйын" халыҡ байрамын берләштергән мәҙәни проекттар серияһы. Быйыл Рәсәй төбәктәренән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән: Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Алтай Республикаһы, Молдова, Дағстан, Татарстан, Хакасия, Ҡабарҙы-Балҡар, Ҡырым Республикаһы, Алтай крайынан артистар килеүе көтөлә.

✓Рәсәй тимер юлдары 10-17 йәшлек балаларға һәм үҫмерҙәргә 50 процентлыҡ йәйге ташлама бирә. Льгота 1 июндән алып 31 августа тиклем тиҙ йөрөшлө һәм пассажир поездарының плацкарт һәм дөйөм вагондарына билет һатып алғанда ғәмәлдә буласаҡ. Кассирға баланың паспортын йәки уның тыуыу тураһында таныҡлығын күрһәтергә кәрәк.

✓ Уҡыусыларға ижад итергә этәргес булһын тип, 3D-принтер һәм робот техникаһы буйынса түңәрәктәр ойоштороҙоҡ. Республика иҡтисад лицей-интернаты үткәргән робот төҙөү буйынса ярыштарҙа уҡыусылар әүҙем ҡатнаша.



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИҢЕБЕҘҘӘ...

## заман талабын тойоп



**Өфө ҡалаһының Дим бисҭәһендә урынлашҡан 102-се башҡорт гимназияһы 2005 йылдан алып ошо статусты йөрөтә. Белем усағында быға тиклем дә башҡорт телен төплө өйрәнеү яйға һалынған була. Бөгөн иһә гимназия уҡыусылары башҡорт теле генә түгел, башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы буйынса ла төплө белем ала.**

Милли рухта тәрбиәләү, туған телдә иркен һөйләшергә өйрәтеү маҡсатында башҡорт балаларын махсус булдырылған гимназист класында уҡытабыҙ. Ә башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәрҙе айырым класта уҡытабыҙ. Был уҡыусылар башҡа предметтар менән бер рәттән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ла яҡшы өлгәшһә, артабан гимназист класына күсеп ултыра ала. Был сәмләнеп, тырышып белем алырға бер сәбәп кенә. Шуға күрә, мөмкинлек булһа, баш ҡаланың микрорайонға беркетелгән башҡа башҡорт мәктәптәрендә лә ошондай айырым синыфтар асыу яҡшы булыр ине, тигән фекерем менән уртаҡлашҡы килә.

Беҙҙең гимназия заман талаптарына яраҡлаштырылған белем усаҡтарының береһе. Электрон белем биреү буйынса иң алдынғылар исемлегенә ингәнбеҙ. Һәр кабинет электрон таҡта, проектор, компьютер менән йыһазландырылған, интернет селтәре үткәрелгән. Быйылғы бишенсе һәм алтынсы синыфтар электрон әсбаптар менән ҡуллана башланы. Ә педагогтарҙың эшен еңеләйтеү ниәтендә электрон журналдарға күстек. Ундағы яҙмаларҙы уҡытыусылар ҙа, атаәсәләр ҙә күҙәтеп бара ала. Уҡыусы нindәй билдәгә өлгәшә, уңыштары бармы, дәрескә йөрөгәнме, юҡмы - барыһы ла асыҡ күренеп тора. Электрон журналға ҡуйылған билдәләрҙе үҙгәртеп булмай, шуға уҡыусылар дәрестәргә етди әҙерләнеп килә. Ғөмүмән, һәр яҡлап заман менән бергә атларға, файҙалы яңылыҡтарҙы үҙләштерергә тырышабыҙ. Уҡыусыларға ижад итергә, яңылыҡтар уйлап табырға этәргес булһын тип, 3D-принтер һәм робот техникаһы буйынса түңәрәктәр ойоштороҙоҡ. Республика иҡтисад лицей-интернаты үткәргән робот төҙөү буйынса ярыштарҙа 5-6-сы синыф уҡыусылары әүҙем ҡатнаша. Ҡала һәм республика кимәлендә ойошторолған бер саранан да ситтә ҡалғаныбыҙ юҡ, спорт һәм фән өлкәһендә берҙәй яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшәбеҙ. Иң мөһиме, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең башҡорт мөхитенә ылыҡтырыу ниәтендә уҙғарылған сараларға йәлеп итәбеҙ. Улар үҙҙәре лә "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсын, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиаданы, төрлө ярыштарҙы һәм байрамдарҙы көтөп ала. Быуындар араһындағы бәйләнеш һаҡланһын, башҡорт халҡының рухи мираҫы, бөйөк шәхестәре, ғөрөф-ғәҙәттәре онотолмаһын өсөн ҡулыбыҙҙан килгән тиклем көс һалабыҙ. Әйткәндәй, гимназияның заманса талаптарға яраҡлы итеп төҙөлгән стадионы бар. Балаларға спорт менән етди шөғөлләнеү, сәләмәт тормош алып барыу өсөн унда бөтә уңайлыҡтар тыуҙырылған.

Ҡайһы бер белем усаҡтарында балаларҙың тәртип боҙоуы, күңелһеҙ хәл-ваҡиғалар тураһында ишетергә тура килгеләй. Беҙҙең гимназияла ошондай күңелһеҙ хәлдәрҙән һаҡланыу өсөн 30 видеокамера, ингән урында турникет ҡуйылған. Инеү урынын контролдә тотоусы система һәр кемдең бармаҡ эҙҙәрен "таный". Бындай ҡоролма кем сәғәт нисәлә гимназия бинаһына ингән, ҡасан ҡайтырға сыҡҡанын күҙәтеп барыуға уңайлы. Ә видеокамералар Милли белем биреү буйынса дәүләт идаралығы, Мәғариф министрлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы каналдарына тоташтырылған. Камералар көтөлмәгән ҡурҡыныс хәлдәрҙән һаҡланыу ысулы ғына түгел. Улар Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырғанда ла кәрәкле: йыл да сығарылыш уҡыусылары беҙҙең гимназия бинаһында ошо кәрәкле һынауҙы үтә. Быны улай, һәр яҡлап та алдынғы белем усағы булырға, уҡыусыларыбыҙҙың аң-белемен арттырырға, нарсалыҡтарҙан ҡурсаларға ынтылабыҙ.

Илһам ҒАЙСИН,
102-се башҡорт гимназияһы директоры.

Сарала күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе барлыҡ ҡала халҡы ҡатнаша ала. Быныӊ өсөн 12 майҙан 30 июлгәсә Комсомол урамы, 165/1, 213-сө бүлмә йәки <u>nasibullina@ugh.ufanet.ru</u> электрон почта адресы буйынса "Өфө ҡалаһы торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-на ғариза бирергә кәрәк. Бәйләнеш өсөн телефон: 223-66-33. Еңеүселәр грамоталар һәм призлар менән бүләкләнәсәк. Кем алыҡ?

# СОЦИАЛЬ ПРИЮТ

**Шаҡша бисҭәһендә ауыр тормош хәлендә ҡалған һәм ҡунып сығыр урыны булмаған граждандар өсөн социаль приют эшләй башланы. Бында ваҡытлыса йәшәү урыны биреүҙән тыш, юғалған документтарҙы тергеҙергә лә ярҙам итәләр.**

Приютҡа эләгер өсөн флюорография үтергә һәм ҡан анализы тапшырырға кәрәк. Социаль приют хеҙмәте түләүле, уның ҡарауы бында бер нисә көндән алып бер йылға тиклем йәшәргә мөмкин. Уның адресы: Олимпия урамы, 47/1. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8 (347) 267-21-22 телефоны буйынса алырға була.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# РӘМИ ШИҒЫРЫ...

## украинса яңғырай



**Былтыр Өфөлә беренсе тапҡыр Вики-һабантуйҙа булып, башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығына, украин халҡы хөрмәтенә һаҡланған һәйкәлдәрҙең күплегенә, шулай уҡ бындағы туған телгә, тарихҡа, крайҙың традицияларына булған ихтирамға һоҡланып ҡайтҡайным.**

Шундай матур танышлыҡтар менән илһамланып, бер ни тиклем ваҡыттан һуң украин Википедияһында Башҡортостан тураһында мәҡәләләр яҙыу буйынса уҙғарылған конкурс призерҙарының береһе булдым. Уның барышында республика тураһында тағы ла күберәк мәғлүмәт йыйҙым. Бигерәк тә Икенсе донъя һуғышы ваҡытында Өфөгә "Әҙәбиәт һәм сәнғәт" гәзитенең (1965 йылдан "Мәҙәниәт һәм тормош" тип атала) эвакуацияланыуы ҡыҙыҡһындырҙы. Бына бер йылға яҡын мин ошо гәзиттең баш мөхәррире булып эшләйем һәм баҫманың 1942 -1943 йылдарҙа Өфөлә донъя күреүе мине ҡалағыҙға тағы ла нығыраҡ яҡынайтты.

Минә быйыл да Башҡортостанға, башҡорт Википедияһы мөхәррирҙәре ойошторған "Янгантау - 2016" вики-семинарына килергә, бынан 70 йылдан ашыу элек "Мәҙәниәт һәм тормош" гәзите редакцияһы урынлашҡан бинаны күреү мөмкинлеге тыуҙы. Һуғыш йылдарында был редакция хәҙер Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың музейы урынлашҡан бинала һыйыныу тапҡан. Ул ғына ла түгел, бөйөк украин шағиры Павло Тычинаның инициативаһы менән 1942 йылдың 4 мартында Украина Яҙыусылар союзы Мәжит Ғафуриҙың ижад кисәһен уҙғара һәм был хаҡта "Әҙәбиәт һәм сәнғәт" гәзитенең 6-сы һанында мәҡәлә донъя күрә. Әйткәндәй, был хаҡта башҡорт Википедияһында ла мәҡәлә бар.

Был - Башҡортостандағы коллегаларымдың саҡырыуын ҡабул итеүгә этәргән бер генә күренеш. Шулай уҡ был сәфәргә украин шағиры Михаил Петренконың тыуыуына 200 йыл тулыуға арналған инициативаны иң тәүгеләрҙән булып башҡорт әҙиптәре күтәреп алыуы ла илһамландырҙы. Уның үлемһеҙ "Дивлюсь я на небо" шиғырын башҡорт теленә Гүзәл Ситдиҡова, татар теленә Марсель Сәлимов тәржемә иткән.

Тағы ла Урал тауҙарын күреү, башҡорт халҡының милли геройы Салауаттың тыуған ерендә булыу, Башҡортостан украиндары менән танышыу һәм, әлбиттә, башҡорт Википедияһының үҙенсәлекле мөхәррирҙәре йәмғиәтендә эшләү телгә лә этәргес биргәндер.

"Янгантау-2016" семинарының көтөлмәгән һөҙөмтәһе булып Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын украин теленә тәржемә итеүем торҙо. Уны башҡорт коллегаларым да, Украина Яҙыусылар союзы ағзалары ла юғары баһаланы. Быға тиклем шиғырҙар тәржемә иткәнем юҡ ине, әммә башҡорт һәм украин телдәренең фонетикаһы, ритм темпы шул тиклем оҡшаш булып сыҡты, хатта шиғырға һалынған хис-тойғоно тулы килеш украин уҡыусыға еткерергә мөмкин булды.

Ошо бай йөкмәткеле, һоҡланғыс вики-семинар тамамланғандан һуң Башҡортостанға килеү сәбәптәре тағы ла артты. Уңайҙан файҙаланып, "Викимедиа РУ" коммерция булмаған предприятиеһы директоры Владимир Медейкоға, башҡорт Википедияһы хакимы Зөфәр Сәлиховҡа, шулай уҡ республикала үткән һуңғы көнөбөҙҙә ҡыҙыҡлы һәм иҫтәлекле ваҡиғалар менән байытҡан Башҡортостан украиндарының "Кобзарь" республика милли-мәҙәни үҙәгенә ихлас рәхмәтемде еткерәм.

Евгений БУКЕТ,
"Культура і життя" гәзитенең баш мөхәррире.
Киев ҡалаһы, Украина.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һипкелдәр

❖ Яҙҙың сағыу нурҙары күптәргә һипкелдәр ҙә бүләк итә. Унан халыҡ медицинаһы түбәндәге кәңәштәр тәҡдим итә: 1 ҙур булмаған картуфты ҡырып, 1 ҡалаҡ миндаль көрпәһе, 3-4 ҡалаҡ әсегән һөт, 1 балғалаҡ үҫемлек майы өҫтәргә, битлекте 20 минуттан һалҡын һыу менән йыуып төшөрөргә. Һуңынан бит тиреһенә ярашлы крем һөртергә.

❖ Иртән һәм кисен ҡаты сәй һөртһән, һипкелдәр нығ күҙгә ташланып тормаҫ. Шулай уҡ әсегән һөт һөртөү ҙә файҙа бирә.

❖ Ҡыярҙың орлоғон ҡырып алып (3 ҡалаҡ), 1 стакан араҡы ҡойоп, 12 сәғәт төнәтәләр. Иртәле-кисле битте таҙатырға. Орлоҡтар урынына ваҡланған ҡыяр ҡулланырға ла була.

❖ Бөпембә япраҡтары һутын көнөнә 3-4 тапҡыр һипкелдәргә һөртергә.

❖ 1-әр ҡалаҡ миләүшә, календула, һары мәтрүшкә, шиңмәсгөлдө (бессмертник) 1 литр ҡайнар һыуҙа 2-3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан эсергә.

❖ Һипкелдәргә лимон, ҡыяр, һуған һуты һөртергә була. Иҙелгән еләктән битлек яһарға була.

❖ 1 йомортҡа ағына 2 ҡалаҡ 1 процентлы аш һеркәһе өҫтәп, миксерҙа болғатырға, бит тиреһенә һөртергә.

## Подагра

❖ 100 грамм бәпембә сәскәләрен ваҡ итеп турарға, бер аҙға ултыртып торғас, өҫтөнә сыҡҡансы йод төнәтмәһе ҡойорға, 4 көн төнәтергә. Кисен подагра шешектәре булған аяҡтарҙы йылы һыуҙа тоторға, ҡоророрға, проблемалы урындарға төнәтмәнән сетка эшләргә. Организм дауаға өйрәнә башлағас, иртән дә ҡабатларға. Дауаланыу курсы - 2 аҙна.

## Невралгия

❖ Меңъяпраҡ бил һыҙлауынан һәм невралгияһынан ярҙам итә. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙаҡ та үтмәҫ, ауыртыу баҫылыр.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Һәр ваҡыт ни менәндер мәшғүл булығыҙ. Был ер йөҙөндәге иң арзан дауа һәм ул иң файҙалыһы ла. Йөҙөгөҙҙәге сырайығыҙ кейгән кейемегеҙҙән күпкә мөһимерәк икәнде онотмағыҙ.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# КӘКҮК СӘЙЕ

**Кәкүк сәйен май айында, кәкүк килгәс, үткәрә торғайнылар. Кәкүк сәйенә сыҡмаҫтан алда малайҙар йә һыбай, йә йәйәү өй һайын ашамлыҡ йыя торғайнылар. Кемдер һөт, май, ҡорот бирә, кемдер талҡан тартып бирә, йомортҡа, майлы икмәк йыйып алалар. Шунан ҡыҙ-ҡырҡын, ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә матур итеп кейенешеп, бала-сағалары менән ҡырға сығалар.**

Ғөрөф-ғәҙәтте белгән ауылдың өлкән әбейе нимә ҡуша, шуны эшләй торғайнылар. Кәкүк үҙе матур итеп ҡысҡырһа ла, кеше уға шомланып, шикләнп ҡарай торғайны. Шуға ҡырға сыҡҡан ыңғайы кәкүк ултырып саҡырған тирәк төбөнә аҡ ризыҡ - һөт, ҡатыҡ ҡоя торғайнылар. Малайҙар йомортҡа ла алып барып һалалар. Илгә именлек һорап, кәкүктән гел яҡшы теләктәр теләп, тирәк башына ҡарап ялбара торғайнылар. Ҡыҙҙар һылыу егеткә сыҡмаммы икән тип, кәкүктең күпме саҡырғанын һанай. Бер туҡтауһыҙ оҙаҡ саҡырһа - һылыу кейәүгә, әҙ генә саҡырһа - яман кейәүгә.

Әбейҙәр кәкүктән нисә йыл ғүмере барлығын һораған була торғайнылар. Күберәк саҡырһа, күберәк йыл вәғәҙә итә. Шуға рәхмәт йөҙөнән тирәк төбөнә һөтмө, ҡатыҡмы алып барып ҡоя торғайнылар. Унда "Наза", "Аҡ тирәк", "Күмер йөҙөк" кеүек уйындар уйнайҙар. Талпына-талпына кәкүккә оҡшатып бейей торғайнылар. Йырҙарҙы ла кәкүккә арнап йырлайҙар ине. Аҙаҡтан ҡалған ризыҡты тирәк төбөнә һалып китерҙәр ине.

Байрам кәкүк саҡыра башлағас, кәкүк емеше сыҡҡас үткәрелә. Ул көндө ҡарты, йәше урманға йүнәлә. Урманға барғас, малайҙар ҡоро сатыр-сотор йыйып килтерә, ҙурыраҡ ҡыҙҙар сәй ҡайната башлай. Башҡалар күп итеп һары сәскәле кәкүк емеше, умырзая йыйып алып килеп, бер оло һауытҡа ултырталар. Сәскәле һауыт табындың уртаһына ултыртыла.

Сәй ҡайнап сыҡҡас, табын башлана. Табын янында оло әбейҙәр булһа, бигерәк күңелле була. Сөнки улар ниндәй ҙә булһа әңгәмә һөйләй, ғибрәтле хәлдәрҙе телгә ала. Аҙаҡтан дөйөм уйындар башлана. Барыһы ла иғтибар менән кәкүк тауышын тыңлай, уға һорау бирә:

*- Моңло кәкүк,*
*Әйтсе әлүк!*
*Бөгөн миңә нисә йәш?*
*Моңло кәкүк,*
*Әйтсе әлүк,*
*Мин йәшәйем нисә йәш?*

Шунан кәкүк тауышын һанайҙар:

*- Берәү, икәү, өсәү...*

Кәкүк етене ҡысҡырып туҡтаһа, балалар хор менән ҡысҡыра:

*- Ете йәш! Ете йәш!*

Түңәрәк әйләнеп бергә йырлайҙар:

*- Кәкүк сәйе байрамына*
*Беҙ аҡ ҡалас бешерҙек.*
*Бына шулай ҡабарған,*
*Бына шулай бик бейек,*
*Бына шулай киңерәк,*
*Бына шулай түңәрәк.*

"Ҡабарған", "бик бейек" тигәндә тотоношҡан ҡулдар өҫкә күтәрелә, "киңерәк" тигәндә, түңәрәк киңәйтелә. Түңәрәк йырлап бөткәс, уртаға бер бала сыға һәм битен ҡулы менән ҡаплап тора, ул күрмәгәндә генә уйынды алып барыусы "ҡаласын" берәй балаға йәшерә. Ә хәҙер урталағы кеше "ҡаластың" кемдәлеген әйтергә тейеш. Әгәр ҙә дөрөҫ әйтһә, түңәрәккә барып тотона, уртаға "ҡалас" тотҡан бала сыға. Уйын шулай дауам итә. Урталағы кеше өс тапҡыр дөрөҫ әйтмәһә, уға "яза" бирелә. Уны йырлаталар йәки бейетәләр.

Малайҙар күберәк йүгереүҙә, һикереүҙә, көрәштә ярыша. Ә иң аҙаҡтан олораҡ бер үҫмер һәр балаға дөйөм һауыттан сәскә тарата. Сәскәләрҙе алып ҡайтҡас, һәр кем үҙенсә ҡәҙерләп ултыртып ҡуя.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*



# ӘҘӘПЛЕЛЕК...

## шул уҡ иманлы булыу инде

**Автобусҡа "Һаумыһығыҙ!" тиеп инеп, "Рәхмәт" тип төшкән ҡатынға күптәр ғәжәпләнеберәк ҡарай ине тәүҙә. Башҡаларҙың үҙенә сәйерһенеп ҡарағанын тойһа ла, ул, ғәҙәтенсә, иҫәнләшеп килеп инә, рәхмәт әйтеп төшөп ҡала.**

Күптән түгел был ҡатын менән бергәләп йәйәүләп ҡайтырға тура килде. Көн дә тиерлек осраған кеше, ысынлап та, яҡын таныш һымаҡ булып китә бит, һөйләшеп, ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ.

Ҡалаға күптән түгел генә күсеп килгән икән. Быға тиклем күрше район ауылдарының береһендә йәшәгән. Сығышы менән үҙе - ҡала ҡыҙы, тормошҡа сығып, утыҙ йылға яҡын ауылда йәшәгәндәр. Әсәһе ҡартайып, кеше көнлө булғас, мал-тыуарын һатып, йорт-ҡураһын бикләгәндәр ҙә ғаиләһе менән ҡалаға күскәндәр. Тормош иптәше вахта менән ситкә йөрөп эшләй, үҙе лә ҡала ойошмаларының береһенә урынлашҡан. Ҡала мөхитенә, кешеләргә өйрәнә алмауына зарланды ул.

- Ҡала халҡы бер-береһенән шул тиклем ситләшкән, - тип һөйләп китте яңы танышым. - Бына, мәҫәлән, үҙем бында ярты йылға яҡын йәшәйем, ә күршеләремде күргәнем юҡ. Ҡыҙыҡ, күршең менән һине ни бары бер нисә сантиметрлыҡ стена айыра, хатта карауаттарың йәнәш, ә һин уларҙы белмәйһең. Тәүҙәрәк танышыу, дуҫлашыу ниәте менән юҡ йомошто барып итеп, ишектәрен шаҡып ҡарағайным. Уларҙың йөҙөндә ғәжәпләнеү, аптырау күргәс, был уйымдан кире ҡайттым. Хәҙер ҡала фатирҙарының һәр береһендә тауыш үткәрмәй торған пластик тәҙрә, тимер ишек, ҡорған урынына - жалюзи. Бер кемде лә ишетмәҫкә, күрмәҫкә булдырылғандыр былар.

Яңыраҡ ауылдан килһәм, подъезда шарҙар эленгән, ишектә "Кәләш бында йәшәй" тигән яҙыу йәбештерелгән. Күршем ҡыҙын кейәүгә биргән икән. Ул-был иткәнсе, күршем сығып, теге яҙыуҙы, шарҙарҙы алып та йөрөй. "Туйығыҙ ҡотло булһын, балалар бәхеткә сорналһын!" - тип әйтеүемә, йөҙөнә бер ниндәй тойғо сығармай: "Туй кисә үк үтте, ә йәштәрҙең бергә йәшәүенә бер йыл тулды", - булды һүҙе. Ихласлыҡ ҡайҙа, шатлыҡ ҡайҙа? Әҙәп өсөн генә, рәхмәт, тиһә ни була? Ә мин үҙем иһә күршем өсөн ысын күңелдән шат инем, балаларҙы башлыкүҙле итеү - оло эш бит, тимәк, атайәсәйҙең иң мөһим бурысы үтәлгән.

Ауылда тормош барыбер икенсе. Ихласлыҡ, алсаҡлыҡ, тәбиғилек юғалмаған әле унда. Ауылдыҡылар бер-береһенә иғтибарлыраҡ, кешелеклерәк. Беҙ үҙебеҙ күрше-тирә менән яҡын туғандар һымаҡ йәшәнек. Береһе бесән алып ҡайтһа, ярҙам һорамаһа ла, икенсебеҙ һәнәгән тотоп килеп етә. Картуф сәсеү-ҡаҙыу, ҡаҙөйрәк йолҡоу, һуғым һуйыу мәлендә лә ҡулалмаш эшләйҙәр. Туйға ла, ҡунаҡҡа ла бергә әҙерләнәһең. Берендең мунсаһы эҫеһенә икенсең барып сабына. Һағынам ауыл тормошон. Өйрәнә алмаҫмын, ахыры, ҡала тормошона...

Шулай ҙа яңы танышымды иң аптыратҡаны - бер йорт, подъезд кешеләренең бер-береһен белмәүе, иҫәнләшмәүе булған. Үҙе иҫәнләшеп ҡарай, сәләмен алмайҙар икән.

- Ҡалала халыҡ иҫәнләшеүгә, һаубуллашыуға әллә нимә һымаҡ ҡарай. Башлап иҫәнләшеүҙе түбәнселек итеп күрәме, әллә артта ҡалғанлыҡ, артыҡ ябайлыҡ итеп ҡабул итәме - аңламаҫһың. Ҡөрьән-Кәримдең "Ән-ниса" сүрәһендә сәләмләшеү тураһында шулай тиелә: "Һеҙгә сәләм биргән һайын һеҙ унан яҡшыраҡ итеп сәләмләгеҙ". Күршеләрем, мәҫәлән, үҙҙәре башлап иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу түгел, яуап бирергә лә иренә. Йәштәр, балалар ғына түгел, ололары ла. Һаулыҡ һорашыу - үҙе ҙур сауап бит ул. Кеше менән иҫәнләшеү - үҙеңә, яҡындарыңа һаулыҡ теләү менән бер, әҙәплелектең, тәрбиәлелектең иң беренсе күрһәткесе...

Әҙәплелек ҡуянды ла үлемдән ҡотҡарыуы тураһында риүәйәт тә бар. Бер ҡуян кәбеҫтә ашап йөрөһә, ауыл яғынан тауыҡ аулай алмаған ас төлкөнө күреп, ҡасырға була. Үҙе төлкөнөң яратҡан аҙығы икәнлеген яҡшы белә шул. Ҡараңғы мәмерйәгә йәшеренергә уйлай. Әммә унда ҡуянды төлкөнән дә ҡурҡынысыраҡ йылан аулағанын шәйләмәй. Ололарҙың: "Ишек асыҡ булһа ла, рөхсәтһеҙ инмә", - тигәнен иҫенә төшөрөп, мәмерйәгә инеү менән: "Һаумы, мәмерйә! Һиңә инергә мөмкинме?" - тип һорай. Ауыҙына үҙе инеп килгән тәмле аҙыҡҡа ҡыуанып, йылан мәмерйә булып яуап бирә: "Рәхим итеп ин, ҡуян". Яуапты ишетеү менән ҡуян сығып саба һәм, шулай итеп, ул ғүмерен ҡотҡара...

Танышым дөрөҫ хафалана. Һуңғы ваҡытта әҙәплелек модала түгел шул. Үрҙә әйтелгәнсә, автобусҡа, магазинға иҫәнләшеп барып инһәң, аптырап ҡарағандар бар. Ә юҡ-барға ығы-зығы ойоштороп, тауыш күтәргәндәргә өйрәнеп бөтөп барабыҙ. Ғәйеплене урынына ултыртыу, ауыҙын ябыу урынына, күрмәмеш-ишетмәмеш булып ултырабыҙ, тауыш күтәреүсе, янъял ҡуптарыусы менән өнһөҙ килешәбеҙ. Кем белә, шулай битарафлыҡ, ғәмһеҙлек күрһәтеп, әллә ниндәй енәйәттәргә юл да ҡуябыҙҙыр әле...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*...ЫҢҒАЙЫҒА КӨЙЛӘЙ*

# ҠУЛЫҢА ЛИМОН ТОТТОРҺАЛАР...

## лимонад яһа

**Яҙыусы, публицист һәм педагог Дейл Карнеги "донъяла насар кешеләр булмай" тигән фекерҙә һәм принципта йәшәгән. Уның өсөн бары күңелгә ятып бөтмәгән хәлдәр генә була, ләкин уларға ҡаршы көрәшергә мөмкин: тик улар кешеләрҙең тормошон һәм кәйефен генә боҙмаһын. Бына ошо хаҡта ул китаптарында яҙған, лекциялар уҡыған. Был шәхескә төрлөсә мөнәсәбәттә булырға мөмкин: уҡырғамы уны, юҡмы, уның кәңәштәрен тоторғамы, юҡмы - һәр кемдең үҙ ихтыярында. Ләкин уның хеҙмәттәренән һайлап алынған ошо 25 цитатаһы менән генә лә мәшһүр психолог билдәлелек яулай алыр ине.**

- Һәр кем көнөнә биш минут ҡына булһа ла иҫәрлек күрһәтә ала. Ысын аҡыл ошо ваҡыт сиген үтеп китмәүҙә күренә.
- Бал йыйғың килһә, умарталарҙы туҙҙырма.
- Бөгөнгөлә үткәндең йөгөнә өҫтәлгән киләсәк йөгөн дә артмаҡлап алыу иң көслөләрҙе лә хатта юлында әләгеп йығылырға мәжбүр итә.
- Йылмайыу бер ни тормаһа ла, юғары баһалана.
- Яҙмыш ҡулыңа лимон тотторған икән, һин унан лимонад яһа.
- Кеше үҙ-үҙенә яу аса икән, ул, тимәк, нимәгәлер торошло.
- Ирегеҙҙең, һис шикһеҙ, етешһеҙлектәре бар! Әгәр ул изге булһа, бер ҡасан да һеҙгә өйләнмәҫ ине.
- Һәр ваҡыт ни менәндер мәшғүл булығыҙ. Был ер йөҙөндәге иң арзан дауа һәм ул иң файҙалыһы ла.
- Йөҙөгөҙҙәге сырайығыҙ кейгән кейемегеҙҙән күпкә мөһимерәк икәнде онотмағыҙ.
- Кемделер үҙгәртергә теләйһең икән, үҙеңдән башла. Был файҙалыраҡ та, хәүефһеҙ ҙә.
- Ниндәйҙер ғәмәлең арҡаһында килтереләсәк насар эҙемтәләр ихтималлығын күҙ алдыңа килтергәс, ошоноң менән килеш тә, шунан ғына эшкә тотон.
- Кешенең исеме - ниндәй генә телдә лә уның өсөн иң яғымлы, иң мөһим өн ул.
- Беҙҙең бәхетһеҙлектәребеҙҙең сере шунда - бәхетлеме беҙ, әллә юҡмы тигән уйланыуҙар өсөн буш ваҡытыбыҙҙың ифрат күп булыуы.
- Аҡыллы кеше өсөн һәр көн яңы тормош башлана.
- Күптәр ни бары уны тыңлаусы кәрәк булғанда, табип саҡырта.
- Балаларҙың өлкәндәр әңгәмәһен тыңларға яратыуын бер ваҡытта ла иҫтән сығармағыҙ һәм һаҡ булығыҙ.
- Кешеләрҙең миндә лә, һеҙҙә лә эше юҡ. Иртән дә, төш тә, кис тә улар үҙ эштәре менән генә мәшғүл.
- Иртәгә тигән нәмә юҡ ул. Кешенең ҡотолоу көнө - бөгөн.
- Һеҙгә ҡаныҡҡан дошмандарығыҙҙан ҡурҡмағыҙ, ялағайланған дуҫтарығыҙҙан ҡурҡығыҙ.
- Һеҙҙең алда кеше холҡоноң ғәмәле: ул теләһә кемде ғәйепләйәсәк, тик үҙен генә түгел.
- Ҡурҡыу һеҙҙең мейегеҙҙән башҡа бер ерҙә лә юҡ ул.
- Үҙегеҙҙе башҡа кеше урынына ҡуйып, уға ни кәрәклекте аңлай белегеҙ. Шул саҡ бөтөн донъя һеҙҙең менән булыр.
- Нимәгәлер өйрәнергә көслө теләгең булыу - уңыштың яртыһы.
- Үҙеңде бәхетле кеше кеүек тот, һәм һин ысынлап та бәхетлерәк булырһың.
- Был донъяла һөйөү ҡаҙаныуҙың бер генә юлы бар - уны талап итеүҙән туҡтап, яуап хисенә өмөт тотмайынса ғына башҡаларға һөйөү тарата башларға.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП

**Элекке Яңы йыл, 23 февраль, 8 март, 1, 9 май, 7 ноябрь байрамдарына, тыуған көндәргә, шулай уҡ пропаганда һәм агитация маҡсатында сығарылған открыткаларҙы оло быуын хәтерләйҙер әле. Улар шул тиклем матур, сағыу була торғайны. Уларҙы тултырыу өсөн алдан фекер туплап, матур, төҙ итеп яҙырға тырышып ултыра инек. Ә почта йәшнигенән ҡотлау открыткаһы алған мәлдәге ҡыуаныстар тураһында һөйләп тә тораһы түгел.**

# БАШҠОРТСА ОТКРЫТКАЛАР КӘРӘК!

Совет осоронда илебеҙҙә милли-этник пропаганда открыткалары ла донъя күрә. Әле Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй милли китапханаһы фондында байтаҡ ҡына открыткалар тупланмаһы һаҡлана. Шулар араһында башҡорттар төшөрөлгән открыткалар ҙа бар. Был почта открыткаларын китапханаға Николай Спиридонович Тагрин исемле кеше тапшырған. Мәҫәлән, "На Урале. Типы рабочих башкир" тигән открытка 20-се быуат башына ҡарай. Екатеринбургта В.Л. Метенков типографияһында нәшер ителгән. Фотола алты башҡорт эшсеһе китеп бара. Ә бына 1902 йылғы открыткаға С.Я. Юминовтың "Типы башкир" тигән фотоһында бер төркөм ирегеттәр һүрәтләнгән. 20-се быуат башындағы ғәйнә ырыуы башҡорттары кейемендә улар. Фотограф Юминовтың Красноуфимск ҡалаһында "Моментальная фотография" тип аталған фотоательеһы булыуы билдәле. Был ҡала 18-се быуатта Өфө йылғаһы буйында башҡорт ихтилалдарын баҫтырыу һәм булдырмау маҡсатында ҡәлғә булараҡ барлыҡҡа килә.




Открыткалар араһында "Комсомолка башкирка" тигәне лә һаҡлана. 15 тинлек төҫлө открытка 1937 йылда Мәскәүҙә СССР-ҙың Революция музейы тарафынан 50 мең дана менән нәшер ителгән. 79 йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, 10-ға 15 сантиметр ҙурлығындағы баҫманың төҫтәре асыҡ һаҡланған. Ыҡсым ғына милли елән кейгән ҡараҡай ҡыҙҙың ҡулында ғәрәп яҙмаһындағы йоҡа китап. Комсомолға алынған йәш ҡыҙҙың сәсе ҡырҡылған, ҡайырып ҡыҙыл яулыҡ бәйләгән һәм ҡыҙыл галстук таҡҡан. 1937 йылда открыткала һүрәтләнгән был ҡыҙҙы 1925 йылдың йәйендә билдәле рәссам, скульптор, график, милләте буйынса эстон Фридрих Лехт төшөргән. Ф. Лехт 1921 йылдан Мәғариф халыҡ комиссариатында, Мәскәү мәғариф бүлегендә һынлы сәнғәт секцияһы етәксеһе, шулай уҡ илдең төп музей һәм театр эксперты булып эшләй. Фридрих Карлович шулай уҡ Третьяков галереяһы директоры урынбаҫары, Станиславский һәм Немирович-Данченко театры директоры вазифаларын да башҡара. Тап ошо йылдарҙа ул башҡорт ҡыҙының портретын төшөрә. Тик ҡайҙа төшөрөүе билдәһеҙ. Күрәһең, экспедицияларының береһендәлер. Открыткала аҫта уң яҡта "Лехт, 1925" тигән яҙыу күренә. Ә бына портреттың өҫ яғындағы яҙма күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. Бында комсомолканың ғәрәп графикаһында яҙылған исеме бар - "Ғәлиә Мирзағәлина" тиелгән.

Хәҙер ҙә кемдәрҙер өсөн открыткаларҙың һүрәте мөһим роль уйнай. Сөнки улар бит аралашыу ысулы, кешенең теләктәрен, хистәрен еткереүсе, күңелдәрҙе бәйләр таҫма һымаҡ. Тарихта ҡалған милли открыткаларға ҡарап, бәлки, башҡортса яҙылған, халҡыбыҙ рәссамдарының, фотографтарының милли мәҙәниәтте, колоритты сағылдырған һүрәттәренән ҡотлау открыткалары сығарыуҙы яңыртырғалыр, тип тә уйланыла. Милли открытка телебеҙҙе һаҡларға ла, мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнергә лә булышлыҡ итер ине. Тик был эшкә кем тотонор?..

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Открыткалағы Фридрих Лехт төшөргән "Ғәлиә Мирзағәлина" - ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан тәүге журналистарҙың береһе Ғәлиә Мырҙағәлина-Баязитова тип беләбеҙ. Элегерәк, совет заманында, матбуғат баҫмаларында уның тураһында күп яҙылды. Тик ниңәлер был мәғлүмәт Башҡорт энциклопедияһына инмәгән. Был апайҙы белеүселәр, хәтерләүселәр булһа, уларҙан мәғлүмәт-мәҡәлә көтәбеҙ.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1702 йылдың 4 марты** - Петр Беренсе Нейва ҡаҙна заводын Никита Демидовҡа тапшырып, Уралда шәхси заводтар төҙөргә рөхсәт бирә. Тау сәнәғәтендә Демидовтар династияһы барлыҡҡа килә. Акинфий Никитич Демидов үлгәндән һуң уның балаларына 25 завод, 3 пристань, 95 рудник мираҫ булып ҡала, унда барлығы 38 мең крепостной крәҫтиән эшләй.

➔ **1704 йыл** - Петр Беренсе халыҡ иҫәбен алыу һәм һалым түләтеү хаҡында указ сығара.

➔ **1704-1711 йылдар** - Алдар батыр менән Күсем батыр етәкселек иткән дүртенсе башҡорт ихтилалы.

➔ **1706 йылдың ҡышы** - Бөтөн башҡорт йыйыны Өфө өйәҙе башҡорттарының Петр Беренсегә ғаризаһын ҡабул итә һәм уны тапшырыу өсөн Мәскәүгә делегация ебәрә.

➔ **XVIII быуат башы** - Башҡортостанда Мөслимиҙең "Тәүарихи Булғари" ҡулъяҙма китабы киң таралыу ала. Унда Башҡортостанда Исламды ҡабул итеү һәм ҡайһы бер зыялылар тураһында мәғлүмәттәр баҫыла.

➔ **1708 йыл** - Рәсәй Өфө, Быуа, Минзәлә, Һамар, Зәй, Усинск, Биләр губерналарына бүленә, Табын ерҙәре һәм Вятка өйәҙенең Ҡарагүл ауылы Ҡаҙан губернаһына ҡарай. Өфөлә воеводствоның бойороҡтар палатаһы менән кәнсәләре урынына төбәк кәнсәләре ойоштоРола. Башҡортостандың ҡалған өлөшө Себер губернаһына ҡарай.

➔ **1710 - 1814 йылдар** - Байыҡ сәсәндең ғүмер йылдары.

➔ **1710 йылдың 24 июне - 1762 йылдар** - Заманының арҙаҡлы муллаһы, 1755 йылғы башҡорт ихтилалы идеологы Батыршаның (Ғәли улы Абдулла Бәһадиршаһ Ғәлиев) ғүмер йылдары.

➔ **XVIII быуаттың тәүге яртыһы** - Башҡортостанда бик күп мәҙрәсәләр эшләй башлай.

➔ **1712 - 1777 йылдар** - Ырымбур крайы "Ломоносовы" П.И. Рычков йәшәгән йылдар.

➔ **1716 йыл** - Урал тимеренең тәүге партиялары сит илгә - Англия менән Голландияға сығарыла.

➔ **1718 йылдың 26 авгусы** - ил буйынса халыҡ иҫәбен алыу (ревизия үткәреү) тураһында указ баҫылып сыға.

➔ **1720 йыл** - Башҡортостандың Стәрлебаш ауылында тәүге юғары мәҙрәсә асыла.

➔ **1720 йылдың 30 июле** - Көнгөрҙә Тау кәнсәләре ойоштОрола.

➔ **1720 - 1722 һәм 1734 - 1737 йылдар** - Яңы ҡаҙна заводтары төҙөүсе һәм уның начальнигы булараҡ, В.Н. Татищевтың Уралда тәүге һәм икенсе тапҡыр булған йылдар. 1737 - 1739 йылдарҙа ул Һамарҙа йәшәй һәм Ырымбур экспедицияһына етәкселек итә. 1737 - 1738 йылдарҙа башҡорт ихтилалдарын баҫтыра.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Әммә һағыш кинәт кенә ҡыуаныс менән алышынды, һәм шат йөҙлө булып киткән йырсы Ҡара юрға (автор "Карей иноходец" тип тәржемәләй. - **Ред. иҫк**.) тигән йырҙы башланы. Был йыр уларҙа иң күңеллеләрҙән һанала. Ҡарт, йырлай башлау менән үк, аяҡтарын тыпырҙата башланы: шуның менән Башҡорт балы асылды. Үҙҙәренең бейеүҙәрендә башҡорттар күпләп эйелә-бөгөлә, ым-хәрәкәттәре менән йыр һүҙҙәрен сағылдырырға тырыша. Бал тамамланыуға, улар нимәгәлер оҡшатып башҡарыу тип атап булған ғәмәлгә күсте. Улар үҙҙәренең тауыштары менән төрлө йәнлек һәм ҡош тауыштарын шул тиклем оҫта сығара, ысын ҡош тауышын башҡорт сығарғанынан айырыу ҡыйын ине.

Башҡорттар балды ҡайнатмай, ҡоя; ғәҙәттә, ул бер көн эсендә лә етә. Улар татлы балды йылы һыу менән шыйыҡлап, бер аҙ миҡдарҙа арпа йәиһә тары ярмаһынан яһалған, ҡурийын тип аталған әсетке ҡуша. Әсетке ошо рәүешле эшләнә: бер ни тиклем ярма бешерелеп, шыйыҡ бутҡа рәүешенә килгәс, ике-өс ҡалаҡ һыра сүпрәһе һалына, һәм уны йылы урынға ҡуйып, әсей башлағансы тоталар, һуңынан уға баллы һыу ҡушалар.

Мәжлестән һуң хәрби күнекмәләр күрһәтеү башланды. Улар уҡтан сәпкә генә түгел, сәп урынындағы башҡорттарға төбәп атты, ә улары, шул тиклем етеҙлек күрһәтеп, билдәле бер арала үҙҙәренә атылған уҡтан тайшана алды. Уларҙың ҡайһылары торған урынынан, иң мәргәндәре атта йән-фарман сабып килгән ыңғайға ҡуйылған сәпкә төбәп атты. Ошо күңел асыуҙа тик ирҙәр генә ҡатнашты, ә башҡорт ҡатындарына, бигерәк тә ситтән килгән кешеләр булғанда, күңел асыу мәжлестәрендә булыу рөхсәт ителмәй: улар, йыраҡтарынаҡ тороп булһа ла, ир-ат рыцарлығын тамаша ҡылыусы ғына булды. Башҡорттар мәжлестән ярайһы уҡ шау-гөр килеп таралышһа ла, аҙаҡтан улар араһында ниндәй ҙә булһа низағ-фәлән сығыуы ишетелмәне. Былай хәүефләнеү уларҙа бик һирәк мәжлестең һуғышмайынса үтеүе хаҡындағы хәбәрҙәр менән бәйле булғандыр. Нисек булһа ла, уларҙың күңел асыуы йәшәү рәүешенә бик оҡшаш икәне һәр кемгә мәғлүм.

Төркмән старшина йәйләүенән беҙ тура Ағиҙел йылғаһына табан боролдоҡ һәм Күркә Тау (автор "Кюрка Тау", тип яҙа, Күркәмтау булыуы ихтимал. - **Ред. иҫк.**) йылғасығы аша сыҡҡанда йылға ағымының һул яғынан бейек булмаған ҡалҡыулыҡта кварцта ҡарағусҡыл алтын билдәләрен күрҙек. Унан урманлы ерҙәр аша Урал һыртынан баш алып, Һаҡмар йылғаһына ҡойоусы Бетрә йылғасығына тиклем барҙыҡ. Төркмән старшина йәйләүенән унда тиклем ара 40 саҡырым булыр. Ошо йылғасыҡ буйында беҙ ҡуна ҡалдыҡ, ә ярты юлда шулай уҡ Уралдан башланып, Һаҡмарға ҡойоусы Бишҡолон (Биш-Кулун) йылғасығы аша үттек.

**(Дауамы бар).**

✓ *Халҡыбыҙҙың яртыһы тиерлек ауылдарҙа йәшәй һәм милләттең сағыштырмаса ауыр хәле ошоноң менән аңлатыла ла инде. Беҙ әлеге ваҡытта ике урталыҡта, ауыл менән ҡала араһында торабыҙ.*

# МӘСКӘҮ -

## шул уҡ ваҡытта -

**Яңыраҡ Өфөлә төрки йәштәрҙең Халыҡ-ара "Төркиҙәр алтыны" тигән форумы булып үтте. Унда эксперт итеп Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы етәксеһе Азат Шамил улы БАДРАНОВ саҡырылғайны. Ул беҙҙең менән осрашырға ла ваҡыт тапты. Әңгәмәбеҙ Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында белем алыусы башҡорт йәштәре һәм уларҙың хәҙерге заманға бәйле проблемалары, халыҡ яҙмышы һ.б. хаҡында барҙы.**

**▸ Азат, Башҡортостандағы ер аҫты һыуҙарын өйрәнеүсе геологтар эсергә яраҡлы таҙа һыуҙың иң ҙур өлөшө Аҫҡын, Архангел райондарында, тағы ла бер нисә урында булғанын билдәләгән. Йылдан-йыл таҙа һыу запасының кәмей барғанлығын да беләбеҙ. Әлбиттә, был урындарҙа таҙа һыуҙың һаҡланыуының төп сәбәптәрен ер аҫты һыуҙарының торошо, тәбиғи шарттарҙың быға булышлыҡ итеүе менән дә аңлатып була. Мәҫәлән, был йәһәттән Архангел районында, Урал тауҙарының далалар менән киҫешкән ерендә, меңәр йылдар буйы һаҡланған һаҙлыҡтар тәбиғи фильтр ролен үтәй. Хәҙерге замандың яңы технологиялары буйынса эшләнгән фильтрҙар тәбиғи һаҙлыҡты бер нисек тә алыштыра алмай.**
**Был миҫалды нимәгә килтерәм һуң? Ауыл саф һыуҙы һаҡлаған тәбиғәт шарты кеүек үк, милләтте саф килеш һаҡлар өсөн иң тәбиғи мөхит һанала. Глобалләшеү иһә беҙгә урбанизацияға йәлеп итергә, шул уҡ ваҡытта һаҡланып ҡалырға, тигән шарт ҡуя. Бында иһә бер-береһен инҡар итеүсе ҡапма-ҡаршылыҡ килеп тыуа. Ҡалаға килеүселәр заман шартына йәлеп ителергә, ауылда ҡалыусылар арттараҡ тороп ҡалырға тейеш була. Бер үк ваҡытта һаҡланып ҡалырға ынтылыуҙы артта ҡалыу тип тә атап булмай. Һин бына оло донъяны айҡап йөрөгән кеше булараҡ, ошо хаҡта нисек уйлайһың?**

- Минеңсә, глобалләшеү шарттарына ҡулайлашыу менән милли рухты һаҡлап ҡалырға ынтылыу бер-береһенә ҡаршы килеүсе төшөнсәләр түгел. Бында, киреһенсә, башҡорт рухының ҡала шарттарына ҡулайлашып бөтмәүе арҡаһында беҙҙең заманға ярашлы проблемалар барлыҡҡа килеүе хаҡында һүҙ алып барырға кәрәк. Беҙ милли рухты ауылда ғына һаҡлап була, тигән ҡалыптан ҡотолорға тейешбеҙ. Бына беҙ алты йыл буйына Мәскәүҙә башҡорт йәштәрен ойоштороу менән шөғөлләнәбеҙ. Беҙҙә төрлө курстар, секциялар эшләй. Сараларҙы башҡорт телендә үткәрәбеҙ. Тәүге йылдарҙа беҙҙә үткән КВН-дарҙа күтәрелгән темаларҙа төп ҡарашыбыҙ ауылға, республикаға йүнәлтелгән булһа, бөгөн иһә Мәскәү, дөйөм Рәсәй темалары башҡортса яңғыраш ала бара. Шулай итеп, Мәскәүҙең башҡорт мәҙәниәтенә нигеҙ таштары һалына. Беҙ глобалләшеүҙең дөйөм процестарынан бер нисек тә ҡаса алмайбыҙ. Мәҫәлән, дәүләттең йәмғәтселек тормошонан алыҫлашыуына минең мөнәсәбәтем яҡшы түгел. Был мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә лә ҡағыла. Юғары уҡыу йорттарында бюджет урындарының кәмеүе лә шуны күрһәтә. Мин БДУның юридик факультетына уҡырға ингәндә 150 бюджет урыны булһа, бөгөн ул 30-ға ғына тороп ҡалған. Шул уҡ ваҡытта был факультетта мин уҡыған саҡтан кәм студенттар белем алмай.

**▸ Килешәм, глобалләшеү шарттарында "ауыл ғына беҙҙе һаҡлаясаҡ", тип тик ошоно ғына төп сара күреп йәшәү, бәлки, үҙен һаҡларға теләгән дөйәғоштоң башын ҡом аҫтына тығып тороуына тиң булып та тойолалыр. Шулай ҙа беҙ мөмкин булғанса тиклем ауылды ла һаҡларға бурыслыбыҙ. Сөнки беҙ ауыл менән бергә йәннәттәй тәбиғәтебеҙҙе лә, урман-тауҙарыбыҙҙы ла, иген гөрләп үҫер икһеҙ-сикһеҙ баҫыуҙарыбыҙҙы ла, аҡ ҡылғандар иле - далаларыбыҙҙы ла бөтөнләйгә юғалтыуыбыҙ бар. Беҙҙең ауылдарҙа күп итеп мал үрсетеп, иген, йәшелсә-емеш үҫтереп йәшәүҙе ожмахҡа тиңләүсе сит милләттәр ҙә бар. Элегерәк Әбйәлил районына килеп йәшәгән Мөшәрип атлы бер үзбәк егете миңә: "Башҡорттарҙың оҙон аҡса эҙләп Себергә, башҡа яҡҡа китеүен мин һис тә аңламайым. Һеҙ ошо ерегеҙҙең ҡәҙерен белмәйһегеҙ, булған мөмкинлекте файҙаланмайһығыҙ. Әгәр ҙә беҙ, үзбәктәр, ошо ерҙә йәшәһәк, үҙебеҙҙе ожмахта итеп тойор инек", - тигәйне. Мөшәрип беҙгә үҙ еребеҙҙә нисек йәшәргә кәрәклекте күрһәтте: бер йәй эсендә генә еләк йыйып, Магнитҡа алып барып һатып, ул заман өсөн иң яҡшыһы һаналған "Волга" машинаһы һатып алды. Нимә генә тимә, бөтә мәсьәлә үҙебеҙҙә. Ниңә, беҙ үҙебеҙҙең көс менән генә ауылды һаҡлап ҡала алмайбыҙмы ни?**

> **АЗАТ БАДРАНОВ:**
> *Мәскәүҙә кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ябайыраҡ, кешелеклерәк. Мәскәүҙә үҙеңә оҡшаған бер китап һатып алып, уны уҡып, бер аҙнанан һуң китаптың авторы менән кофе эсеп һөйләшеп, әңгәмәләшеп ултыра алаһың.*



- Беҙ тик үҙебеҙҙең көстәр менән генә бар ауылдарҙы һаҡлап ҡала алмаясаҡбыҙ. Урбанизация процесы совет осоронда ла барҙы, әммә ул тамамланманы, халҡыбыҙҙың яртыһы тиерлек ауылдарҙа йәшәй һәм милләттең сағыштырмаса ауыр хәле ошоноң менән аңлатыла ла инде. Әгәр ҙә бер илле йыл элек ҡала башҡорттары мәҙәниәте формалашҡан булһа, бөгөн ҡала башҡорттарының һаны ла юғары булыр ине. Беҙ әлеге ваҡытта ике урталыҡта, ауыл менән ҡала араһында торабыҙ. Беҙ үҙ эшмәкәрлегебеҙҙә ауылдарҙан сыҡҡан йәштәребеҙҙе Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына уҡырға индерергә ярҙамлашып, уларҙың ҡалаға өйрәнеүен еңеләштереүҙе лә күҙ уңында тотабыҙ. Мәскәү - ул ҡалаларҙың ҡалаһы, унда бер нисә ҡала, бер нисә социаль донъя һыйған. Мин, мәҫәлән, Өфөлә юғары уҡыу йорто тамамлағандан һуң унда барҙым һәм ауылдарҙан килгәндәргә ҡарағанда был ҡалаға тиҙерәк өйрәнеп киттем. Мәскәүгә һәм Питерға килеүсе башҡорт йәштәре үҙҙәрен ирекһеҙҙән көнөнән бында килеүселәр тип уйламаһындар өсөн беҙ уларҙы ойоштороп, милли мөхит тыуҙырырға тырышабыҙ ҙа инде. Мәскәү һымаҡ эре мегаполистарға башҡорт мәҙәниәтен индереүҙең юлы һәм маҡсаты тап ошонда.

Беҙҙең халыҡтың пассионарлыҡ потенциалы бик юғары. Бары тик шул генетик энергияға дөрөҫ йүнәлеш кенә бирергә кәрәк. Хәҙерге ваҡытта Мәскәүҙә башҡорт йәштәре башҡа милләт вәкилдәре араһында иң ойошҡаны иҫәпләнә. Татар йәштәренең финанс ресурстары юғары булһа ла, улар идеяға ҡытлыҡ кисерә. Улар даими рәүештә беҙҙең сараларға килеп тамаша ҡыла, беҙҙән өйрәнә. Беҙ үҙебеҙ үткәргән сараларҙан тыш, халыҡ-ара дуҫлыҡты нығытыу маҡсатын алға һөргән дөйөм йыйылыштарға ла йөрөйбөҙ. Беҙ Мәскәүҙә үткәрелгән шундай позитив сараларға 300-400 кешене алып сығырға һәләтле баш ҡала йәштәр ойошмалары араһында берҙән-бере булып һаналабыҙ. Бер үк ваҡытта Мәскәүҙең татар йәштәре бындай сараларға 20-30 кеше генә сығара ала.

**▸ Атай-олатайҙарыбыҙ беҙгә юғары мәҙәниәт, зауыҡ, рух, ҡот ҡалдырған. Минеңсә, уларҙың рухи мираҫы бөгөн беҙгә хеҙмәт итә. Әгәр ҙә шул рух булмаһа, һеҙ шул рәүешле йыйылып, прогрессив сараларҙа үткәрә алмаған булыр инегеҙ. Бына һин, башҡорт йәштәре араһында бындай креативлыҡты, ойошҡан булыуҙы нисек аңлатырға була, тип уйлайһың?**

- Йәмғиәттә һәм тормошта ниндәй генә негатив күренештәр күҙәтелмәһен, халҡыбыҙҙың пассионарлыҡ потенциалы һайыҡмаған. Беҙ, күптәр һымаҡ, был йәһәттән ҡояш батышына табан бармайбыҙ. Беҙ үҙ эшебеҙҙә ниндәйҙер идеяһы булған йәш кешене тыңлайбыҙ, күмәкләп ултырып был хаҡта әңгәмә ҡорабыҙ, идея авторына төрлө һорауҙар бирәбеҙ. Әгәр ҙә идея мәҙәни сара үткәреүгә ҡайтып ҡалһа, унда күпме кеше ҡатнашыуын, һөҙөмтәһен күҙаллайбыҙ. Беҙгә бигерәк тә был сараға килеүселәр ниндәй уй-фекерҙәр менән ҡайтыуы мөһим. Тик йыйылышырға кәрәк булған өсөн генә йыйылышыу - ҡыҙыҡ түгел. Бындай сараларҙың тағы бер маҡсаты - йәштәргә үҙҙәренең уй-хыялдарын, ниәттәрен тормошҡа ашырырға өйрәтеү.

**▸ "Мәскәү күҙ йәштәренә ышанмай", тиҙәр. Шулай ҙа, әйтәйек, Мәскәү менән Өфөнөң, башҡа ҡалаларҙың мөмкинлектәре нимәһе менән айырыла?**

- Мәскәү - ул мөмкинлектәрҙе тормошҡа ашырыу ҡалаһы булыу менән бер рәттән, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү ҡалаһы ла, ул, ысынлап та, күҙ йәштәренә ышанмай. Мәскәү - бер нисә социаль донъяның синтезын да тәшкил итә. Ҡайһы бер ата-әсәләр уларҙың балалары поезд йә самолет менән Мәскәүгә килеп төшкәс тә, уларҙы скинхедтар, наркодилерҙар, сутенерҙар ҡаршылай, тип уйлап яңылыша. Әгәр ҙә уларҙың балалары насар уй-ниәттәр, шуларға бәйле маҡсаттар менән Мәскәүгә килә икән, ысынлап та, уларҙы тап шундайҙар ҡаршылаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, Мәскәүгә ниндәй маҡсат менән килһәң, шундай мөхит һине ҡаршы алып торасаҡ. Әгәр ҙә изге маҡсаттар менән килһәң, маҡсатыңа ярашлы мәшһүр кешеләр менән аралашыу ҙа еңел Мәскәүҙә. Мәскәүҙә кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ябайыраҡ, кешелеклерәк. Мәскәүҙә үҙеңә оҡшаған бер

# ҠАЛАЛАРҘЫҢ башҡорт ҡалаһы ла ҠАЛАҺЫ...

китап һатып алып, уны уҡып, бер аҙнанан һуң китаптың авторы менән кофе эсеп һөйләшеп, әңгәмәләшеп ултыра алаһың. Ә Мәскәүҙән ситтә, беҙҙең республикала, Өфөлә, башҡа ҡалаларҙа һәм райондарҙа һин иң тәүҙә йәмәғәтселеккә үҙеңдең "болан түгеллегеңде, кеше икәнлегеңде, әңгәмә ҡоророға һәләтле икәнлегеңде" иҫбатларға тейешһең. Мәскәүҙә иһә, киреһенсә, һин иң тәүҙә кем менәндер осрашаһың, һөйләшәһең һәм үҙеңдең "болан түгеллегеңде, кеше икәнлегеңде" иҫбат итәһең. Унда юғары уҡыу йорттарында студенттар менән уҡытыусылар араһында мөнәсәбәт шулай ҡоролған. Унда партнерлыҡ мөнәсәбәте хөкөм һөрә.

Минең яҡын бер дуҫым Өфөлә университет тамамлағандан һуң Мәскәүгә РФ Президенты ҡарамағындағы академияға уҡырға барҙы. Шунда кафедралағы профессор Илшатты үҙе менән баҡсаһына алып барырға булған. Илшат рым менән Архангел районынан, Баймаҡтыҡы ла, Күгәрсендеке лә түгел, әммә үҙемде һис кенә лә башҡаларҙан кәм башҡорт итеп тоймайым.

**Бөгөн шундай парадоксаль тенденция күҙәтелә: республикабыҙҙан ситтә йәшәгән башҡорттар үҙҙәрен күберәк бойомға ашырып, күберәккә өлгәшә ала. Силәбе өлкәһендә йәшәп, Рәсәй һәм донъя кимәлендә спортта ҙур уңыштарға өлгәшкән башҡорттар миҫалы, Ырымбур фермерҙары, Себер эшҡыуарҙары, бына һин етәкләгән Мәскәү һәм Санкт-Петербург башҡорт йәштәре ойошмаһы миҫалы шул хаҡта һөйләй. Бының сәбәптәре нимәлә тип уйлайһың?**

- Бәлки, ситтәгеләр конкурентлыраҡ мөхиттә йәшәгәнгә шулайҙыр. Алда әйткәнемсә, әйтәйек, Мәскәү менән Питер ҙур һәм конкурентлы ҡалалар. Шуға күрә унда үҙеңдең сифаттарыңды, компетенцияларыңды камиллаштырыу өҫ-

**Мәскәүҙә, Питерҙа, сит илдәрҙә белем алып, республикаға кире ҡайтыусы йәштәрҙең барыһы ла тиерлек тәүге осорҙа ошондай уңайһыҙлыҡ кисерә, йәғни үҙҙәрен ят арбаға ултырғандай тоя. Күбеһе хатта уҡыған ҡалаларына кире китеп күңел тынысл ығы эҙләй. Һорауым шундай: ни өсөн "Титаник" Агиҙелдә йөҙә алмай?**

- Бындай проблема һис һүҙһеҙ бар. Икенсенән, күп кенә мәсьәләләр Өфөгә бик һуңлап килеп етә. Беҙҙә биш йыл элек блогерҙар хәрәкәте башланһа, Мәскәүҙә был "сир" ун-ун биш йыл элек тамамланды. Һәр хәлдә, мәскәүҙәр уларҙы тәре итеп файҙаланмай. Ә беҙҙә уларҙы "алтын йомортҡа һалыусы тауыҡ" итеп күрәләр. Беҙҙә үткән йәй донъя кимәлендәге форумдар үтеп тә өлгөрмәне, хәҙер тағы ла әллә ниндәй аңлайышһыҙ форумдар хаҡында һүҙ алып бара башланылар. Ҡыҫҡаһы, һүҙ менән эш араһында баланс һаҡ-

Ә сит илдә уҡыуға килгәндә, мин балаларҙың урта мәктәпте тамамлағандан һуң сит илдәргә уҡыуға китеүенә ҡаршымын. Улар юғары белемде үҙебеҙҙә алып, сит илгә ниндәйҙер фәнни эш башҡарырға, стажировкаға ғына барырға тейештәр. Мин урта мәктәпте тамамлағандан һуң сит илдә белем алып, үҙебеҙгә кире ҡайтҡандарҙы күргәнем бар. Улар бер енестәге кешеләрҙең никахҡа инеүҙәренә нормаль күренеш итеп ҡарай. Беҙ ундай күренештәргә "нормаға һыймай" тигән баһа бирһәк, ситтә белем алыусылар "һеҙҙең үҙегеҙҙә проблема бар", тип белдерә.

"Титаник" мәсьәләһенә килгәндә, Өфөлә уҡыусы башҡорт йәштәре өсөн Мәскәүҙә, Питерҙа уҡыусы йәштәр ниндәйҙер кимәлдә өлгө булып тора. Ижтимағи-сәйәси конъюнктура нисек кенә үҙгәрмәһен, был һәр ваҡыт шулай булып тора. Йәштәрҙе Мәскәү, Питер вуздарына уҡырға алып барыуыбыҙ барыһына ла оҡ-

мәҙәни сараларҙың ролен баһаларға, "мәҙәни кодтар" төшөнсәһен алға һөрөргә кәрәк", - тим. "Мәҙәни кодтар" башҡорттарҙы технарҙарға, гуманитарийҙарға айырмай, барыһына ла бер үк төрлө йоғонто яһай. Беҙ үткәргән "Мәскәү һылыуҡайы", КВН һымаҡ сараларға, башҡорт концерттарына яҡташтарыбыҙ үҙҙәре менән бергә уҡыған башҡа милләт вәкилдәрен, дуҫтарын, курсташтарын алып килә. Шунда килеүсе урыҫтар, чечендар, грузиндар, әрмәндәр башҡорттарҙың шундай мәҙәниәте, тарихы барлығына һоҡланып ҡайта. Был беҙҙе лә дәртләндерә, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ өсөн ғорурланыу тойғоһо уята.

**Мәскәүҙә йәшәүсе билдәле шәхестәр, сәйәсмәндәр менән аралашыуы еңел, тинең. Уларҙың араһынан кемдәре менән айырыуса тығыҙ аралашам, танышмын тип әйтә алаһың?**

- Иң тәүҙә мин бында Борис Кагарлицкийҙы килтерер инем. Ул бар донъяға билдәле сәйәсәт белгесе, Рәсәйгә донъяның системалы анализы төшөнсәһен ул алып килде. Ул төрлө илдәрҙә лекциялар уҡый. Минең бер дуҫым диссертация яҡлағанда кафедрала Өфө университеты йолаһы буйынса, иртәгәһенә эш кейемдәрен кейеп, баҡсаға барған. Әммә профессорҙың кейәүе уларға көнө буйына шашлыҡ, барбекю әҙерләгән, ә профессор үҙенең студенты менән көнө буйына сәй эсеп, шешлөк, барбекю ашап, төрлө темаларға һөйләшеп-әңгәмәләшеп ултырған. "Нишләп һин улай эш кейемендә һуң?" - тип һораған унан профессор. Илшат: "Баҡсаға саҡырғасығыҙ, эшләргә кәрәк булыр", - тип уйланым тигән. Шулай итеп, Илшат уңайһыҙ хәлгә ҡалған.

Мәскәү вуздарындағы уҡытыусы һинә скайп аша консультация үткәрә, һәр студентына үҙенең кеҫә телефонының номерын биреп ҡуя. Мәскәүҙә университет ректоры, декан бүлмәһенә инеү ҙә еңел генә. Беҙҙә иһә студент биш йыл буйы уҡыу осоронда ректорҙы бер тапҡыр күрмәүе лә бар. Мин Өфөләге ғилми конференцияға Мәскәүҙән профессор Автономовты алып килгәйнем. Ул Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында дискриминация комиссияһы рәйесе, утыҙҙан ашыу тел белә. Ул юриспруденцияла алдынғы ҡарашлы белгес һанала. Шундай юғары дәрәжәгә эйә булһа ла, ул шул тиклем ябай кеше. Бындағылар шундай кешенең нисек итеп бында килеүенә аптыраны.

Мәскәүҙә иң тәүҙә һинең эшлекле сифаттарыңды баһалайҙар, шунан һуң ғына кемлегеңә, милләтеңә иғтибар итәләр. Беҙҙә иһә иң тәүҙә һинең кем булыуыңа ҡарайҙар. Хатта башҡорттарҙың эсендә лә ниндәйҙер "ысындарға" һәм "ысын булмағандарға" бүленеш бар. Мин, мәҫәлән, үҙем тамырҙа-

төндә эшләргә тура килә. Һин был ҡалаларҙа нимәнелер эшләргә һәләтле булыуыңды, башҡаларға ҡарағанда эште яҡшыраҡ башҡарыуыңды күрһәтергә тейешһең. Минең шәректе өйрәнеү буйынса бер нисә хеҙмәтем бар. Улар баҫылып сыҡты.

Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларҙа тик үҙ көсөңә генә ышанаһың, ә кемгәлер, власть органдарына булһынмы, "урында" ултырған ағайҙарғамы, иҫәп тотмайһың, унда һинең ысын асылың, кешелек сифаттарың сағылыш таба. Мәскәүҙә, Питерҙа һинә ҡарап башҡорттар тураһында фекер йөрөтәләр, киреһенсә түгел. Беҙҙе Мәскәү хөкүмәтендә, Кремлдә, РФ Дәүләт Думаһында, Йәмәғәт палатаһында, төрлө юғары уҡыу йорттарында яҡшы беләләр, төрлө сараларға саҡыралар. Ҡыҫҡаһы, милләт-ара мәсьәләләр менән шөғөлләнеүселәрҙең барыһы ла беҙҙе белә. Эшмәкәрлегебеҙ вуздарҙағы беҙҙең студенттарҙың динамикаһы менән дә аңлатыла. Тәүҙә уларҙа ике-өс кенә студент белем алһа, хәҙер инде егермеутыҙ студент хаҡында һүҙ алып барырға була.

**Минең улым Санкт-Петербургта урмансылыҡ-техник университетында уҡып, Башҡортостанға эшкә ҡайтты. Әйтергә кәрәк, оло донъяны күргәндән һуң ул киренән үҙебеҙҙең шарттарға бик ауыр өйрәнеп китте, хатта тәүге осорҙа депрессия кисерҙе. Хәҙер, Аллаға шөкөр, эшләгән ҡалаһындағы башҡорт сәнғәт мөхитендә аралашып, күңел тынысл ығы таба алды. Быны нимәгә һөйләйем һуң?**

ланырға тейештәр. Шуға күрә, оло донъяны күргән егеттәр, бында ҡайтҡас, ошоларҙы күрә лә, уларҙың күңелендә эске конфликт барлыҡҡа килә. Ни өсөн тигәндә, бындағы кешеләр башҡа ритмдар менән йәшәй, бында башҡа төрлө ҡиммәттәр баһалана.

Әлегә күптәр ситтә белем алғандан һуң шундуҡ тыуған яғына ҡайтырға ашыҡмай. Әммә улар ололарса тормош тәжрибәһе туплағандан һуң күпләп ҡайта башлаясаҡ, улар үҙҙәре кеүек үк фекерләгән кешеләргә таянасаҡ. Әхмәр ағай, һинең улың һымаҡ йәштәрҙең мөҙҙәте 2016 йыл түгел, ә 2025 йыл. Мин Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназияһында уҡыным. Был гимназияны 1997 йылда тамамлаусыларҙың ҡайһы берҙәре район хакимиәт башлыҡтары булып китте, ҡайһылары Хөкүмәт органдарында хеҙмәт итә. Улар бер-береһе менән аралаша һәм донъяны үҙенсә ҡабул итеүен йәмғиәткә идея рәүешендә тәҡдим итә. Ә бөгөн 23-25 йәше тулғандарҙың донъяны ҡабул итеү рәүешен йәмәғәтселек ҡабул итергә әҙер түгел. Әммә уларҙа был идея йәшәй һәм ул мотлаҡ рәүештә өҫкә ҡалҡып сығасаҡ, тормошҡа ашырыласаҡ. Иң мөһиме, улар үҙенең тырышлығы менән үҙҙәрен һаҡлап ҡала алдылар, юғалманылар. Был шулай уҡ тормош тәжрибәһе. Кеше һәр бер шартҡа ҡулайлашып, донъяға объектив баһа бирергә әҙер булырға тейеш.

шамай. Беҙҙе хатта ҡайһы бер райондарға, ҡалаларға индермәскә, төрлөсә аяҡ салырға тырышалар. Бына, Әхмәр ағай, һеҙҙең быуын ата-әсәләре беҙҙең быуын яҡшыраҡ йәшәһен өсөн тырыша, ә беҙ үҙ сиратыбыҙҙа, һеҙҙең быуын кеүек, үҙебеҙҙең балалар беҙҙән күберәккә өлгәшһен, тигән маҡсат ҡуйбыҙ. Ә эске конфликттарға килгәндә, улар ҡотолғоһоҙ процестар һәм бында мин насарлыҡ күрмәйем.

**Беҙҙең үҙебеҙҙең ҡанға һеңгән "мәҙәни кодтар" һаҡланып килә бит инде. Ул һин аралашҡан йәштәрҙә нисегерәк сағылыш таба?**

- Әхмәр ағай, һин әйттең бит инде, улың Санкт-Петербургтан ҡайтҡас, үҙенә урын таба алмай ыҙаланды ла, сәнғәт, мәҙәниәт донъяһына ылығып китеп, тынысланыу тапты, тип. Бына шул ылығыу беҙҙең ҡандағы "мәҙәни код" аша тормошҡа аша ла инде. Мәскәүгә уҡырға килгән йәштәр араһында ла баштараҡ: "Беҙ бында мәҙәни сараларға йөрөргә түгел, ә уңышлы кешеләр тәжрибәһен өйрәнергә, эшлекле лекциялар тыңларға теләр инек", - тигәнерәк фекер белдереүселәр була ул. Әммә мин уларға: "Бындай саралар мотлаҡ кәрәк, беҙ эшлекле осрашыу, тренингтарҙы мәҙәни саралар менән аралаштырып алып барасаҡбыҙ. Ә эшлекле саралар менән генә сикләнһәк, беҙ йәштәрҙе үҙебеҙҙең ойошмаға күпләп йәлеп итә алмаясаҡбыҙ. Шуның өсөн

уны юҡҡа сығарырға маташтылар. Борис Юрьевичҡа хәлде аңлатып биргәйнем, ул электрон почта аша диссертацияһын һорап алды ла, рецензия яҙып, иртәгәһенә кафедраға килде. Шунда дуҫымды юҡҡа сығарырға тырышыусыларҙың диссертацияны уҡымауҙары асыҡланды. Шул саҡ Борис Юрьевич һүҙ һораны. Уны күреп ҡалыусы кафедра мөдире профессор менән бергә фотоға төшөргә булып китте. Борис Юрьевич: "Аңлаусыма, мин диссертацияны уҡыусы берҙән-бер кешемен икән..." - тине лә, төплө, нигеҙле итеп аспиранты яҡларға тотондо. Һөҙөмтәлә дуҫым диссертацияһын яҡлай алды. Атаҡлы аналитик Сергей Ҡарамырҙа менән дә яҡшы танышмын, ул миңә эшлекле кәңәштәр бирә. Йәштәргә яҡшы таныш булған квнсы, ҡаҙаҡ егете Сангаджи Тарбаев менән аралашам. Алдараҡ әйткән Алексей Автономов менән яҡшы танышмын. Уның диссертацияһын күсереп алыр өсөн төбәктәрҙән министрҙар килә. Мин уның ғаиләһе менән дә аралашам, йорттарына барып йөрөйөм, ғаилә байрамдарына саҡыралар. Шәректе өйрәнеү институты менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорғанбыҙ, беҙ уларҙа бик күп саралар үткәрҙек. Муса Мортазинға, Перовскийға арналған, башҡорт ырыуҙары тарихы темаһына бағышланған сараларыбыҙ шул институтта үтте, әле Морат Рәмзи буйынса семинар үткәрергә әҙерләнәбеҙ.

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *Әллә ҡартлыҡтан аҡылдан яҙыу ошо буламы икән, тип, үҙ ҡылығынан үҙе шаңҡып ултырған аҡһаҡалды беләгенән тартҡылап торғоҙорға маташҡан ейәне иҫенә килтерҙе: - Олатай, тор инде, әйҙә, ҡайтайыҡ...*






Рәйлә САБИТОВА

# ҺЫРТТАН КИЛГӘН ИКЕ ҺЫН

Хикәйә

* * *

Тауҙарҙа эңер иртә төшә. Талсыҡҡан ғәскәр төнәүгә әҙерләндә. Йылҡы бышҡырыуы, бөжәк-фәлән, ҡошҡорт сыр-сорлауына бер көндә илен дә, иреген дә, ир-йәрен дә юғалтҡан нуғай ҡатын-ҡыҙҙарының һығылып инрәүе ҡушылған. Әллә нисә Аҡйылға, Аҡшишмәләр араһында хәҙер инде Мәндем тигән ят исем менән айырылып торған тау йылғаһының шарлауы ғына һыҡтау тауышын бер аҙ баҫҡандай. Килтәй ваҡиғаһынан һуң үҙен аңҡы-тиңке тойған Алғыр тәҡәтһеҙ үҙ йәйләүенә ҡайтҡыһы килеүен тойҙо. Унда Аҡсабый ҡанбаба ҡалды бит. Кәңәш-төңәш алаһы ине аҡһаҡалдан...

Байтаҡ яуҙарҙа ҡатнашып, үлемдең күҙенә ҡарарға ҡурҡманы Алғыр. Ә баяғы һөмһөҙ ҡарт күңеленә шом һалды. Айтуғанды ла хаҡһыҙ тип әйтеп булмай. Уның иңендә - ырыу өсөн яуаплылыҡ. Ул барыһы өсөн дә тырыша. Тупланырға, көс йыйырға кәрәк. Яҡында ғына Бүзән кеүек хыянатсыл күрше булғанда, тыныс йәшәп булмай ине. Уның йортон туҙҙырып, дөрөҫ эшләне Айтуған. Артыҡтамаҡтар өҫтәлде, тиһәң дә, ҡатын-ҡыҙ иң беренсе бала табыусы, ырыуға көс биреүсе. Яңы ҡан ҡушылғас, балалар ҙа сәләмәтерәк, ныҡлыраҡ булып тыуыр, тимәк, һаман да көс артыр...

...Айтуған, үҙҙәре ҡайтмайынса, Көнтөшмәҫтәге оянан сыҡмаҫҡа, тип ныҡлап киҫәтеп киткән булһа ла, Үлөтле яланында усаҡ баҙлай ине. Ут яҡтыһында Аҡсабыйҙы күреүенә аптыраманы Алғыр. Балалар шулай инде, алдан күҙаллай торған илаһи заттар бит улар.

- Ай-яй-яй-яй...- Былай ҙа көнгә-елгә ҡарайған сурыш йөҙө тағы ла нығыраҡ ҡарңғыланды ҡартластың. - Ишкән икән Айтуған улан эштең еллеһен... Бүзәнде юҡ итеү арыу эш булһа ла, ҡарғышы артыҡ хикмәтле.

-Хаҡҡа сығырлыҡмы ни, бабам, шул иҫәүәндең генә һүҙҙәре? - Алғырға ла ҡарттың борсолоуы йоҡмай ҡалманы.

- Аҡылы булған зиһенле кеше бер ваҡытта ла ҡарғыш әйтмәҫ, балам. Күктән үҙып яҙмыш һыҙаһың икән әҙәм балаһына, тәкәбберлегең өсөн Уның ҡаршыһында яуап бирәһең бар бит! Ә иҫәүәндең тел төбөндә хикмәт ятыр. Иҫе сыҡҡан саҡта ул йәндең ҡайһы донъяны байҡап йөрөүен кем белә? Йә Күккә олғашып, изгеләрҙең һүҙен ишетәләр, йә Ер аҫтына төшөп, шайтан затын тыңлайҙыр. Үҙ уйлағанын түгел, шул донъяларҙың шауҡымын килтереп әйтә бит ул Килтәй кеүектәр. Иҫе инәрлесығарлыларҙың рәнйешенән һаҡлан, балам.

- Күҙҙәре лә ике төрлө...

- Эйе, Күк төҫөндә бер сырағы, икенсеһе, гүйә, мәтеһе аҡтарылған Ер... Ике тарафта ла йөрөүе бик мөмкин.

- Ауырлыҡ килтерҙекме күсебеҙгә, бабам?

- Күсебеҙгә генә түгел, тотош кәүемебеҙгә көн асылмаған ваҡыт та килер, уланым. Беҙ күрмәсбеҙ уны, күтәрмәсбеҙ. Киләһе быуындар өсөн йәнем ҡарая...

- Алғышы бар ҙа һуң, бабам, алдыра алмаҫбыҙмы ни ҡарғышты?

- Беҙ Айтуғандан өлкән быуын бит, балам.

- Улайһа, киләһе-китәһе быуындарға Килтәйҙең ҡәберен һаҡлау фарыз да бит... Сәсте инде уның һөйөгән Айтуған йән-яҡҡа...

- Был уйың хаҡ, Алғыр. Һаҡларға кәрәк... Тик нисек? Тороп тор... Килтәйҙең һөйөгән һырт буйлап сәскәс, шул һырт тоташ ҡәберлек булып һанала ла баһаң! Тапап йөрөй торған ер булғас, үткән-һүткән һайын теләк теләргә йәтеш.

- Изге юлда йөрөрмөнмөюкмы, аҡһаҡал йәшенә етәмме-юкмы, әммә халҡым өсөн һәр саҡ изге теләктә йөрөрмөн!

- Һа-ай әйткән һүҙең, улым...

* * *

*Ҡарағай ҙа тигән ҡаты ағас*
*Ыжғыр елдәргә лә*
*бирешмә-ә-й...*

Башта күкрәкте ҡыҫып торған бер әрнеүҙе таратып ебәрер өсөн генә моңгөрәй башлағайны Аман. Торабара әллә башланып ҡына торған көҙҙөң саф һауаһына тыны асылдымы, әллә тирәйүндең матурлығына ирәбеләнеп киттеме, тигеҙ, моңло тауыш көсәйгәндән-көсәйеп, Олотау итәгенән Мәндем үҙәненәсә зыңғырлап таралды. Елтләтә баҫып йәнәшенән килгән ейәне лә, дауам ит, тигәндә аңлатып, күҙҙәрен тултырып ҡарап ҡуйҙы.

*Ирмен тигән, һай, ир кешегә*
*Башын түбән эйеү*
*килешмә-ә-әй-й-й.*

Һағыштарын түккәнсе йырланы ла ҡуйҙы етмеш ете йәшлек уҙаман. Ғүмер буйы тыуған ер, ил, халҡым тип тир түккән, һуңғы күҙәнегенә тиклем идеяларына тоғро ҡалған ата коммунист булған кешегә рәхәтме ни әлеге хәлдәр? Күҙ күременә тиклем иген баҫыуы ине ләһә ошо ҡырҙар! Әле иһә ашатыусы, туйындырыусы булған тыуған тупраҡ шыҡһыҙ ҡарағура баҫып етемһерәп ҡалған... Көндө төнгә, төндө таңға ялғап, күпме көс һалынған колхоздары тарҡалды. Уның беләк көсө кергән күпме ҡаралты-ырҙын табағы, теҙелеп киткән келәт, гараж, автогараж, һөт фермаһы биналары - барыһы ла ташландыҡ, ҡотһоҙ-йәнһеҙ. Бөгөләрен инде, емереп ҡулайлаштырырҙай материалы булғандарын, емереп ташып алғандар. Комбайн-машиналар тауышынан гөрләп торорға тейешле ерҙәрҙә унда-һанда кеше малы көйшәнеп йөрөй. Күпме кешенең көсө, аҡылы, таһылы түгелгән олоғара донъя аҫты-өҫкә килеп туҙҙырылһынсы әле! Ыжғыр елдәргә бирешмәгән ҡарағайың түгел, ҡарағайҙан былай ныҡ билле аҫау ирҙәрең һығылып төшөрләк... Ниндәй ауыр һуғыш йылдарында ла ерҙе тәләф итеп, бер ни сәсмәй-урмай ултырманы лаһа халыҡ!

Етәкселәрен дә ташҡүлсәйем инде. Өмөт бағлап, "башлыҡ бул" тиерлектәре яуаплылыҡтан ҡаса. Кеме гәмһеҙлеккә, кеме эскелеккә, кеме Себергә... Халыҡ өсөн арҡырыны буй һалмаҫтайҙары көсө еткәнгә көсөктәй булып, көсө етмәҫтәйгә яҡшатланып, юғарыға, вазифаға ынтылып ята. Ана, береһе, һайлау ваҡытында өйҙән-өйгә йөрөп, кемде алдап, кемде юхалап, кемде ҡурҡытып тигәндәй депутат булып һайланды ла, эрелеваҡлы бер түрә булып, менеп тә ултырҙы. Яҙылған закондарҙы боҙорға ояты еткәнде, яҙылмағандарын - Хоҙай Тәғәлә һәм выждан ҡушҡандарын үтәр тиһенме уны? Үҙе кеүек иманын һатҡандарға арҡалана инде ул, ябай халыҡ зарынан алыҫҡараҡ ҡаса.

Бөтөн ил буйынса әллә ниндәй ғәрәсәт-емереү сәйәсәте бара. Төҙөлгәне - ватыла, асылғаны - ябыла, ауланғаны - баш тартыла. Унда - мәктәп, бында - дауахана, тегендә - кешегә эш үә аш урыны бирген тағы берәй ойошма... Йәштәргә, эшләргә, алға ҡарап өмөт итергә юлдар ябыла, шуныһы ҡурҡыныс. Үҙендең тормошҡа ҡарағанда уҙмышҡа яҡыныраҡ йәшкә еткәнендә уйлаһаң, хәсрәт тә юҡ кеүек. Әбейе менән икеһе ҡорған донъя үҙ ғүмерҙәренә етерлек. Сей утын яғып, мәкенән һыу ташыйһы түгел, айҙыҡын-айға пенсия аҡсаһы ла килеп тора. Һаулыҡ та бер сама арыу ғына... Балалар бар бит! Ейәндәр ҡала. Бигерәген дә эргәһендәгеһе - Арыҫланы өсөн йөрәге яна. Төпсөк кенәһенең төпсөк малайы өсөн. Хәҙерге замандә, һәр береһе үҙенә терһәкләп тә, телләшеп-тешләшеп тә юл ярғанда, был сабый үҙен нисек яҡлай алһын? Рәнйетеп күҙ атһалар ҙа, һүҙ әйтһәләр ҙә ҡайтарып әйтеү түгел, яҡлярлыҡтарҙан ярҙам һорарлыҡ та теле юҡ бит баланың. Сәләмәт тиңдәштәре, ана, ауылда башланғыс мәктәп ябылғас, күрше аулға йөрөп булһа ла уҡырға төштө, ҡалғаны үҙ тырышлыҡтарынан тора. Ә Арыҫланды нимә көтә? Балалар аяуһыҙ бит ул, дүрт һаны теүәл,зиһене камил тиңдәштәренән дә мыҫҡыл итеп көләргә, түкмәсләргә сәбәбен таба, ә бының кеүек етешһеҙлеге булғаны бигерәк тә кәмһетеү сәбәбе әйләнә лә ҡуя инде. Ер аяғы ер башы ергә интернатҡа апарып ырғытаһыңмы ни аяулы ғына баланды артыҡбаш итеп...

Ә әсәһе һәләк телдәр булды. Үҙе килеп һөйкөмлө лә, башлы ла. Үҫә төшкәс, бер һәләте асылды - һандуғаҫка тиң моң эйәһе ине. Атаһының, йәғни Амандың үҙ заманында йырсылыҡҡа уҡырға алып китергә килгән комиссиянан ҡасып, урманда йөрөп ҡалғаны өсөн иң битәрләгәне, көйгәне ошо ҡыҙы булды. Ә үҙе һөнәр һайлар мәле еткәс, сәхнә яғына яҡын да юлламаны. Бәлки, дөрөҫ тә эшләгәндер - барыбер тауышы әҙәләп ҡуйҙы. Ҡасан бит әле! Йыр конкурсында финалға сығып, еңергә бер ынтылыш ҡына ҡалғас! Ойоштороусылар ҙа, тамашасылар ҙа бик яраткайнылар үҙен. Хистәрен күрһәтеп бармаған Аман да ҡыҙының тауышы радио-телевидениела яңғырағанын ишеткәндә күҙҙәре шәмәреп киткәнен тоя ине. Әллә ниндәй сер бит ул - моң. Ерҙәге гонаһлы йәнде Күккә, илаһилыҡҡа тоташтыра алырлыҡ оло көс. Көүҙәләрен килештереп былтанлатҡан, тауышы ҡарғаныҡынан саҡ ҡына арыуыраҡ берәү еңеп ҡуйҙы ул конкурста, ә Амандың ҡыҙы шунан бирле йырламай. Әллә, халыҡ әйтеүенсә, күҙ тейгән, әллә һүҙ... Бәлки, ысынлап та тауышы өҙөлгәндер, самалағанда ошо балаға, Арыҫланға, йөккә ҡалған осоро булған да инде, көс төшөрөргә ярамағандыр тауыш ярыларына...

Ҡандай шатланғайны Аман малай тыуғас. Тәкәбберлегенә барып, нәҫелдәренең моно ошо балаға күскәндер, тип юрап та ҡуйғайны. Ә ул ана нисек килеп сыҡты - йырлау түгел, өнө лә юҡ баланың. Бер ҙә генә ҡарап йыуанырлыҡ, киләсәге өсөн бошмаҫлыҡ сараһы юҡ Амандың ошо донъяла. Өйөндә булһа - өйөндә ейәне телһеҙ, иленә ҡараһа - илендә халҡы өнһөҙ. Нимә насар, нимә яҡшы икәнен аңлап тойоп тора ҡайһыһы ла, ә рәнйетеүселәренә ҡаршы, аңһыҙйөрәкһеҙ түрәкәйҙәренә ҡаршы ла бер һүҙ әйтә алмай, батырҙарын ҡанатландырырлыҡ, сәсәндәрен елкендерерлек, зыялы-булдыҡлыларын хупларлыҡ та һүҙ тапмай, э-эх! Тағы ла һайлау кампанияһы етте, ана. Һаман бер балыҡ башы - лайыҡлыларын көсләп тә, алдап-йолдап та, ситкә тибер сараһын табалар, һөнәрһеҙҙәре, иманһыҙҙары кеше башын тапап-бутап һаман власҡа үрмәләй...

Урманды сығып, Килтәй һыртына аяҡ баҫҡас, йөрәкһеүенән йәнен ҡайҙа ҡуйырға белмәй, тағы ярһып киткән аҡһаҡал аҙарынып туктап ҡалды. Ғүмер буйы ата коммунист булып, алла-муллаларҙы бар тип тә белмәһә лә, ейәненең киләсәге, халҡының күрәсәге өсөн киләһе быуындарға бәхет һорап, әллә ниндәй белгән-белмәгән, ышанғанышанмаған көстәргә ялбарырға ла, булған-булмаған үә ҡылған-ҡылмаған гонаһтары өсөн тәүбәләргә килеп ғәфүҙәр һорарға ла әҙер ине ул. Әҙер генә түгел, шунда уҡ тыуған тупраһына теҙләнеп, гәзиз ерөнә күҙ йәштәрен ҡоя-ҡоя, әллә Ерҙән, әллә Күктән халҡына еңеллек биреүен һорап үтенде, ялбарҙы, талап итте...

Әле генә болот, әле генә ҡояш булып, көйефе ғашиҡ ҡыҙҙай уйнап торған көҙҙөң тағы башы әйләнде. Елеккә үтерҙәй иҫкән иртәнге ел ҡапыл мәрхәмәтерәк булып китте, күктең зәңгәре нығыраҡ баҙыҡланды. Әллә ҡартлыҡтан аҡылдан яҙыу ошо буламы икән, тип, үҙ ҡылығынан үҙе шаңҡып ултырған аҡһаҡалды беләгенән тартҡылап торғоҙорға маташҡан ейәне иҫенә килтерҙе:

- Олатай, тор инде, әйҙә, ҡайтайыҡ...

Ейәненең ихтыярына буйһоноп, ҡайтыр һуҡмаҡҡа төшкән ҡарт, Мәндем кисеүенә еткәнсе, әле генә ниндәй мөғжизәгә юлыҡҡанын аңламаны ла.

(Аҙағы. Башы 16-сы һанда).

✓ *Яҙыусыға үҙен ҡабатламау ҙа бик кәрәк. Бер яҙған темаға ҡабат әйләнеп ҡайтыу ҙур етешһеҙлек һанала. Уны уҡыусы ла шунда уҡ күреп, күҙгә элә һала. Ул ғына ла түгел, бер-береңдең әҫәрҙәрен уҡыу, белеү ҙә бик кәрәк.*



# МӘСКӘҮ - ҠАЛАЛАРҘЫҢ ҠАЛАҺЫ...

## шул уҡ ваҡытта - башҡорт ҡалаһы ла

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Башҡорт ойошмаһы булараҡ, һеҙҙең төп позицияғыҙ нимәгә ҡайтып ҡала? Икенсе һүҙ менән әйткәндә, һеҙгә башҡорт милли хәрәкәтенең оҡшаған һәм оҡшамаған яҡтары нимәлә?**

- Беҙ, алдынғы ҡарашлы башҡорт йәштәре, халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булыуын теләйбеҙ. Беҙгә ике сиктә тороусыларҙың позицияһы ла оҡшамай. Тәүгеләре уларҙың "милли мантраларға" күсә, "башҡорттар" тип буш һүҙҙәр, лозунгылар һөйләй, ғәмәлдә үҙҙәре милләт өсөн ҡыл да ҡыбырлатмай. Беҙ анығ ғәмәлдәр яҡлы. Икенсе сиктә тороусылар иһә милләт алдында торған проблемаларға бөтөнләй күҙ йомоп ҡарай, улар ҙа беҙгә оҡшамай. Шулай уҡ ябаҡлашыу позицияһында тороусыларҙың да позицияһы беҙгә ситен.

**Беҙ төрлө ҡатмарлы, ауыр ситуацияларға ҡалғанда атай-олатайҙарыбыҙ тарафынан быуаттар буйына һыналған йолаларға, ысулдарға таянабыҙ. Бер үк ваҡытта туҡтауһыҙ үҙгәреүсе заман беҙҙең ҡайһы бер төшөнсәләргә архаик ҡараштарҙы инҡар итә. Шулай түгелме?**

- Мин үҙемдең мәҡәләләрҙә тап ошо проблемаларҙы күтәрәм дә инде. Эйе, оҙаҡ ваҡыт архаик ҡараштар менән генә йәшәү ҙә мөмкин түгел. Сөнки алға ҡарап йәшәмәһәк, традициялар архаиканан ары үтмәйәсәк. Беҙ ырыуҡәбилә мөнәсәбәттәренән үҫеп сыҡҡанбыҙ, Аллаға шөкөр, әгәр ҙә шунан үҫеп сыҡмаһаҡ, халыҡ, милләт тип аталмаҫ инек.

**Азат, мине борсоған икенсе бер мәсьәлә дингә ҡайтып ҡала. Ни өсөн Исламға килеүсе йәш кеше шундуҡ ниндәйҙер сектаның ҡорбанына әүерелә, әүерелмәгән осраҡта ла, агрессив хәрәкәткә ҡушылған кеше итеп иҫәпләнә башлай? Бында ундайҙарға ситтәрҙең биргән баһалары ла булышлыҡ итә һәм ошо фонда тотош дин агрессив күренеш итеп күренә...**

- Был, беренсенән, архаик фекерләү һөҙөмтәһе булып тора. Икенсенән, был хәл секталарҙың үҙ эшен әүҙем алып барыуҙары хаҡында ла һөйләй. Беҙгә йәштәр араһында аңлатыу эше алып барырлыҡ белгестәр, аналитиктар етешмәй, шуға күрә йәштәрҙең дини юлға аяҡ баҫыуы үҙағышына ҡуйылған.

**Хәҙерге ваҡытта "Традицион Ислам" тигән төшөнсә барлыҡҡа килде. Минең аңлауымса, беҙ, Башҡортостанда йәшәүселәр, Сәғүд Ғәрәбстанында йә булмаһа Сирияла, йә булмаһа Кавказдағы һымаҡ итеп дин тота алмайбыҙ, сөнки Рәсәй Федерацияһы - күп милләтле, күп динле дәүләт. Шуға күрә беҙҙең өсөн традицион Ислам - ул халҡыбыҙҙың йолаларына, традицияларына яраҡлы дин. Ә һин был төшөнсәне нисек аңлайһың?**

- Беҙ - Хәнәфи мәсхәбендәге сөннәттәр. Традицион Ислам - ул иң беренсе нәүбәттә беҙҙең атай-олатайҙар тотҡан дин, ул диндең ниндәйҙер формаһы түгел, ә диндә һәм Хоҙайҙы ҡабул итеүебеҙ рәүеше. Сөнки дин тотоу, намаҙ уҡыу, тәһәрәт, шәриғәт ҡанундарын үтәү бөтә урында ла бер үк төрлө. Беҙ Ризаитдин Фәхретдинов, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кеүек дин өлкәһендә эшләгән ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәрен ниндәй кимәлдә беләбеҙ һуң? Уларҙы тик шул өлкәлә эшләүсе ғалимдар ғына белә. Миңә шәреҡ тарихын өйрәнеүсе бер йәһүд ғалимы: "Һеҙ үҙегеҙҙең архивтарығыҙҙы, атай-олатайҙарығыҙ барлыҡҡа килтергән дини-философик практиканы өйрәнмәйенсә тороп, һәр ваҡытта ла сит йоғонтоға дусар булып йәшәйәсәкһегеҙ. Һеҙ ҡотолоу юлын ситтән эҙләйһегеҙ. Ул юлдар һеҙҙең атай-олатайҙарығыҙ тарафынан күптән табылған, һыналған", - тигәйне.

**Беҙҙең өләсәйҙәр һәм әсәйҙәр, мәҫәлән, яулыҡ ябынып йөрөгән, хиджаб кеймәгән. Икенсенән, күп төрлө милләттәр йәшәгән, төрлө-төрлө диндәр булған Рәсәй ысынбарлығында хиджаб кейеп, битен-күҙеп ҡаплап йөрөгән ҡатын-ҡыҙ кешегә, теләйбеҙме-юҡмы, "шәһиҙә" тип шикләнеп ҡарайҙар. Тимәк, хиджаб кейгән ҡатын-ҡыҙға башҡа кешеләр шикләнеп ҡарай икән, ул үҙенән-үҙе агрессия сығанағына әүерелә. Шулай түгелме?**

- Дербент, Махачкала янынан үткәндә бите-күҙе тулыһынса ҡапланған ҡатын-ҡыҙҙарҙы осратаһың. Чечняла иһә ҡыҙҙарҙың башында косынка, бит-йөҙҙәре асыҡ. Был - чечендарҙың традицион кейеме. Был - беренсенән, икенсенән, беҙҙең халыҡтар төрлөсә үҫешкән. Беҙ модерн баҫҡыһын күберәк үткәнбеҙ. Беҙ ырыуҡәбиләләр берләшмәһе булараҡ халыҡ булып формалашҡанбыҙ, улар әле халыҡ булып формалаша ғына. Уларҙа беренсе урында халыҡ, милләт мәнфәғәте түгел, ә тейптарҙың (тайфаларҙың) мәнфәғәте тора. Тейп башлыҡтары үҙ-ара килешмәйенсә тороп, бер ни эшләнмәй. Беҙ модернды үткәнбеҙ, тик беҙҙә урбанизация аҙаҡҡа тиклем үтмәгән. Хәҙер Рамзан Ҡадыров был форматты үҙгәртә.

**Теләйбеҙме-юҡмы, капиталистик йәмғиәттә йәшәйбеҙ икән, милләт унда һаҡланып ҡалһын өсөн милли буржуазия синыфы ла формалашырға тейешле. Беҙҙең байҙарыбыҙ бар, тик уларҙың күбеһе ситтә йөрөй, булғандары тарҡау. "Башҡорт буржуазы" тигән вакантлы урын буш торорға тейеш түгелдер бит?**

- Мин ни өсөн ауыл йәштәренә Мәскәү, Питер юғары уҡыу йорттарына инергә ярҙам итә башланым һуң? Бер мәл Өфөләге дауахананың баш табибында ҡунаҡта булырға тура килгәйне. Уға бер туҡтауһыҙ шылтыратып, дауаханаға ятырға, башҡа мәсьәләләрен хәл итергә ярҙам һорай башланылар. Мөрәжәғәт итеүселәр уны Хоҙай урынына күрә. Был хәлдән ул рәхәтлек кисерә. Ни өсөн тигәндә, ул үҙе ярҙам күрһәтеүселәрҙән туҡтауһыҙ тегене-быны һорай: "Мин һеҙгә ярҙам итәм, давай, һин миңә ит йә булмаһа ике тоҡ картуф алып кил?" Теге кеше әгәр ҙә Өфөнөкө булһа, йәмәғәт транспортында ике тоҡ картуф тейәп килеп етә инде, әгәр ҙә Өфөнән ситтә йәшәһә, ике тоҡ картуф үгеҙ хаҡына төшә бит инде. Бына был мещанлыҡ тип атала, уның буржуазия менән һис уртаҡлығы юҡ. Баяғы баш табипҡа: "Мин һеҙҙе шулай булғанығыҙ өсөн күрә алмайым", - тип әйтеп киттем.

Беҙҙең халыҡта коллектив аң көслө. Барса халыҡ буржуаз булып та китә алмай.

Беҙ йәштәргә ярҙам итә башлағас, ауылдарҙан килеүсе ата-әсәләрҙең үҙҙәрен тотошо аптырата торғайны. Бер мәл улын эйәртеп бер әсәй кеше килде. Улының документтарын ҡарап, әңгәмә үткәреп, юғары уҡыу йортон билдәләнек, фатиха бирҙек. Әсәһенең ҡулында хатта ханымдар сумкаһы ла юҡ, пакет тотҡан. Пакетынан гәзит менән уралған төргәк сығарҙы ла: "Мына, һыйырҙы һаттыҡ, мында ун биш мең. Ҡалғанын ҡыш тағы бер тыусаны һуйғас, тултырып түләрбеҙ. Етерме икән? Уҡырға инә аламы?" - ти. Үҙе ҡалтырай, ришүәт бирә белмәй. Тамағыма төйөр тығылды. Мин апайға: "Апай, беҙгә аҡса кәрәкмәй. Улығыҙ мотлаҡ рәүештә уҡырға инәсәк. Был аҡсаға улығыҙға ноутбук алып бирегеҙ", - тигәйнем, түгелеп илап ебәрҙе. Бына ниндәй хәлгә еткерелгән беҙҙә әсәйҙәр!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Элегерәк Мәскәү ҡалаһына барып ҡайтыусылар шундайыраҡ тойғо кисерә торғайны: һин ул ҡалаға барҙыңмы, ҡайттыңмы - бынан Мәскәү һис ниндәй үҙгәреш кисермәй һымаҡ ине. Ә бына ауылдан Өфөгә килеп төшһәң, вокзалда уҡ таныштарҙы осратаһың, урамдарҙа тағы ла таныш кешеләреңде күрәһең һәм Өфө һине ошо таныш кешеләреңдең йөҙө менән сәләмләгән кеүек. Хәҙер инде Азат Бадрановтың фекерҙәрен тыңлағандан һуң, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары ла беҙ барып төшөү менән унда уҡыған йәштәребеҙ йөҙө менән сәләмләйәсәк. Быныһы - иң мөһиме...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӘҘИП ҺҮҘЕ

# ҺӘР БЫУЫНДЫҢ - ҮҘ ҒӘМЕ,

## һәр әҙиптең - үҙ ҡәләме



**Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта - билдәле прозаик, драматург, БДУ профессоры Тимерғәле Әбделғәлим улы КИЛМӨХӘМӘТОВ. Беҙ унан яҙыусының бурыстары тураһында һөйләүен һораныҡ.**

- Заманды иң һиҙгер тойоусы кешеләрҙең береһе - яҙыусы. Әҫәрҙәрендә үҙ заманының иң сетерекле мәсьәләләрен сағылдырыу - һәр әҙиптең бурысы. Ысын яҙыусы үҙ заманын сағылдырып ҡына ҡалмай, киләсәк тураһында ла үҙ фекерен әйтә килә. Кемдер ошо юҫыҡтағы уй-фекерҙәрен уҡыусыға ишаралап ҡына белгертә, бәғзе берәү асыҡтан-асыҡ ярып һала. Тәүгеләр иҫәбенә мин Зәйнәб Биишеваны, Һәҙиә Дәүләтшинаны индерер инем. Уларҙың романдарында халҡыбыҙ киләсәге тураһында һүҙ туранан-тура әйтелмәһә лә, хәл-ваҡиғалар перспективаһында төптә ятҡан фекер барыбер айырым-асыҡ төҫмөрләнә. Был яҙыусының оҫталығы хаҡында һөйләй. Икенсе төркөмгә, йәғни, юғары художестволы алымдар ярҙамында киҫкен мәсьәләләрҙе бар тулылығында сағылдырыуға өлгәшкән әҙиптәр рәтенә бөгөнгө әҙиптәрҙән Рауил Бикбаевты индерәм. Әле күптән түгел "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыҡҡан бер шәлкем шиғырҙарында Рауил Төхвәт улы замандың иң көнүҙәк проблемаларын - әйтеүе ҡыйын булған әйберҙәрҙе - "шиғриәтле" итеп һөйләп биргән. Ошо үҙенсәлеге арҡаһында ла мин уның бер шиғыр шәлкеме бер шиғыр китабына торошло, тип һанайым.

Яҙыусы заман процестарына тел, һүҙ ярҙамында ғына тәьҫир итмәй, ә ул процестар эсендә үҙе лә ҡайнап йәшәй. XX һәм XXI быуат араһы осоро беҙҙең өсөн бик ҡатмарлы булды. 80-се йылдарҙың икенсе яртыһынан 90-сы йылдар баштарына тиклем - дәүләтселек өсөн, телебеҙгә дәүләт теле статусы бирелһен өсөн янып, ярһып йәшәнек. Бөтөн әүҙем йәмәғәтселек, шул иҫәптән яҙыусылар ҙа шул сафта булды. Тырышлыҡ бушҡа китмәне, алға ҡуйылған күп кенә маҡсаттар тормошҡа ашты. Хәйер, донъялар бөгөн дә ярайһы уҡ ҡатмарлы ғына. Илгә ҡаршы иғлан ителгән төрлө санкциялар тормошобоҙҙо ауырлаштырҙы. Халыҡ-ара террор ғәләмәте дәүләттәрҙе ҙур һуғыш ҡурҡыныcы аҫтына килтереп ҡуйҙы. Ил халҡы йәнә таяныс көтә, яҙыусының уйланылған, үткер, тапҡыр һүҙен һағына. Мин үҙем, мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышы тураһында ныҡ уйланам. Сөнки, алдараҡ әйткәнемсә, бөгөн дә һуғыш сығып китеү ҡурҡынысы шул тиклем киҫкен тора. Тыныслыҡ юғалыуынан хәүефләнеү беҙҙең быуынға айырыуса хас сифат. Сөнки беҙ һуғыш йылдары балалары. Һуғыштан һуңғы ауырлыҡты кисереп үҫкән, атайһыҙ ҡалған балалар беҙ. Шуға күрә бөгөн беҙҙең быуын яҙыусылары бына ошо хаҡта - донъяла, илдә тыныслыҡ булыуы хаҡында күп уйлана, күп яҙа. Беҙ йыш ҡына: хеҙмәт хаҡының түбәнәйеүенә, тормоштоң ауырлашыуына зарланабыҙ. Зарланабыҙ ҙа, һүҙ аҙағында: "Ярар, үҙебеҙҙә - һаулыҡ, илдә тыныслыҡ булһын", - тибеҙ. Тыныслыҡ булһа, барыбер нисек тә йәшәргә мөмкин бит әле. Бына шул тема беҙҙең әҙәбиәттә элек-электән һәр ваҡыт әҙәрем булып килә.

Яҙыусыға үҙен ҡабатламау ҙа бик кәрәк. Бер яҙған темаға ҡабат әйләнеп ҡайтыу ҙур етешһеҙлек һанала. Уны уҡыусы ла шунда уҡ күреп, күҙгә элә һала. Ул ғына ла түгел, бер-береңдең әҫәрҙәрен уҡыу, белеү ҙә бик кәрәк. Иң күренекле әҫәрҙәрҙе ҡабатламаҫ өсөн яҙыусы ул әҫәрҙәрҙе һәр ваҡыт күңелендә йөрөтөргә тейеш. Бына, мәҫәлән, Мостай Кәрим трагедияларын уҡыһаң, ул драматургтарға ғына түгел, ә бөтөн яҙыусыларға ла ғүмерлек һабаҡ икәнлеген аңлайһың. Ул трагедиялар күңелде барыбер яҡтыртып ебәрә. Шунда инде ысын трагедияның тәрән мәғәнәһе. Жанр үҙенсәлеге йәһәтенән нисек кенә парадоксаль тойолмаһын, Мостай Кәрим трагедияларында тормошсанлыҡ көслө. Оптимистик трагедия тигән әйбер ҙә бар әҙәбиәт донъяһында. Мин әйергә теләгән фекер аңлашылалыр: жанр төрлө булырға мөмкин, әммә ул жанрҙар ахыр сиктә изгелек, игелек, кешелеклелек принциптарына нигеҙләнергә тейеш.

Яҙыусының әйтер һүҙе яҙыусының биографияһы менән тығыҙ бәйле. Биография һәр ваҡыт әҫәргә инә.Ноғман Мусин ижадын ҡарайыҡ. Ул яҙған әйберҙе, әйтәйек, далаларҙа, урманһыҙ ерҙә тыуған, йәшәгән яҙыусы яҙа алмай. Сөнки был яҙыусының ижады шул тәбиғәт стихияһы, шунда йәшәгән кешенең һөнәре менән тығыҙ бәйле. Шуға күрә, Башҡортостандың төрлө төбәктәренең төрлөсә тәбиғәтле булыуы беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙе лә байыта. Һүҙемдең аҙағында шуны әйтке килә: нимә яҙыу түгел - ә нимә тураһында яҙыу мөһим, шуны аңларға кәрәк.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЙҘА ЙОҠЛАУ... яҡшыраҡ?

■ Ҡайһы бер минералдар һәм кислоталар йоҡоно яҡшырта ала, әммә иң тәүҙә дөрөҫ туҡланырға һәм әүҙем тормош алып барырға кәрәк, ти Америка ғалимдары. Йоҡлар алдынан бер стакан һөт эсеп, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Квисленд һәм Калифорния университеты ғалимдары туберкулез булдырыусы бактериялар үҫешен туҡтатыу ысулын тапҡан. Тикшеренеүселәр төркөмө холестерин берләшмәләренең холестерин бактерияларына йоғонтоһон тикшергән. Холестерин, билдәле булыуынса, бындай микроорганизмдарҙың ауырыу тыуҙырыу һәләтлегенә тәьҫир итә. Эксперименттар күрһәтеүенсә, әгәр ҙә был бактерияға гены үҙгәртелгән холестерин бирһәң, ул артабан үҫә алмаясаҡ. Әммә әлегә ғалимдар бының сәбәбен асыҡлай алмаған. Һәр хәлдә, был асыш хәүефле инфекция менән көрәшеүҙә ярҙам итәсәк. Туберкулез йоғошло сир, һәр 21 секунд һайын бер кеше туберкулездан үлә.

■ Кишер - бик файҙалы йәшелсә, ти ғалимдар. Уның составындағы каротин хатта бешергәндән һуң да һаҡлана. Каротин сығанағы булыуҙан тыш, ул организмдан артыҡ һыуҙарҙы сығара, һыу-тоҙ әйләнешен яҡшырта. Кишерҙе салаттарға, пудинг, суфлеға өҫтәп ашау файҙалы. Шулай уҡ өлкән кеше көн һайын тәүлегенә 200 мл кишер һуты эсеү кәрәк.

■ Быға тиклем күпме йоҡларға, тип бәхәсләшә инек. Бына Британия университеты ғалимдары ҡайҙа йоҡлау яҡшыраҡ икәнен тикшереп ҡараған. Бының өсөн эксперттар махсус һораулама төҙөгән һәм шундай һығымтаға килгән. Баҡтиһаң, ял итеү өсөн дивандың йә карауаттың һул яҡ өлөшө яҡшыраҡ икән. Һул яҡта йоҡлаусылар үҙҙәрен иртән яҡшыраҡ тойған, көнө буйы юғары кәйефтә йөрөгән.

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһөҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки бының сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй һөҙөмтә итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калориялар йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң яҡшы һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күнелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ



**Һаулыҡ - бәхетле һәм гармониялы йәшәү шарттарының береһе. Әгәр сәләмәтлек өлкәһендә ниндәйҙер проблема килеп тыуһа, кәңәш һорап табиптарға мөрәжәғәт итәбеҙ, кемдер йәшәү менән үлем араһында ҡалһа, уларҙы аҡ халатлы фәрештәгә тиңләйбеҙ һәм ниндәйҙер мөғжизә тыуҙырыуҙарын көтәбеҙ. Баш ҡаланың 21-се клиник дауаханаһында үҙ һөнәренең оҫталары эшләй, тип шикләнмәй әйтергә мөмкин, сөнки 2015 йыл һөҙөмтәләре буйынса был медицина учреждениеһы бойондороҡһоҙ тауыш биреү йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙең ТОП-5 исемлегенә инде. Бөгөн дауахананың баш табибы Гөлнара МОСТАФИНА менән ул етәкләгән учреждениеға ҡыҫҡаса экскурс ҡыласаҡбыҙ.**

# БӘХЕТ НИГЕҘЕ -
## тән сәләмәтлеге

**➔ 21-се дауахана - юл-транспорт фажиғәләрендә һәләкәткә тарыусыларға медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса төп травматологик үҙәк булып тора. Дауахана тарихына ниндәй фажиғә ҡанлы юлдар менән яҙылған? Учреждениела, башҡа дауаханаларҙан айырмалы, тап һеҙҙә генә булған ниндәй бүлектәр бар?**

- Дауахананы ғына түгел, был фажиғәләр тотош республиканы тетрәндергәндәр, моғайын. 1989 йылдағы Оло-Тәләк һәм 1990 йылдағы Химпром, Синтезспирт заводтарындағы техноген һәләкәттәр мохтаждарға тиҙ ярҙам күрһәтеүҙе ойоштороу һәм ярҙам күрһәтеү буйынса ысын мәктәп булып торҙо. Ул ваҡытта табиптар көндө төнгә ялғап, ҡыл өҫтөндә торған ғүмерҙәр өсөн йәнтәслим көрәште һәм мөмкин булғандың барыһын да эшләп, бихисап ғүмерҙәрҙе ҡотҡарып ҡалды. Бөгөн иһә дауахана беренсе кимәлдәге травматологик үҙәк булып иҫәпләнә. Бынан тыш, баш ҡалала эндокринологик, колопроктологик, нефрологик профилдәге, республика буйынса йөҙ-яңаҡ һәм микрохирургия патологиялары, токсикологик һәм аллергологик йүнәлештәге пациенттарҙы дауалау буйынса бүлексәләр бары тик беҙҙә генә бар.

Йөҙ-яңаҡ хирургияһы бүлегендә тәндең ошо өлөшөндәге яҡынһыныуҙар, шештәр, йәрәхәттәр булғанда талап ителгән барлыҡ операциялар эшләнә.

Республика буйынса берҙән-бер токсикология бүлеге булғас, ағыуланыу осраҡтарында ауырыуҙарҙы беҙгә алып киләләр. Шуны билдәләп китергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа пациенттарҙың һаны артты. Был йәштәрҙең спайс, тәмәке итеп тартыу ҡатнашмалары ҡулланып ағыуланыуына бәйле. Пациенттарҙың килеүе бер аҙ кәмеп тә ала, артып та китә, ләкин йыл әйләнәһенә туҡтағаны юҡ. Ҡалаларҙан, нигеҙҙә, синтетик матдәләр ҡулланыу һөҙөмтәһендә ағыуланыусылар килтерелһә, ауыл ерҙәрендә ағыуланыу сәбәбе булып алкоголь суррогаты тора. Шулай уҡ дарыуҙар, үҫемлек һәм сәнәғәт ағыуҙары ҡулланыу һөҙөмтәһендә ағыуланыусылар ҙа бар.

Аллергология бүлеге пациенттары бигерәк тә яҙғыһын, тәбиғәт уяныр, ағастар сәскә ата, һеркәлһә, туҙан күренә башлағас мөрәжәғәт итә. Ләкин аллергиктарға ошо бүлек табиптары миҙгел ауырыуҙары араһында организмдарын шлактарҙан таҙартырға, диагностика үткәреп, аныҡ аллергия сығанағын табырға ярҙам итә.

Проктология бүлеге Советтар Союзында беренселәрҙән булып асылды һәм беҙҙең ысулдар хәҙер республиканың ғына түгел, Рәсәйҙең бик күп клиникаларында ҡулланыла. Яңы технологияларҙы индерелеүе ҡайһы бер осраҡтарҙа оператив дауалауҙы ла алмаштыра. Әле дауахана эсәктәр елһенеүе буйынса пилот проекты башланасаҡ. Уның барышында ике ай дауамында эсәк ауырыуҙары менән яфаланыусы пациенттарҙы ҡабул итеп, уларға ярҙам күрһәтеләсәк, артабан үҙәк ойоштороу хыялы бар.

Пульмонология бүлеге лә ҡалала берҙән-бер. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡышҡы кизеү ваҡытында пациенттар ағымы булманы, тиерлек, әммә эпидемия эҙемтәһе булып пневмония торҙо. Шуға күрә, кем үпкәнең хроник ауырыуҙары менән сирләй, улар июндә - пневмонияға, көҙгөһөн кизеүгә прививка эшләтергә кәрәклеген дә онотмаһын ине.

Шулай уҡ төбәк йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы үҙәге лә булып торабыҙ. Беҙгә мейенең ҡан әйләнеше боҙолоуы, киҫкен коронар синдром буйынса мөрәжәғәт итәләр, тәүлек әйләнәһенә инфаркт, инсульт кисереүселәргә ярҙам итәбеҙ. Сөнки бындай ярҙамға махсуслашҡан дауаханалар бер нисәү генә.

Бынан тыш, дауаханабыҙ Рәсәйҙә медицина тәғәйенләнешендәге изделиеларҙы һәм яңы дауалау препараттарын клиник һынау үткәреүгә рөхсәте булған учреждениелар исемлегенә инә. Бактериолик лабораториябыҙ иһә клиник бактериология буйынса уҙғарылған тикшеренеүҙәрҙең сифатын федераль кимәлдә контроллау буйынса эксперттар иҫәбендә.

**➔ Быйыр Өфө районын һеҙҙең дауаханаға беркеттеләр. Ошо бер йыл эсендә ниндәй үҙгәрештәр булды?**

- Әлбиттә, был беҙҙең өсөн өҫтәмә ауырлыҡтар тыуҙырҙы, сөнки райондың һаулыҡ һаҡлау структураһына ҡараған 42 дауалау-профилактика учреждениеларын һаҡлап алып ҡалырға һәм уларҙың матди-техник базаһын күтәрергә кәрәк ине. Был маҡсатта 10 миллион һум аҡса тотондоҡ. Табиптар менән комплектлау - 90, урта медицина персоналы менән комплектлау 80 процентҡа етте, әммә алты фельдшер-акушер пунктында һаман да талап ителгән белгестәр етешмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күҙгә күренер һөҙөмтәләр ҙә бар. Мәҫәлән, демография күрһәткестәре ике процентҡа яҡшырҙы, дөйөм үлем күрһәткесе кәмене. Район халҡы өсөн компьютер томографияһы, маммография, эндоскопик тикшеренеүҙәр, радиоизотоп, клиник-лаборатор, функциональ тикшереү ысулдары аша диагностика үтеү мөмкинлеге асылды. 2015 йыл һөҙөмтәләре буйынса республиканың ауыл райондары поликлиникалары араһында Өфө районы беренсе урынға сыҡты.

**➔ Халыҡҡа ай ҙа, ҡояш та ярамай, тигән кеүек, барыһына ла ярау мөмкин дә түгел. Моғайын, һеҙгә лә рәхмәт менән бер рәттән, ҡәнәғәтһеҙлек белдереүселәр ҙә барҙыр?**

- Әлбиттә, йыл йомғаҡтары буйынса мөрәжәғәттәрҙе иҫәпләп ҡарағайныҡ, рәхмәт һүҙҙәре лә, ялыуҙар һәм ҡәнәғәтһеҙлек белдереүҙәр бер тигеҙ һанда килеп сыға. Шулай ҙа киләсәктә рәхмәт бедереүҙәр күберәк булыр тип өмөтләнәбеҙ, сөнки ялыуҙарҙы тикшерә башлаһаң, уларҙың ни бары 1-2-һе генә нигеҙле булып сыға. Мәҫәлән, кемгәләр тупаҫлыҡ күрһәткәндәр. Ә башҡа осраҡтарҙа ғәйеплләрлек нигеҙ юҡ. Ләкин һәр мөрәжәғәт буйынса кешеләрҙе саҡырып һөйләшәбеҙ, мәсьәләне асыҡлайбыҙ һәм граждандарҙың проблемаларын ҡәнәғәтләндереп, мәсьәләне хәл итеп айырылышабыҙ.

**➔ Мәғлүм булыуынса, табиптар күберәк эш хаҡы алыу өсөн төнгө дежурға ла сыға, ял көндәрендә лә эшләй, ҡыҫҡаһы, кеше дауалайым тип, үҙ сәләмәтлеген бөтөрә...**

- Төптән уйлап ҡарағанда, был ысынлап та шулай, сөнки төнөн йоҡламаһаң, организмың ял итмәһә, сәләмәтлегең шәбәйеп китмәй, киреһенсә, насарлана бара. Ләкин медицина хеҙмәткәрҙәре лә башҡалар кеүек үҡ лайыҡлы тормошта йәшәгеһе, ашағыһы, кейенгеһе килә. Бөгөн беҙҙең тармаҡта уртаса эш хаҡы 23-24 мең һум. Ул өс йыл инде артҡаны юҡ, һәм артыуы көтөлмәй ҙә.

Медицина учреждениелары форумында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов медицина тармағына йылына 53 миллиард һум бүленә, тиһә лә, уның күп өлөшө медикаменттар алырға, ҡорамалдарҙы эш торошонда тоторға, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә, ауырыуҙарҙы ашатырға һәм барлыҡ хеҙмәттәрҙең эшләүен тәьмин итеүгә китә. Әммә медицина хеҙмәткәрҙәре зарланырға яратмай, сөнки эшебеҙ көсөргәнешле булһа ла, сауаплы - беҙ кеше ғүмерҙәре һағында торабыҙ.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

✓ *Ҡораманан түшәк эшләнә, тип кенә беләбеҙ беҙ. Ә ысынында унан йәнең теләгәндең барыһын да ҡорап була икән. "Кәрәҙ" клубы оҫталары ваҡ сепрәк киҫәктәренән күлдәктән башлап уйынсыҡ туптарға тиклем ҡоршай ала.*



ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# БАРМАҒЫҢА АҢ КИЛҺӘ...

## һөнәреңә дан килер

**Ҡорама ҡорау - халҡыбыҙҙың борондан килгән матур шөғөлдәренең береһе. Ҡорамаға тотонорға ҡасандыр етешһеҙ тормош, мохтажлыҡ мәжбүр итһә, бөгөн килеп был йола кәсепкә, сәнғәт әҫәре өлгөһөнә әүерелеп киткән. Энә, еп һәм тауар киҫәктәренән үҙенсәлекле, милли колоритлы матурлыҡ тыуҙыра белә ҡайһылар.**

Хаҡлы ялға сыҡҡан уҡытыусы Рәшиҙә Ғиззәтуллинаны, тыуған төйәге Бөрйәнгә әйләнеп ҡайтҡас, ниндәй шөғөлгә тотонорға, тигән һорау борсомай. Ул бар ваҡытын һәм тырышлығын күптәнге хыялын бойомға ашырыуға бағышлай - ҡорамаға тотона. Иҫке Собханғол мәҙәниәт йортонда "Кәрәҙ" клубы ойоштора һәм был клубҡа ла етәксенең үҙе кеүек үк ваҡыттарын бушҡа сарыф итергә өйрәнмәгән ҡатын-ҡыҙ йыйыла.



- Эш, ғаилә, бала-саға араһында орсоҡ кеүек өйөрөлөп йәшәп өйрәнгән ҡатындар, ғәҙәттә, балалары өйҙән осоп китеп, үҙҙәре пенсияға сыҡһа, төшөнкөлөккә бирелеүсән. Берәүгә лә кәрәкмәгән итеп тоя башлайҙар үҙҙәрен, йәмғиәттән айырылалар, юҡ-бар ауырыуҙарға бирешә башлайҙар. Был тәңгәлдә минең беренсе маҡсатым - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҡулына боронғо шөғөлөбөҙҙө ҡайтарыу булһа, икенсе ынтылышым - уларҙа нимәгәлер ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, сәмдәрен, һәләттәрен уятыу, - тип асыҡлай Рәшиҙә Хәй ҡыҙы клуб эшмәкәрлеге нигеҙен.

Ысынлап та, сит илдәрҙә хаҡлы ялға сыҡҡандар, хужабикәләр мотлаҡ ниндәйҙер шөғөл менән мауыға бит. Улар спортҡа ылыға, походтарға йөрөй, кеме йырлай, кеме бейей, кеме китап яҙа башлай. Йәғни, тормошта үҙен бөтөнләй икенсе юҫыҡта һынап ҡарай.

Ҡорама ҡорау сепрәк-сапраҡты, һәр ҡырҡындыны файҙаға ебәреү, тәләфләмәү күҙлегенән тыш, дауалау сифаттарына ла эйә икән. Психологтар фекеренсә, ҡорама ҡорағанда кешенең кәйефе күтәрелә, был эш төрлө борсоулы уйҙарҙан ҡотолдора, күҙ, бармаҡ, баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонтоһо ҙур. Был фараз менән "Кәрәҙ" клубы оҫталары ла килешә. Ҡатын-ҡыҙҙың күнел тороошо төрлөсә булырға мөмкин. Уның һәр ваҡыт ҡояшлы тороуы ла икеле. Шулай кәйефһеҙ генә эшкә тотоноп китһәң дә, кәрәкмәгән, бер эшкә ярамаҡһыҙ булған әйберҙәрҙән әйиып, йыуып, ҡоршай-ҡоршай торғас, эстә бер камил, бөтөн торош барлыҡҡа килә икән. Ҡулдарыңдың юҡтан ғына шундай матурлыҡ, ижади хеҙмәт тыуҙыра алыуын тойоу күңелде үҫтерә. Был хәл кеше организмы менән бәйле. Бармаҡ остары туранан-тура мейегә сигнал ебәрә һәм ҡорама ҡорағанда мейе эшмәкәрлеге әүҙемләшә, хәтер яҡшыра. Сағыу-сағыу матур туҡымалар менән эшләү күҙҙе дауалай икән.

"Кәрәҙ"ҙең әүҙем ҡорамасыларының береһе Зәкиә Суфиянова ғүмере буйы балалар уҡытҡан һәм уның был һөнәр эйәһе булыуы әлеге эш емештәрен аңлатыуында ла ап-асыҡ күренеп тора. Дәрес үткәргәндәй яуаплы ҡарай ул әлеге хеҙмәтенә:

- Әсәй-өләсәйҙәрҙең ҡорамаһына һоҡланып үҫкән кешемен, әммә үҙем бер ваҡытта ла бындайҙы эшләй, башҡара аламдыр, тип уйламағайным. Түнәрәккә килгәс тә минең төүге эштәремдең береһе бәләкәй генә сепрәк киҫәктәрен ялғап, ҡорама ҡорау булды. Кескәй генәнән башлайһың һәм дауам итеп, ҡайһы яҡҡа теләйһең, шул яҡҡа китәһең. Унан йөйҙәрен йәшереп ҡуйыу өсөн заманса таҫмалар үткәрәһең. Шулай уҡ хәҙер күптәрҙә джинсы салбарҙар, костюмдар тулып ята. Быны ул әйберҙәрҙе лә әрәм итмәү юлдарын уйлап таптыҡ. Джинсаларҙан мәңге туҙмай торған сумкалар, ултырғыс япмалары һәм башҡа биҙәктәр сыкты.

Түнәрәктә шөғөлләнә башлағас, итибар итә төштөм: ҡораманы Рәшиҙә Хәй ҡыҙы өйрәткән технология буйынса түшәктең аҫтын һәм өҫтөн үтә итеп теккәс, ул бик сифатлы килеп сыға, күпме тотонһаң да йәл түгел - туҙмай. Ябай материалдарҙан яһайбыҙ, тигәс, кизе-мамыҡ туҡыманан тыш, шәкәр тоҡтары ла эшкә егелде.

Ҡораманан түшәк эшләнә, тип кенә беләбеҙ беҙ. Ә ысынында унан йәнең теләгәндең барыһын да ҡорап була икән. "Кәрәҙ" клубы оҫталары ваҡ сепрәк киҫәктәренән күлдәктән башлап уйынсыҡ туптарға тиклем ҡоршай ала. Улар ҡулы башҡарған зауыҡлы әйберҙәр теләһә ниндәй заманға ла торошло.

Клубтың тағы ла бер ағзаһы Гүзәл Абдуллина ҡораманан яһалған уйынсыҡ туптарҙы, бәләкәй генә янсыҡ сумкаларҙы, кәнфит һауыттарын, сәңгелдәк тәтәйҙәрен, рюкзактарҙы, муйынсаларҙы күрһәтеп хайран итте. Фантазияның сиге юҡ икән был шөғөлдә.

"Кәрәҙ"ҙәрҙең тағы ла бер үҙенсәлеге - иҫке әйберҙәргә яңы төҫ, яңы ғүмер биреүҙә. Мәҫәлән, Тәнзилә Сәйетбатталова исемле апай һандыҡ төбөндә ятҡан кизе шәлдән иҫ киткес костюм-юбка сығарған. Шәлде дүрт ҡат итеп теккән дә, өҫ ҡат тегем буйын ҡырҡып сыҡҡан. Аңлатыуы ябай ғына булһа ла, әлләә ниндәй ҡатмарлы стилистарҙың хеҙмәте ята кеүек үҙендә. Был алым менән түнәрәктең бар ағзалары ла күкрәксәләр тегеп кейеп өлгөргән дә инде. Береһенән береһе сағыуыраҡ булып ултыралар.

Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның да яңылыҡтары бар был өлкәлә. "Корама стилендә төрлө осраҡтарға, байрамдамы, көндәлек кейә торғанмы, кейемдәрҙе тегеп була тигәнде иҫбатлау өсөн мин ошо намаҙ күлдәген тегеп кейҙем, - тип күлдәген кейеп тә күрһәтә ул. - Уның ендәренә, түшенә, арттан да, ошо ҡораманы биҙәү өлгөһө итеп ҡулландым". Бынан тыш, һабантуй күлдәге лә бар оҫтаның. Киләсәктә был кейемдәргә тыуған төйәктәренең ерле биҙәктәрен, орнаменттарын һалып яһамаҡсылар. Ә инде пландарға килгәндә, алдағы көндәрҙә "Кәрәҙ"ҙәр шөғөлдәрен тағы ла киңәйтә, зурайта төшәп, ҡыҙҙарға бирнәлек, йорт биҙәктәре булыр ҡаралты-түшәктәр, бүләктәр ҡорап сауҙа асмаҡсы. Ысынлап та, семәрле һандыҡ өҫтөндә ошондай бирнәлек һалып ҡуйыу үҙе үк милли колорит күренеше, дан, мәртәбә бит инде.

Әлегә кәрәҙҙәр клуб эштәре менән төбәк, республика күргәҙмәләрендә ҡатнаша, райондарының эшлекле, бөтмөр ҡатын-ҡыҙҙарының данын яҡлай. Бал ҡорттары кәрәҙ ҡойған кеүек ҡорап, ҡоршап, йөрәк йылыһын ҡушып, күҙ нурҙарын түгеп, зауыҡ һәм матурлыҡ тыуҙыра, сәнғәт кимәлендә ижад итә улар.

Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

**Дини ғәйеп тойғоһо.** Бының өсөн дин күп нәмәләр эшләгән. Камиллыҡты хаталы аңлау һәҙәмтәһендә ҡайһы бер диндәр үҙҙәренең субъектив әхлаҡи стандарттарына тап килмәүселәрҙә ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға тырыша. Күп конфессиялар барлыҡ баһаларҙың нигеҙендә камиллыҡ ята, тигән ҡараштан сығып фекер йөрөтә. Уларса, камиллыҡ - яҡшы, камилһыҙлыҡ - насар. Камиллыҡты бындай хаталы аңлатыу уның ысын мәғәнәһе асылын сикләй. Әгәр микроскоп аҫтына 10 мең бер төрлө нәмә һалһағыҙ, уларҙың бер-береһенән айырылыуын күрерһегеҙ. Һәр объект үҙенсәлекле һәм башкаларҙан айырылып тора. Был - биологик, физиологик, психологик, метафизик дәлил. Кеше - Ижади Аңдың сағылышы. Шуға күрә, камиллыҡ һәм башҡалар - сағыштырма билдәләмә. Ҡайһы бер диндәр, ике төрлө кеше Аллаһы Тәғәләне, Хәҡиҡәтте, Изге Яҙманы бер төрлө ҡабул итеүҙе талап итеп, үҙ артынан әйәреүселәрҙе уңышһыҙлыҡҡа дусар итә. Нисек кенә парадоксаль булмаһын, камил булыу өсөн ҡайһы бер етешһеҙлектәргә эйә булырға тейешһең. Етешһеҙлектәр - беҙҙе үҫтереүсе сара, улар кешелекте ижадҡа һәм тәҙәүгә илһамландыра.

Теләһә ниндәй гонаһтың насар икәненә ышаныуға программаланған кешегә гонаһтың йәки хатаның мөһимлеген, хатта уның матурлығын күреүе ҡыйын. Гонаһ - насар, тип раҫлап, диндарҙарҙың бик аҙы ғына үҙ хаталарыбыҙҙан һабаҡ алыуыбыҙҙы инҡар итә. Айырма бары шундалер беҙгә бирергә теләгән һабаҡты үҙләштерәбеҙме, юҡмы? Кешелектең ҡайһы бер билдәле ҡаҙаныштары етешһеҙлектәре ижади тырышлыҡҡа әтәргән кешеләр тарафынан эшләнгән. Тарихҡа үҙ өлөшөн индергән ниндәйҙер бөйөк кешенең биографияһы менән танышһағыҙ, уның йәмғиәт гонаһлы тип мөһөр баҫҡан, бик күп етешһеҙлектәре булған кеше икәнлеген күрерһегеҙ. Был дәлилде аңлау һеҙгә киләсәктә ғәйеп тойғоһона икенсе төрлө ҡарау мөмкинлеге бирер.

**Үҙ-үҙенә һалынған ғәйеп тойғоһо.** Был ғәйептең иң емергес формаһы. Уны рухи нормаларыбыҙҙы боҙғанда йәки йәмғиәт стандарттарына тап килмәүебеҙҙе тойғанда, үҙебеҙгә көсләп тағабыҙ. Был тойғо, үткән ҡылыҡтарыбыҙҙы анализлап, хата эшләүебеҙҙе йәки насар ғәмәл ҡылыуыбыҙҙы асыҡлағас, барлыҡҡа килә. Ҡылыҡтарыбыҙҙы, кемгәлер әйтелгән тәнҡит булһынмы ул, урлашыумы, ялғанмы, арттырып һөйләүме, дини ҡағиҙәләрҙе боҙоумы, әллә хәҙерге ҡиммәттәр системаһынан ҡарағанда дөрөҫ булмаған башҡа берәй ғәмәл эшләүме - барыһын да анализлайбыҙ. Күпселек осраҡта кисерелгән ғәйеп тойғоһо - үҙ-үҙебеҙгә битараф түгеллегебеҙҙе раҫларға һәм йәлләргә тырышыу ғына ул. Ғәмәлдә, үҙебеҙҙе нимә өсөндөр язалайбыҙ һәм үткәнде үҙгәртергә тырышабыҙ. Әммә был мөмкин түгел. Ғәйеп тойғоһо һәм үткәндәрҙән һабаҡ алыу араһында ҙур айырма ята. Үҙ-үҙегеҙгә һалған ғәйеп тойғоһо аша яза үтеү - невротиклыҡтың бер миҫалы. Әгәр үҙегеҙҙә ышаныс арттырырға теләһәгеҙ, был сифатығыҙҙан баш тартырға тура киләсәк. Ғәйеп тойғоһо һеҙҙе үткәндәр әсирлегендә тотоп, хәҙерге ваҡытта эшмәкәрлек һәләтен юғалттырасаҡ. Уның йоғонтоһона бирелеп, һеҙ әлеге тормошоғоҙ һәм киләсәккә йүнәлешегеҙ өсөн яуаплылыҡтан ҡасаһығыҙ.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).



## 25 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Маргарита Назарова". Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Познер" (16+).
01.05 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00, 11.00, 14.00, 17.00, 17.50, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35, 14.30, 17.30, 19.35 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал.
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Своя чужая". Сериал (12+).
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Деньги". Сериал (12+).
23.00 "Жириновский" (12+).
23.55 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Фальшивомонетчики. Гении и злодеи". "Иные. Особое измерение".
02.25 "Срочно в номер. На службе закона". Сериал (12+).
03.25 "Последний звонок Нестора Петровича. Михаил Кононов" (12+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учу башкирский язык".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**14.00 "Күңелем моңдары". Концерт (12+).**
**14.30, 16.30, 17.30, 21.30, 22.30 Новости.**
**14.45, 17.45, 01.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**18.30 Новости.**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Следопыт" (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Головокружение". Худ. фильм (12+).**
**02.00 "Соловьи прилетели". Спектакль (12+).**

## 26 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 15.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.30 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Маргарита Назарова". Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00, 11.00, 14.00, 17.00, 17.50, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35, 14.30, 17.30, 19.35 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Своя чужая". Сериал (12+).
18.15 "Прямой эфир" (16+).
21.00 "Деньги". Сериал (12+).
23.00 "Вести.doc" (12+).
00.45 "Чернобыль. До и после". "Приключения тела. Испытание холодом" (12+).
02.20 "Срочно в номер. На службе закона". Сериал (12+).
03.15 "Тайна лагеря Бадабер. Афганский капкан" (16+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас". Сериал (12+).**
**11.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 21.30, 22.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**14.00 "Тәмле".**
**15.00 "Фанташ".**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.30 "Гора новостей".**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко". Народные новости.**
**23.00 "Открытая дорога". Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Оль-ля-ля". Спектакль (12+).**

## 27 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.30 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Маргарита Назарова". Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00, 11.00, 14.00, 17.00, 17.50, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35, 14.30, 17.30, 19.35 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Своя чужая". Сериал (12+).
18.15 "Прямой эфир" (16+).
21.00 "Деньги". Сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент" (16+).
00.45 "Ожог". Фильм Аркадия Мамонтова. "Научные сенсации. Потепление - обратный отсчет" (16+).
03.00 "Срочно в номер. На службе закона". Сериал (12+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас". Сериал (12+).**
**11.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 21.30, 22.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.15 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Представляя интересы людей" (12+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 "Мечты сбываются". Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Убежавшие в счастье". Спектакль (12+).**

## 28 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.15, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Маргарита Назарова". Сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00, 11.00, 14.00, 17.00, 17.50, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.35, 14.30, 17.30, 19.35 "Местное время. "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Своя чужая". Сериал (16+).
18.15 "Прямой эфир" (16+).
21.00 "Деньги". Сериал (12+).
23.00 "Поединок" (12+).
00.45 "Вторая мировая. Русское сопротивление", "Человеческий фактор. Звуки музыки", "Человеческий фактор. Радиоактивность" (12+).
02.55 "Срочно в номер. На службе закона". Детективный сериал (12+).
03.55 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 21.30, 22.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (16+).**
**18.00 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко". Народные новости.**
**23.00 "Девушка из Монако". Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Вдова". Спектакль (12+).**

## 29 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.35 "Вечерний Ургант" (16+).
23.30 "Голос. Дети". Финал.
01.55 "Городские пижоны". "Genesis" (16+).
03.40 "Перси Джексон и похититель молний". Фэнтези (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00, 11.00, 14.00, 17.00, 17.50, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.35, 14.30, 17.30, 19.35 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Своя чужая". Детективный сериал (16+).
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Юморина" (12+).
22.55 Большой концерт Филиппа Киркорова.
01.35 "Нинкина любовь". Мелодрама (12+).
03.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Выступление Государственного академического ансамбля народного танца им.Файзи Гаскарова (6+).**
**11.00 "Курай-танец". Музыкальный фильм (6+).**
**11.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 23.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Журавлиная песнь". Фильм-балет (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Танцы народов Башкортостана" (6+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.30 "Байыҡ" представляет…" (6+).**
**16.00 "Автограф" (12+).**
**16.45 "Визит". Худ. фильм (12+).**
**17.15 "Орнамент".**
**18.00 "Йома". Нравственные ценности Ислама (0+).**
**19.00 "Вопрос + Ответ = Портрет" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 К Международному дню танца: "Бейеү-шоу" (6+).**
**23.15 Новости.**
**24.00 "Как выйти замуж за миллиардера". Худ. фильм (16+).**
**01.45 "Учитель танца". Спектакль (12+).**

## 30 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.35 "Доброе утро". Комедия
08.15 "Играй, гармонь любимая!"
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Маргарита Назарова. Женщина в клетке" (12+).
12.00, 15.00 Новости.
12.15 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.15 "Людмила Зыкина. "Здесь мой причал..."
16.05 "Путь Христа".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Кто хочет стать миллионером?"
19.20 "Угадай мелодию" (12+).
20.00 "Без страховки" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Без страховки". Продолжение (16+).
22.40 "Что? Где? Когда?" Финал весенней серии игр.
23.50 "Настя". Мелодрама (12+).
01.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция богослужения из храма Христа Спасителя.
04.30 "Пасха".
05.30 "Моя любовь". Мультфильм (12+).

### РОССИЯ 1

04.15 "Родня". Мелодрама.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40, 08.10, 11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан".
08.00, 11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Филипп Киркоров" (12+).
11.20 "Сильная слабая женщина". Мелодрама (12+).
13.00 "Отпечаток любви". Мелодрама (12+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов" (12+).
20.25 "Служебный роман". Комедия.
23.30 "Находка". Драма (16+).
01.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из храма Христа Спасителя.
04.35 "Крест" (12+).
05.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30, 21.30 Новости.**
**07.15 "Доброе утро!" (12+).**
**08.00 "Побег с планеты Земля". Мультфильм.**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Кукушкин чай". Телефильм.**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Судьба, выбранная мной". Спектакль (12+).**
**19.00 "Бай" (6+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Һылыуҡай-2016" (12+).**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели.**
**23.00 Прямая трансляция Пасхального богослужения из кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфа.**
**02.00 Новости недели (16+).**

## 1 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Трембита". Комедия.
07.55 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
09.45 "Ералаш".
10.10 "Пока все дома".
10.50 "Играй, гармонь, в Кремле!" Праздничный концерт.
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Играй, гармонь, в Кремле!" Праздничный концерт. Продолжение.
13.10 "Приходите завтра..." Комедия.
15.15 "Весна на Заречной улице". Худ. фильм.
17.10 "Голос. Дети". "На самой высокой ноте".
18.25 "Голос. Дети". Финал.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.20 "Если любишь - прости". Мелодрама (12+).
01.25 "Притворись моим парнем". Комедия (16+).
03.10 "Зубная фея". Комедия (12+).
05.00 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

06.15 "Кубанские казаки". Комедия.
08.35 "Невероятные приключения итальянцев в России". Комедия.
10.50 "Disco дача". Весенний концерт (16+).
12.45 "Служебный роман". Комедия.
14.00, 20.00 "Вести".
14.20 "Служебный роман". Комедия. Продолжение.
16.25 "Затмение". Драма (12+).
01.10 "Свадьбы не будет". Комедия (12+).
03.15 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
03.45 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости.**
**07.15 "Доброе утро!" (12+).**
**08.00 "Панда большая и маленькая". Мультфильм (0+).**
**08.30 "Йома". Нравственные ценности Ислама.**
**09.00 "Бай" (6+).**
**09.30 "4-й период" (6+).**
**10.00 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона.**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30, 21.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Наши годы". Док. фильм (12+).**
**18.30 "История признания" (12+).**
**18.45 "Корабли застывших морей" (12+).**
**19.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.45 "Корпорация "Еда". Худ. фильм (6+).**
**22.15 Ток-шоу "Красная кнопка" (12+).**
**23.00 "Специальный репортаж" (12+).**
**23.15 "Байыҡ-2016" (12+).**
**00.15 "Вечер.com" (12+).**
**01.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**02.00 "Глоток". Худ. фильм (18+).**
**03.30 "Черный иноходец". Спектакль (12+).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҮПКӘСЕЛЬҺЕҢМЕ?

## Тимәк, үҙеңә сир тартаһың



**Сит ил ғалимдары төрлө ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәрергә оҫта инде ул. Шаян, оптимист кешеләр оҙағыраҡ йәшәй һәм һирәк ауырый, тип тә дәлилләгәндәре бар. Хатта Питер Брюггер етәкселегендәге бер төркөм Швейцария ғалимдары был мәсьәләне тәрәндән өйрәнеү өсөн тағы ла тәжрибәләр үткәргән һәм кешенең уй-фекере һаулығына тәрән йоғонто яһауын асыҡлаған.**

Быны өсөн улар үҙ ирке менән экспериментта ҡатнашырға теләк белдереүсе оптимист һәм пессимистарға грипп ауырыуына ҡаршы прививка яһағандар. Өс айҙан һуң мыжыҡтарҙың 70 проценты грипп менән ауырып киткән. Оптимистар араһынан ауырыусылар һаны 30 процентҡа ла тулмаған. Ошо һөҙөмтәләрҙән сығып, ғалимдар кешеләргә йышыраҡ йылмайырға, күтәренке кәйеф менән йөрөргә, тик яҡшы нәмәләр тураһында ғына уйларға кәңәш итә.

Донъяға йылмайып бағыуҙан тыш, күнелдә үпкә һаҡлап йөрөүҙән дә тыйылырға кәрәк, ти тикшеренеүселәр. Сөнки йылдар буйы йә яҙмыш ауырлыҡтарына зарланып, йә ваҡытында ярҙам итмәгән дуҫтарына, күршеләргә үпкәләп, асыуланып йәшәгән кешенең һаулығы тиҙ ҡаҡшай. Үҙен эстән "ашаған" кешеләр ауырыуға һабышып, тормоштоң йәмен тапмай башлай. Уларҙың йәшәйеше ыңғай яҡҡа үҙгәрмәй, юлдарында үҙҙәре кеүектәр осрап, кәйефтәрен боҙоп тора. Үпкәселдәрҙең насар энергияһы шундай уҡ яман уйлы кешеләрҙе үҙенә тарта.

Нисек тормошто яйға һалырға, донъяла яҡшы кешеләр барлығына нисек яңынан ышанырға? Был һорауҙарға белгестәрҙең яуабы бер: үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ һәм беренеһенә лә үсекмәгеҙ. Һәр иртәне йылмайып ҡаршылау, изге ғәмәлдәр ҡылыу һәм башҡалар тураһында тик ыңғай фекерҙә булыу талап ителә. Тикшеренеүҙәр үткәргән белгестәр әйтеүенсә, тормошҡа ҡыуанып, позитив фекер йөрөтә башлаған кешеләр артабан уңышҡа өлгәшә. Яҡшылыҡ тураһында ғына уйлағандар күнел тыныслығына өлгәшә һәм һис ауырымай.

Әйткәндәй, сәләмәт булыу өсөн һөйләгән һүҙеңә лә иғтибар итергә кәрәк икән. Ә беҙ йыш ҡына шаяртып әйткән һүҙҙең мәғәнәһен уйлап тормайбыҙ, туҙға яҙмағанды һөйләп ҡуябыҙ. Уйнап ҡына әйткән һүҙҙең дә тәьсир көсө ҙур була. Шуға күрә, "күргем килмәй", "һине бер ҡасан да ишетмәһәм ине" тигән кеүек һүҙҙәр ҡулланмағыҙ. Был фразалар кешенең мейеһенә сигнал бирә, организм уны бойороҡ итеп ҡабул итә. Белгестәр хатта тормошта ошондай осраҡтар булыуын аныҡ миҫалдар менән дәлилләй. Мәҫәлән, аш-һыуға оҫта хужабикәләр әҙерләгән мул табын артында: "Ашҡаҙаным ауыртыр инде", - тип әйтәбеҙ, ти. Тәү ҡарамаҡҡа, хужабикә күпме ҡыҫтаһа ла, бындағы бөтә тәмләкәстәрҙе тәмләп ҡарап өлгөрөп булмаҫ ул, тигән фекерҙе еткерергә теләйһегеҙ. Әммә уйлап ҡараһаң, һеҙ ашҡаҙанығыҙ ауыртасағы тураһында һөйләйһегеҙ бит. Ошо һүҙҙәрҙе йыш ҡулланһағыҙ, ысынлап та сырхап китеүегеҙ бар.

Кеше ныҡ ҡурҡҡан саҡта "Йөрәгем ярыла яҙҙы", "Үлә яҙҙым" тип һөйләшә. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе ҡурҡыу тойғоһон аңлатыуҙан ғына тормай. Кеше ныҡ ҡурҡҡан сағында йөрәге туҡтап үлеп китеү ихтималлығы тураһында әйтә лә баһа. Шуға күрә, һәр һүҙегеҙҙе уйлап һөйләгеҙ. "Бер икмәктә ултырабыҙ", "Аҡылдан яҙып барам", "Алҡымға тығыла", "Үлерлек хәл" тигәнгә оҡшаш мәғәнәһенән төрләсә аңларға булған һүҙҙәр ҡулланмағыҙ. Гөмүмән, үҙегеҙҙең һаулыҡты ғына түгел, яҡындарығыҙҙың сәләмәтлеге тураһында ла уйлағыҙ. Көйгән саҡта ауыр һүҙҙәр әйтеп, күнелдәрен рәнйетеүҙән, ул һүҙҙәрҙең тормошҡа ашып ҡуйыуынан ҡурҡығыҙ. Сөнки ни тиклем йыш үпкәләү, үсегеүҙәргә биреләһен, насар һүҙҙәр һөйләйһең, талашаһың - шул тиклем ныҒыраҡ ауырыуға һабышаһың. Былдай осраҡта кеше бик ҡаты сирләй.

Табиптар ауырыуҙар кешенең характерына һәм йәшәү рәүешенә бәйле, тип иҫәпләй. Мөһим һайлау алдында торғанда дөрөҫ ҡарар ҡабул итмәнем, һөнәр һайлай белмәнем, хыялым тормошҡа ашманы, тип үртәлгән кешеләр аяҡтарға бәйле сирҙәргә бирешә. Күҙ ауырыуҙарына үҙе менән ҡәнәғәт булмаған, тормошона зарланған, бар нәмәгә негатив ҡараған һәм киләсәге өсөн ҡайғырған кешеләр дусар ителә. Үҙ көсөнә ышанмаған һәм үҙгәрештәрҙән ҡурҡыусыларҙың тын юлдары, күҙҙәре, ҡолаҡтары сирләй. Гастрит - тынғыһыҙ, үҙ көсөнә ышанмаған, күп борсолған, юҡ-бар өсөн йоҡоһонан яҙған кешеләрҙең ауырыуы. Шулай уҡ ундай холоҡлоларҙың тән ағзаларын көҙән йыйырып яфалай. Уҫал, агрессив, яндырайҙар ҡурылдай астмаһы менән сирләй. Дан һөйөүсе, һәр ерҙә беренселәр рәтендә булырға ынтылыусы, уңышһыҙлыҡҡа тарыуын ауыр кисереүсе кешеләр йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарына бирешеүсән. Әйткәндәй, Колумбия университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә йөрәк сирҙәре ярһыу, асыуланырға күп һорап тормаған кешеләргә хас булыуы асыҡланған. Улар өҫтәүенә хисле, үткер телле лә булһа, ашҡаҙан һәм бөйән сей яраһы эләктереүе мөмкин. Үпкәләрен онота алмаған уҫалдар бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарынан яфалана.

Табиптар яндырай, ныҡыш, тиҫкәре әҙәмдәрҙе "гипертоник характер" тип йөрөтә. Сөнки улар тап ҡан баҫымы күтәрелеүҙән ыҙа сигә. Башҡаларҙың фекерен ҡабул итә белмәгән һәм хаталаныуҙарын ауыр кисергән кешеләрҙе баш өйәнәге тота. Бынан тыш, ундайҙар дәғүәсел, үпкәсел була. Шуға күрә, борсолоу һәм күнел төшөнкөлөгөнә бирелеү өсөн сәбәптәр табылып ҡына тора. Һүҙгә әүәҫ, тиҙ тәьсирләнеүсән, кәйефтәре ярты сәғәт һайын үҙгәргән кешеләр ҡанында шәкәр күбәйеүенән яфалана.

Кешенең холҡона бәйле барлыҡҡа килгән ауырыуҙар тураһында бик күп яҙырға була. Йүнәлергә теләүселәр, әлбиттә, тәү сиратта эште үҙенең холҡон үҙгәртеүҙән башлар. Билдәле булыуынса, бәхетле кешеләр һау-сәләмәт. Шундай кешене үҙегеҙҙең урынға ҡуйып ҡарағыҙ: ул ошо осраҡта нимә уйлар, нимә кисерер ине? Былдай уйҙарҙан һуң күнел торошоғоҙ яҡшырып китер, хатта киләсәккә ҡарата өмөт уяныуы ихтимал. Ғөмүмән, һеҙҙе үпкәләткән кешеләрҙе онотоғоҙ һәм яратҡан, ярҙам итергә әҙер яҡындарығыҙ тураһында уйлап йөрөргә гәҙәтләнегеҙ. Алтылағы - алтмышта, тиһәләр ҙә, тырышҡанда холоҡто үҙгәртеп була. Ауыр уйҙарҙан арынып, оптимисҡа әүерелеү өсөн уңышһыҙлыҡ, кемгәлер ҡарата үпкәләр йыйылған "тоҡто" ташларға кәрәк. Психологтар бик ҡыҙыҡлы алым тәҡдим итә. Уның асылы шунан ғибәрәт: берәй насар хәтирә иҫегеҙгә төшһә, эске монологты ҡапыл туҡтатып, иғтибарҙы икенсегә йүнәлтегеҙ. Мәҫәлән, телевизор ҡабыҙырға, йыр-моң тыңлай башларға, урамдан үтеп барған кешегә ҡарарға мөмкин. Көнөнә нисә тапҡыр ауыр уйҙарға бирелеп, күңелһеҙләнеп алыуығыҙҙы иҫәпләр өсөн ҡағыҙға билдә ҡуйырға онотмағыҙ. Кискеһен ошо билдәләрҙе һанап, артабан күңелһеҙ тойғоларҙы әҙәйтергә тырышығыҙ. Психологтар әйтеүенсә, кеше бер ай эсендә яңыса фекерләргә өйрәнә. Утыҙ көндә тормошо үҙгәреп, һаулығы яҡшырып киткән кешеләр бар. Бөтә түҙемлекте туплап, яҡты уйҙар менән йәшәй башлау ғына шарт.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1437 һижри йыл.

| Апрель - Май (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (18) дүшәмбе | 4:21 | 5:51 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 26 (19) шишәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 27 (20) шаршамбы | 4:17 | 5:47 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 28 (21) кесе йома | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |
| 29 (22) йома | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:15 | 20:45 | 22:15 |
| 30 (23) шәмбе | 4:10 | 5:40 | 13:30 | 19:17 | 20:47 | 22:17 |
| 1 (24) йәкшәмбе | 4:08 | 5:38 | 13:30 | 19:19 | 20:49 | 22:19 |

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Атауҙы ауылынан Ришат Замалетдинов, Әбделмәмбәт ауылынан Фирүзә Ҡарабандина, Үтәгән ауылынан Ҡасим Йәһүҙин, Бурангол ауылынан Бәширә Усманова, **Йылайыр районы** Һултантимер ауылынан Зөһрә Йәнсурина, **Стәрлетамаҡ районы** Мырҙаш ауылынан Азамат Насиров, Айыусы ауылынан Наилә Хәйбуллина, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Көнһылыу Насретдинова, **Баймаҡ ҡалаһынан** Зифа Рәхимова, Мәрхәбә Ғайсарова, **Баймаҡ районы** Нигәмәт ауылынан Зифа Мөхәмәтйәнова, **Өфө ҡалаһынан** Бүләкбикә Хәйбуллина, **Хәйбулла районы** Баҡал ауылынан Раил Иҫәнйәлов, Нәғимә Мортазина, **Дәүләкән районы** Чапай ауылынан Илүсә Лотфрахманова, **Белорет районы** Сосновка ауылынан Рәшиҙә Зарипова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Бәхеткә-шатлыҡҡа төрөнөп, күнел тыныслығында, сәләмәтлектә йәшәргә яҙһын һеҙгә. Дуҫлығыбыҙ артабан да нығыныр тигән ышаныста ҡалабыҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе
**Зифа Йосоп ҡыҙы Рәхимованы**
күркәм байрамы - тыуған көнө менән ҡотлайым. Киләсәктә лә әле бик күп тыуған көндәрең менән ҡотланырға, бәхет нурына ҡойоноп, яҡындарыңды шатландырып, оҙон-оҙаҡ йәшәргә насип итһен Хоҙай!

**Иң ихлас ҡотлауҙар менән, Бибисара Азаматова.**

* * *

Баймаҡ районы Бәхтегәрәй ауылында йәшәүсе
**Фәрзәнә Ғарифулла ҡыҙы менән Риза Йомағужа улы Надирбаевтарҙы**
тыуған көндәре менән ҡотлайым.

Рух ныҡлығы, күнел көрлөгө, ҡоростай сәләмәтлек, ғаилә ныҡлығы һәм бәхет теләйем.

**Иң ихлас ҡотлауҙар менән, Бибисара Азаматова.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 апрель "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**24 апрель "Йософ һәм Зөләйха"** (Кол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**26 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса)

**28 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**29 апрель "Әбейүшкә@тушка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 апрель "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миннуллин), драма

**29 апрель "Елкендерһен йөрәктәрҙе бейеү ялҡыны"** 25-се концерт мизгелен ябыу. Филармонияның 25 йыллығына арнала

✓ Һәм кисекмәҫтән был сара профессионалдар ҡулына тапшырылырға тейеш. Шулай уҡ баһалама комиссияһында ла матурлыҡты нигеҙле баһалай белгән профессионалдар ултырыуы мотлаҡ.



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠЫҘҘАР МАТУР ҘА БИТ...

**Был аҙнала баш ҡалала егерме дүртенсе тапҡыр "Һылыуҡай" республика гүзәллек бәйгеһе үтте. Был конкурсты сибәр, нәзәкәтле, аҡыллы, йор һүҙле, һәр яҡлап та камил башҡорт ҡыҙҙарының үҙ-ара ярышы тип ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Күптәр конкурс еңеүселәре булған һылыуҙарға тиңләшергә, уларға ҡарап кейенергә, сәхнә оҫталығына төшөнөргә теләй. Тамаша ҡылыусылар быйылғы гүзәллек бәйгеһенән дә фәһемле яңылыҡтар, кәрәкле мәғлүмәт алып ҡайтырға өмөтләнгәйне лә...**





Сарала ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙы йыл да Башҡортостан юлдаш каналында күрһәтелгән көндәлектәрҙән ҡарап, улар тураһында фекер туплап, йомғаҡлау турында сығыштарын күрергә бара торғайныҡ. Быйыл был мөмкинлек булманы, һылыуҙар менән бары тик "Бәйләнештә" социаль селтәрендә булдырылған махсус төркөмдәге фотолары аша ғына таныша алдыҡ. Шуның өсөн дә, ахырыһы, конкурс барышында бер иш кейемдәрҙә сығыш яһаусы ун алты ҡыҙҙы бер-береһенән айырыуы ҡыйыныраҡ булды. Етмәһә, бәйгенең төп талабы булған дефилеларҙа ҡыҙҙар тоноҡ төҫтәрҙән тегелгән көндәлек кейем-һалымда сыҡты сәхнәгә. Быңдай ябайлыҡ менән ойоштороусылар башҡорт ҡыҙҙарының тыйнаҡлығын, баҫалҡылылығын сағылдырырға теләнеме икән?

Элеккеләренән айырмалы, ҡыҙҙар "Хужабикә оҫталығы" тигән бәйгелә лә һынау тотто. Беҙҙең гүзәл заттар йәшелсә, емештәрҙән торған төрлө турамалар әҙерләүгә маһир булып сыҡты. Ләкин "буласаҡ тормош иптәшенә" башҡорт кухняһынан ниндәй итле ризыҡ бешереп ашатырға белмәй, ҡаушап ҡалдылар. "Һарыҡ бешерәм", тип яуап биргән һылыуҙан тамашаны алып барыусы Фирҙәт Ғәлиев "бишбармаҡ", тигән һүҙҙе тартып тигәндәй алды. Башҡорт милли аш-һыуҙары өлкәһендәге белемдәрен генә түгел, ҡыҙҙарҙың зирәклеген дә тикшереүгә ҡоролған был бәйге бик матур килеп сыҡманы. Жюри ағзалары яуаптар менән ҡәнәғәт булдымы икән, ә бына тамашасылар башҡорт ҡыҙҙарының милли ризыҡтарҙы теҙеп атап сыға алмауы бер аҙ аптырата, әлбиттә.

Гүзәллек бәйгеһенең икенсе этабындағы "Рәсәй киноһы йылы"на арналған сценарийҙар конкурсы ҡатнашыусыларҙың үлем, мөхәббәт, бала ҡайғыһы, һуғыш, тарҡалған ғаилә темаһына арналған ижады менән иҫтә ҡалды. Йәштәрҙең ижадында позитив, ыңғай күренештәргә урын булмауының ғилләһе нимәлә һуң? Уларҙы тыңлаһаң, тормошобоҙ тик әхлаҡһыҙлыҡтан, яуызлыҡтан, ҡайғы-хәсрәттән генә тора һымаҡ. "Бейеүсе һылыуҡай" номинацияһында еңеү яулаған Миңлегөл Хәсәнова был күренешкә шулай тип аңлатма бирҙе: "Кеше күңелен тетрәндереплек, илатырлыҡ хәл-ваҡиғалар тамашасыларҙың хис-тойғоларына ныҡыраҡ тәьҫир итер, тип уйланыҡ. Шуға күрә, йәмғиәтебеҙҙә ярылып ятҡан төрлө проблемаларға арнап сценарийҙар яҙҙыҡ. Беҙ һөйләгән һүҙҙәрҙән тамашасылар ниндәйҙер фәһем дә алырға тейеш ине". Әммә... Фәһем түгел, тетрәнеү генә кисерҙе тамашасы. Тормошобоҙ гел генә ундай ҡара һыҙаттарҙан тормайҙаһа, тигән һығымта яһалды.

Хәйер, береһенән-береһе һылыу, ҡашыҡҡа һалып йотмалы ҡыҙҙар һис ғәйепле түгел был бәйгенең шундай кәйеф тыуҙырыуында. Ғәйеп конкурсты шундай түбән кимәлгә төшөргән ойоштороусыларҙа. Һәм кисекмәҫтән был сара профессионалдар ҡулына тапшырылырға тейеш. Шулай уҡ баһалама комиссияһында ла матурлыҡты нигеҙле баһалай белгән профессионалдар ултырыуы мотлаҡ. Был фекерҙе тамашаға килгән күптәр раҫланы.

"Һылыуҡай - 2016" республика гүзәллек бәйгеһендә аптырашта ҡалдырған бик күп күренештәр тураһында яҙырға булыр ине, әлбиттә. Унда ихлас ҡатнашҡан һылыуҡайҙар күңелен ҡыйғы килмәй. Ә конкурстың һөҙөмтәләренә килгәндә... Гран-при Күгәрсен районы һылыуы Эльвира Ҡарамышеваға бирелде.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҺҮҘЛЕК

## БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Кәкүк ҡамышы** - сыть бурая
**Кәкүк ситеге** - венерин башмачок
**Кәкүк тубылғыһы** - мытник
**Кәкүк әшәлсәһе** - кукушник длинношпорцевый
**Кәрешкә** - вика
**Кәрләс** - живучка
**Ҡабаҡ** - тыква
**Ҡава** - кава
**Ҡаҙ йыуаһы** - лук гусиный
**Ҡаҙаяҡ, абаға** - папоротник
**Ҡаҙ үләне** - лапчатка гусиная
**Ҡаҡы** - свербига восточная
**Ҡалҡанут** - щитовник
**Ҡалмыҡ йыуаһы** - лук поникающий
**Ҡамғаҡ** - прекати-поле
**Ҡамыл** - стерня
**Ҡамыш** - камыш, тростник
**Ҡамыш ҡылған** - чий
**Ҡандала үләне, һары донник** - донник лекарственный
**Ҡарабойҙай** - гречиха
**Ҡара борос** - перец черный
**Ҡара борсаҡ, мал борсағы** - бобы
**Ҡара бөрлөгән** - ежевика
**Ҡарағай** - сосна
**Ҡарағас** - лиственница
**Ҡарағат** - смородина
**Ҡара ҡарағат** - смородина черная
**Ҡарағубан** - ячмень обыкновенный
**Ҡаразирә** - дурман
**Ҡара ерек** - ольха черная или клейкая
**Ҡара көртмәле** - черника
**Ҡаратамыр, һырмыҡсын** - черно-корень лекарственный
**Ҡара сәскә** - черноголовка
**Ҡара һырлан** - незабудка песчаная
**Ҡара тут ағасы** - шелковица черная
**Ҡара һоло** - овсюг
**Ҡара саған** - клен остролистный
**Ҡарбуз** - арбуз
**Ҡарға ҡуҙағы** - чина Гмелина
**Ҡарлуғас үләне** - чистяк
**Ҡарға күҙе** - вороний глаз

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨЛГӘНДӘН АЛМА ... бөлгәндән һорама

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ул үҙен аҡыл эйәһе тип иҫәпләй һәм үҙенең ҡасан да булһа был донъяны ташлап китәсәген аңлап, бер теләк менән генә янып йәшәй: теге донъяла ожмахҡа эләгергә, бының өсөн фанилыҡта саҡта мөмкин тиклем күберәк изге эштәр башҡарып, Хоҙай алдында яҡшы күренергә. Шуға ла ул мосолмандарға фарыз бар ҡағиҙәләрҙе еренә еткереп үтәй, намаҙҙарын да ваҡытында уҡый.**

**Берҙән-бер көндө ул үҙенең генә гонаһ ҡылмауы етмәй, ә әйләнә-тирәләгеләрҙе лә насар эштәрҙән ҡурсырға кәрәк, тигән ҡарарға килә. Уның иғтибары күршеһенә, бик хәтәр ҡомарлы уйынсыға йүнәлдерелә. Күршеһенең уйынға әүәҫлеге ауырыуға әйләнгән була. Уйнамаҫҡа, тип, әллә күпме ант итһә лә, һүҙендә тора алмай, әллә нисә тапҡыр яңынан башлай.**

**Аҡыл эйәһе күршеһен был насар ғәҙәтенән арындырырға була. Ләкин өгөтләүҙәр генә бер файҙа ла бирмәҫен дә аңлай. Ҡомарлы уйын - яуызлыҡ, ә уның менән мауығыу - оло гонаһ икәнен кем белмәй! Шуға ла аҡыл эйәһе икенсе төрлө юл һайлай: күршеһе ҡомарлы уйын уйнарға киткән һайын уның өй тупһаһына ауыр гонаһ йөгө тураһында иҫкәртеү өсөн бер таш һалып ҡуя. Уйынсы өй тупһаһы алдындағы таш өйөмө үҫкәндән-үҫә барғанын күрә. Ул күршеһендәге аҡыл эйәһенең уны өгөтләмәй, һүҙҙәр менән битәрләмәй генә уны гонаһы тураһында иҫкәртеүен аңлай. Шуға ла йортона ҡайтҡан һайын уйынсы үҙенең ихтыярһыҙлығы өсөн оялып, шулай тип уйлана: "Күршеһе бит уның насар ғәҙәттәре өсөн көйөнә, Алланан уның гонаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Мине ошо насар ҡылығымдан ҡотҡарыуға күпме көс сарыф итә. Ниндәй түбән йәнле әҙәм мин! Ниндәй гонаһлымын мин! Аҡылым менән күршемдең тырышлыҡтарын таныйым, уға рәхмәтле булыуҙан йөрәгем шартлар сиккә етә, ләкин ул да миңә ярҙам итә алмай, мин был бысраҡҡа шул тиклем ныҡ батҡанмын. Ҡайғы миңә, ҡайғы!"**

**Бер саҡ уйынсы мәсеткә бара һәм уның күршеһенең тырышлыҡтарын тейешенсә баһалаһын өсөн, Хоҙайға ялбара. Күп йылдар үтә. Баяғы гонаһлы уйынсы ла, уны ҡурсалаусы изге кеше лә баҡыйлыҡҡа күсә. Аллаһ илсеһе уларҙы баҡыйлыҡ ҡапҡаһы алдында ҡаршылай ҙа, "Һин минең менән ожмахҡа бараһың", тип, уйынсыға ишаралай. Ә изге кешегә тамуҡ ҡапҡаһын күрһәтә. "Юҡ, юҡ, - тип ҡысҡыра уйынсы. - Һин яңылыштың. Минең урыным ожмахта түгел, мин оло гонаһ эйәһемен. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, мин быны яҡшы беләм. Ожмахтағы урын минең изге күңелле күршемдеке..." "Һинең икеләнеүҙәрең урынлы түгел, - ти Алла илсеһе. - Мин Хоҙай ҡушҡанды ғына эшләйем. Күп һөйләнеп, ожмах ҡапҡаһы алдындағы башҡаларҙы тотҡарламаҫ өсөн, аңлатам: һин гонаһ ҡылдың - һүҙ юҡ. Әммә гонаһтарың тураһында иҫкә алған һайын һин оялыу һәм үкенеү кисерҙең. Ә йөрәгеңдә һин оло изгелек йөрөттөң - һинең турала хәстәрлек күреүсе күршеңә рәхмәт тойғоһо ул. Күршеңә килгәндә иһә, ул бөтөн ошо йылдар буйы үҙенең нәфсеһен генә ҡандырҙы. Ул һинең гонаһлы йәнеңдән алда, иң тәүҙә үҙенә сауап алыу тураһында уйланы. Ундай тәкәбберлек һинекенә ҡарағанда ла гонаһлыраҡ. Уның һинең тупһаңа өйгән һәр ташы уның камил булмауын белгерткән үлсәү яғында булып сыҡты..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 703/04